ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 август - сентябрь (урағай - һарысай)
2019
№35 (869)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

8 сентябрь
2019
БЕРҘӘМ ТАУЫШ БИРЕҮ КӨНӨ

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙға 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланыуы тураһында хәбәр итәбеҙ. 1 сентябрҙән республиканың һәр ҡала-район-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Был турала таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***Мөхәрририәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙ үҙебеҙ ҡатайҙар!



7

"Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем..."



8-9

Уғатарҙар...



Ғафуриҙа бәйге ойоштороҙо 12

Еңел быу менән,

йәки мунса йыуыныу өсөн генәмә?



13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсеү менән бәйле шатмы, ризамы һеҙ? Шәмбе көндәрен нисек үткәрергә уйлайһығыҙ?

***Иҙел МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ишмырҙа дөйөм белем биреү мәктәбе директоры:*** Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсеү тураһында тәҡдим тәүҙә икеләнеберәк ҡабул ителһә лә унын ыңғай яҡтарынын бәхәсһеҙ булыуын да аңлап, бик хуп күрҙек. Дөрөҫ, яңы уҡыу йылынан башлап беҙ уны ғәмәлдә ҡуллана башлағас, был системаның ыңғай яҡтарын раҫлаусы аныҡ миҫалдарға ла эйә булырбыҙ, юғиһә, беҙҙең башланғыс кластар ғына биш көнлөктә ни бары ике ай уҡып өлгөрҙөләр. Әлегә шикләнмәйенсә шуны әйтергә була: Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров иң беренсе сиратта һыҙыҡ өҫтөнә алып китеүенсә, был балаларҙың сәләмәтлеге, улар үҙҙәрен шат һәм бәхетле итеп тойоуҙары өсөн кәрәк. Ысынлап та, ике көн ял балаға һәм ата-әсәгә ваҡыттарын күберәк бергә үткәрергә мөмкинлек бирәсәк. Алты көнлөк уҡыу программаһын биш көнгә бүлеп сығыу көсөргәнеш тыуҙырмаҫмы тип тә борсолоу белдереүселәр бар. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо көндәрҙә Роспотребнадзор мәктәп уҡыусыларына, айырыуса башланғыс кластарға артыҡ сәғәттәр менән көсөргәнеш тыуҙырмау талабын ҡуйып, һәр класс өсөн уңайлы булған сәғәттәр һанын тәҡдим итте: 1-се кластар өсөн дәрес көнөнә - дүрт, 2-4-се кластарға - биш, 5-6 кластарға - алты һәм 7-11 кластарға ете сәғәттән дә артмаҫҡа тейеш. Яңы уҡыу йылына календарь килде, дәрестәр теҙмәһе төҙөгәндә был тәҡдимдәр иҫәпкә алынасаҡ.

Уҡыу аҙнаһын ҡыҫҡартыу ниндәйҙер бер предмет, әйтәйек, башҡорт теле сәғәттәре иҫәбенә башҡарылмаҫмы, тип шөбһәләнеүҙәр нигеҙһеҙ. Һәр сәғәт үҙ көсөндә ҡала. Был уҡытыусыларҙың эш хаҡын кәметеүгә лә алып килмәйәсәк. Өлкән кластарға ете сәғәтлек дәрес көндәре аҙнаһына бер-ике тапҡыр ғына тура киләсәк. Мәктәптәргә ике көнлөк ял биреү файҙаға ғына булыр, тип ышанабыҙ, тик, Радий Фәрит улы әйтмешләй, уҡыуҙан бушаған шәмбеләр бушҡа үтергә тейеш түгел. Тәҡдим ителгәнсә, айына бер тапҡыр тематик шәмбеләр үткәреләсәк, тик эш шунда: улар балаларҙы ял көнө лә мәктәпкә тартып торған ҡыҙыҡлы, файҙалы саралар булырға тейеш. Был йәһәттән айырым предметтар алып барыусы уҡытыусыларға, класс етәкселәренә күнегелгән, тапалған ысулдар ярҙам итмәйәсәк. Бала күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу осҡондары ҡабыҙыу, унын фантазияһын уятыу өсөн үҙеңә лә ҡыҙыҡһыныусан булыу, һәр ваҡыт ниндәйҙер идеялар менән янып эшләү талап ителәсәк. Шулай булмағанда, "ижади шәмбе"нең "мәжбүри шәмбе"гә әйләнеүен көт тә тор. Әйткәндәй, яңыраҡ Башҡортостан юлдаш теле-каналынан яңылыҡтарҙа Хәйбулла районы Целинный мәктәбенең робот техникаһы түңәрәге хаҡында бик ҡыҙыҡлы тапшырыу барҙы. Хәбәрсе һөйләүенсә, балаларҙы хатта каникул көндәрендә лә мәктәптән "ҡыуып та" сығарып булмай: улар робот-машиналарҙан тотош армия йыйған, уларға программаларҙы үҙҙәре төҙөй һәм камиллаштыра; республика, төбәк-ара ярыштарҙа даими рәүештә беренсе урындар яулай. Ижади шәмбеләр бына ошондайыраҡ техник түңәрәктәр ойоштороу, шулай уҡ балаларҙың башҡа төр һәләттәрен үҫтереү өсөн бик уңай мөмкинлектәр тыуҙыра.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## БЕҘҘЕҢ ЕГЕТТӘР ҠАЙҘА?

**Гәзиттә ошо рубрика аҫтында баҫылған мәҡәләләрҙе ҡалдырмай уҡып барам. Кеше хәҙер оҡшағанын да, оҡшамағанын да ярып һала, тураһын әйтә. Шуға бындай мәҡәләләрҙә тормошобоҙҙоң бөтә яғы ла сағыла һәм шуның менән дә улар миңә яҡын. Әллә ҡайҙағы диңгеҙ артында йәшәгәндәр тураһында түгел, нәҡ үҙебеҙ, көнитмешебеҙ тураһында уҡыу һәм фекер алышыу күпкә файҙалыраҡ та, ҡыҙығыраҡ та. Бөгөн ҡулыма ҡәләм алып гәзиткә яҙырға ҡарар итеүем дә үҙемде шатландырған һәм борсоған күренештәрҙең күңелемдә тупланып өлгөрөп етеүендә.**

Йәй аҙағы уңыш йыйыуҙың иң ҡыҙған осоро. Яҙ, йәй буйы баш күтәрмәйенсә эшләгәндәр баҡсаларынан мул уңыш алып ҡыуана, ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә. Ләкин һүҙем шәхси баҡсалар тураһында түгел, ә баҫыу-ҡырҙар тураһында булыр. Заманында диңгеҙҙәй йәйрәп ятҡан иген баҫыуҙары юҡ хәҙер, башҡа аграр культуралар ҙа күпкә әҙерәк үҫтерелә. Шулай ҙа ҡайһы бер район уңғандарының эше һоҡландыра.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

## "ӨФӨНӘН ҺӨЙӨҮ МЕНӘН"...

### еңеүселәр араһында



**Мәҡәләне 16-сы биттә уҡығыҙ.**

12+

*Сергей Шакуров яҡут режиссерын Гран-при менән ҡотлай.*

✓ *Исмаһам, бер көнгә булһа ла балаларҙың ыҙаһы кәмер. Эргәмдә, күҙ алдында булырҙар. Шуға ла мәктәптәрҙә ошо яңы тәртипте индергән өсөн республика етәксеһенә бик рәхмәтлемен.*



*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# БЕҘҘЕҢ ЕГЕТТӘР ҠАЙҘА?

**(Башы 1-се биттә).**

Күгәрсен, Мәләүез районДарында булып, унда барған ауыл хужалығы эштәренең әүҙемлеген күреп шатланып ҡайттым. Хәс тә элекке кеүек баҫыуҙарҙа комбайндар иген һуға, кукуруз һәм көнбағыштар тирбәлә. Ҡарап тороуы ҡыуаныс. Бына ошондай фиҙаҡәр ер эшселәре тураһында күберәк яҙһалар, уларҙы күтәрһәләр ине ул. Әтеүсә, артист, йырсыларҙың ғына тормошон ихлас яҡтыртабыҙ, ә йәштәргә үрнәк булырҙай кешеләрҙе ваҡытында күреп баһаламайбыҙ.

Шулай уҡ Мәләүез ҡалаһы янында тотош баҫыуҙарҙы ҡуртымғамы, әллә һатып алыпмы, еләк-емеш йәшелсә үҫтереүсе эшҡыуарҙың эшмәкәрлеген күрергә тура килде. Урта Азия вәкиленең ете ят ергә килеп, шул тиклем ҙур масштабта эш ойоштора алыуы һоҡландыра. Баҫыуҙарҙа бер сүп әҫәре юҡ, уңыш мул. Ләкин ошо уҡ эште ни өсөн үҙебеҙҙең башҡорт егеттәре асмаған икән, тигән уй мейене телеп үтә. Үҙ ерендә хужа булыр аҫаба башҡорт ситтән килеп төпләнгән кешегә ялланып эшләй. Эҫе ҡояшта, әсе елдә көндәр буйы бил бөгөп, 500 һумға риза булып йәшәй. Нимә ҡамасаулай эш башларға? Моңһоҙлоҡмо, ялҡаулыҡмы, эште ойоштороуҙан һәм яуаплылыҡтан ҡурҡыумы, эшҡыуарлыҡ һәләтенең булмауымы, әллә бюрократик кәртәләрме? Аныҡ ҡына яуап биреүе ауыр. Һәр хәлдә, республиканың бөтә төбәгендә лә үҙебеҙҙең эшлекле егеттәрҙе күрге килә. Ә ундайҙар, биллаһи, бар. Мәҫәлән, Әбйәлил районының бер ауылында унған фермер ике меңдән ашыу ҡаҙ көтөп һатыуға сығара. Ләкин, ҡыҙғаныҫҡа күрә, уның эшмәкәрлегенә аяҡ салырға тырышыусылар байтаҡ. Хатта ҡаҙҙарын йылғаға төшөрөүен өнәмәйенсә, экологтар саҡырып, яу ҡуптарыусылар ҙа юҡ түгел. Был хәлгә көлөр инек, әгәр ҙә башҡорттоң үҙ милләттәшенә аяҡ салырға, эштең тик кире яғын ғына күрергә тырышыуына илағы килмәһә...

Һуңғы йылдарҙа "ойоп" барған республика бер йыл тирәһе ҡапыл йоҡоһонан уянып эшкә тотонған кешене хәтерләтә. Элек ниндәйҙер мәсьәләһен хәл итә алмайынса, ҡайһы бер власть вәкилдәре менән бер үҙе көрәшергә мәжбүр булғандарға ниндәйҙер юлдар асылды. Һәр хәлдә, үҙен борсоған проблеманы киң йәмәғәтселек һәм етәкселәргә ишеттереү мөмкинлеге алды. Шулай уҡ республиканың бөтә төбәктәрендә лә төрлө социаль проекттар башланғыс алды, төҙөлөш эштәре әүҙемләште, быға тиклем иғтибарҙан ситтә ҡала килгән мәсьәләләр өҫкә ҡалҡты. Һәм, иң ҡыуаныслыһы, уларҙы хәл итергә тырышыу бар. Мәҫәлән, райондарҙы яңы автобустар менән тәьмин итеүҙе бик хуплайым. Ләкин шул уҡ ваҡытта райондарҙағы ҡайһы бер ауылдар әле булһа транспортҡа бәйле ауырлыҡтар кисерә. Бөрйән районының Ырғыҙлы һәм шул яҡтағы башҡа ауылдарға автобус йөрөмәгәненә ни заман икәнен хәҙер онотоп та бөттөләр инде. Исмаһам, көн аша булһа ла иртәле-кисле автобус ебәреү мөмкинлеген ҡарау кемдең бурысы икән? Ялтырап ятҡан асфальт юлдан кем дә елдермәҫ, ә соҡор-саҡырлы, ташлы юлдан да йөрөрлөк йәмәғәт транспорты менән тәьмин итеү һәр кемдең дә хәленән килмәй шул.

Яҙыр фекерҙәрем күп булһа ла, ошо урында нөктә ҡуяйым. Барлыҡ гәзит уҡыусыларға ла именлек теләйем.

**Сәүйә МУСИНА.**
**Белорет районы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсеү менән бәйле шатмы, ризамы һеҙ? Шәмбе көндәрен нисек үткәрергә уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Әнисә ҒӘЙНУЛЛИНА, өс бала әсәһе:*** Һүҙҙе бер аҙ уратыбыраҡ башлайым инде, сөнки мәктәп проблемаһы беҙҙең өсөн бик ауыртҡан темаға әйләнде. Бәләкәй ауылдарҙа мәктәптәрҙе бөтөрөп, бик насар эшләнеләр. Элек ауылыбыҙҙа бер бала уҡып йөрөгәндә лә белем биреү учреждениеһын япманылар. Әле, шөкөр, уҡыусылар һаны тотош етәү булып китте. Был бәләкәй ауыл өсөн үҙенә күрә ғорурлыҡ. Тик шуныһы борсой: ғәзиз балаҡайҙарыбыҙ 10 саҡрымдағы күрше ауылға йөрөп уҡый. Бөтә бәләләрҙең башы шунда ла инде. Өлкән ҡыҙыбыҙ быйыл 6-сыға, уға етәгеһе улыбыҙ 4-се класҡа бара. Беҙҙән арғы утарҙан тағы ике баланы барып алып килгәнсе, беҙҙекеләргә микроавтобус көтөп торорға тура килә. Ҡайһы саҡ автобус боҙола, бер нисә тапҡыр шулай юлда ла ватылып ултырҙылар. Төрлө класта уҡығанлыҡтан, бәләкәйҙәр, дәрестәре күптән бөтһә лә, башҡаларҙың сыҡҡанын көтөп ултырырға мәжбүрҙәр. Район, ауыл исемен әлегә яҙмай тороуығыҙҙы үтенәм, сөнки былтыр Мәскәүгә хат яҙғандан һуң бик етди һөйләшеү булды, быйылғы уҡыу йылына яңы автобус вәғәҙә итәләр, бәлки, ысынлап биреп тә ҡуйырҙар - кем белә, шуның өсөн власть әһелдәре менән боҙолошмай тороу хәйерлерәк. Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсеү хаҡында хәбәргә шуға ла мин бик шатландым: исмаһам, балалар тағы ла бер көн булһа ла өйҙә торасаҡ, туйғансы йоҡларҙар, ваҡытында ашарҙар, тип ҡыуанам. Юғиһә, ҡышҡы һыуыҡ йә буранда таңғы сәғәт 7-нән үк сығып китәләр, ә һин йәнеңде ҡулыңа алып, йәш бала менән өйҙә ултырып ҡал. Ниндәй әсәнең шул хәлгә йөрәге сыҙар! Ә былай, исмаһам, бер көнгә булһа ла балаларҙың ыҙаһы кәмер. Эргәмдә, күҙ алдында булырҙар. Шуға ла мәктәптәрҙә ошо яңы тәртипте индергән өсөн республика етәксеһенә бик рәхмәтлемен. Балаларҙың ял көндәрен файҙалы итеп үткәреүенә иғтибар биреп тә дөрөҫ эшләйҙәр. Беҙҙең балалар ҙа, аталары ялға ҡайтһа (Себерҙә вахта ысулы менән эшләй), бергәләп балыҡҡа, еләккә, бәшмәккә йөрөйҙәр; йорт-хужалыҡ эштәрендә булышалар, теннис йә шахмат уйнап кинәнәләр.

***Айгөл ШАҺИМОРАТОВА, Өфө ҡалаһы 130-сы дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы:*** Биш көнлөк уҡыу аҙнаһы булдырылыуға бик ҡыуандым. Былтыр башланғыс класта уҡыған ҡустымдың шәмбе көн мәктәпкә бармай өйҙә тороп ҡалыуына көнләшә инем. Ниһайәт, беҙгә лә был бәхет тәтейәсәк. Тик йәл, был системала бер йыл ғына уҡып ҡалырға тура килә: мин быйыл 11-се класҡа барам. Шуға ла бер аҙ ғына буш ваҡыт та бик ҡәҙерле беҙгә, ни өсөн тигәндә, шәмбе көн мин бер түгел, ике репетиторға йөрөйәсәкмен: әсәйем һөйләшеп, сәғәте-минутын билдәләп тә ҡуйҙы инде. Мәктәпте бөтөргәс, Мәскәү вуздарының береһенә (аныҡлап әйтмәй торам әлегә) инергә йыйынам. Былтыр химиянан аҙнаһына бер тапҡыр дәрестәр бөткәндән һуң йөрөнөм өҫтәмә дәрес алырға. Ете дәрестән һуң ҡайтып тамаҡ ялғарға ла өлгөрмәйем, тағы сығып китәм: репетитор ҡаланың икенсе осонда йәшәй, уның өйөнә барып еткәнсе, сәғәттән ашыу ваҡыт үтеп китә. Быйыл, исмаһам, бының өсөн шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрен дәрес әҙерләүгә лә иркенләп файҙаланырға була. Дөрөҫөн әйткәндә, шәмбе ял бирҙеләр, тип өйҙә ятырға тура килмәйәсәк беҙгә, сығарылыш кластарға. Барыбер мәктәпкә айырым фәндәрҙән өҫтәмә дәрестәргә, консультацияларға йөрөргә тура киләсәк. Башҡаса мөмкин дә түгел: уҡырға инергә һәм мотлаҡ бюджет урынға эләгергә тырышырға кәрәк. Ике көн ялды Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеү өсөн файҙаланасаҡмын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

**✓5 сентябрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһына дәғүә итеүсе бөтә кандидаттар, шулай уҡ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та, тура эфирҙа бер майҙансыҡта осрашасаҡ. Сәйәси дебатты 19.30 сәғәттә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында, "Россия-1", "Россия-24", РБК ТВ, UTV телеканалдарында һәм "Бәйләнештә", Facebook һәм башҡа социаль селтәрҙәрҙә ҡарарға мөмкин буласаҡ.**

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Израиль Дәүләтенең Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Гарри Корен менән осрашыуында Өфөнән Израилгә тура авиарейстар асыу кәрәклеге тураһында һүҙ барҙы. Башҡортостан менән Израиль араһында тышҡы сауҙа әйләнеше тураһында һөйләгәндә, Радий Хәбиров 2018 йыл йомғаҡтары буйынса уның бөтәһе 2 миллион доллар тәшкил итеүен әйтте.

✓Башҡортостанда банкрот тип танылған төҙөүселәрҙең өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыусылар алдындағы бурыстарын көйләү фонды ойошторолдо. Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, фонд булдырыу - алданған өлөшсөләр алдындағы бурыстарҙы үтәү эшендә мөһим этап. "Фонд ойошторабыҙ, уны бюджет аҡсаһы менән тулыландыра һәм төҙөлөшкә йүнәлтә башлайбыҙ. Башҡаса булмай", - тине республика етәксеһе.

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһында һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстарының (КОИБ) мөмкинлектәре күрһәтелде. Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко республика башлығын һайлауҙа һайлаусылар һаны 1000 кеше тәшкил иткән 225 участкала КОИБ-тар ҡуйыласағын билдәләне. КОИБ-тар һайлауға йомғаҡ яһау ваҡытын ҡыҫҡарта, хәҙер һәр протоколдың QR-коды бар, уны фотоға төшөрөргә һәм махсус программа ярҙамында смартфонда йомғаҡлау протоколын уҡырға мөмкин.

✓27 августа Рус география йәмғиәте Башҡортостан төбәк бүлексәһенең дөйөм йыйылышында Башҡортостан Хөкүмәтенең элекке вице-премьеры, хәҙер БДПУ ректоры Салауат Сәғитов ойошманың яңы етәксеһе итеп һайланды.

✓ *"Салауат" дивизия гәзите 1919 йылдың сентябренән 1920 йылдың майына тиклем Петроградта көн һайын башҡорт телендә (ғәрәп алфавиты менән) баҫылып сыға.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# КӨЛӘ-КӨЛӘ КӨҘ БУЛЫРМЫ?

**Ер йөҙөнә көҙҙөң төүге айы - һарысай аяҡ баҫа. Илай-илай яҙ була, көлә-көлә көҙ була, тип әйткән халҡыбыҙ. Тик һуңғы йылдарҙа климат әҙәм балаһын тамам аптыраштa ҡалдырып, "боҙло һыуҙан - ҡыҙған табаға" эффекты менән аңҡы-тиңке итҡәнлектән, хәҙер синоптиктар ҙа һауа торошон алдан фаразларға баҙнат итә алмай, күрәһең.**

Август урталарында ла хатта сентябрь айына ҡарата бер ниндәй алдан күҙаллауҙар юҡ. Был айҙағы һәр көн тапҡырына һауа температураһын тоҫмаллап яҙып сығыуҙан башҡа мәғлүмәт бирелмәне. Бына ҡасан кәрәк халыҡ аҡылын һәм һынамыштарын файҙаланып, йыл, миҙгел, иртәгәһе көн килешен әйтеп бирә белеү, һуңғы йылдарҙағы климат торошо буталыштарының сәбәптәрен аңларға тырышыу, катаклизмдарға әҙер булыу һәм иң яҡшыһы - ата-бабаларыбыҙ кеүек, йондоҙҙарға ҡарап фекер итеү. Белем көнө, Халыҡ-ара грамоталылыҡ көнө тип, шуға ла 1 һәм 8 сентябрь һайын билдәләнеүсе даталар яҙыу танып, уҡый-һыҙа белеүҙе генә аңлатмауы көн кеүек асыҡ. Цивилизацияһына, шул мөхиттә көн итеүсе халҡына күрә, ул боронғо бабаларыбыҙ өлгөһөндә донъяуи грамоталылыҡҡа, белекleкkә, ҡыҙыҡһыныусанлыҡҡа, теге йә был күренештәрҙе аңлай-аңлата белеүҙе лә үҙ эсенә ала, сөнки билдәле мәғрифәтсе-ғалим Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев әйтеп ҡалдырған өс фарыз белем өлкәһенең береһе тап әлеге күк есемдәре тәбиғәтен аңларға-аңлатырға өйрәнеүҙе талап итә. Был белем системаһын борон-борондан ата-бабаларыбыҙ рухи тормошонда һәм хужалыҡ-көнкүреш эшмәкәрлегендә файҙаланған. Ысынбарлыҡта иһә ҡан хәтере менән бирелеп барырға тейешле нәҫел, тел, тарих, күк есемдәре тәбиғәте, экология өлкәһендәге донъяуи белем мәғлүмәттәрен бөгөнгө донъя әллә белмәй, әллә танымай... Быуындар бәйләнешенең өҙөлөүе кешелекте наҙанлыҡҡа, белекһеҙлеккә алып килеүенә тере шаһитбыҙ бөгөн. Белеме арта барған һайын, кешелек белекһеҙгә, тәбиғәт һәм йыһан күренештәренең бер-береһе менән сәбәп-эҙемтә бәйләнешен һанға һуҡмаусанға әйләнде. Тәбиғәт иһә әллә шуның ҡонон ҡайтара, әллә үҙенә ҡарата ауыһыҙлыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтә. Бер яҡлап, йылғалар, күлдәр һайыға, ҡоролоҡ көйҙөрә; икенсе яҡлап, ауыл-ҡалаларҙы һыу баҫа; тайфун, цунами, ҡойма ямғырҙар, көслө ел-дауыл ише аномаль тәбиғи күренештәр беҙҙең яҡтар өсөн дә ят булыуҙан туҡтаны. Илдә ауыһыҙ рәүештә урман ҡырыла: үртәлә, урлап ҡырҡыла; Байкал арьяғы, Бүрәт республикаһы, Иркутск, Амур өлкәләре тайғаһынан ҡиммәтле ағас көнө-төнө көнсығышҡа - Ҡытайға оҙатыла. Тейешле контроль юҡлыҡтан файҙаланып, ҡырағайҙарса урман ҡырыусылар (Ә НТВ күҙәтеүсеһе Эдуард Петров үҙенең журналист тикшеренеүҙәрендә уларҙы "лесоворы", "черные лесорубы" тип атаны) нисә йылдар инде хәҙер законһыҙ рәүештә ил байлығын урлап һатып "бизнес" эшләй. Беҙҙең Башҡортостан урмандары ла күп ҡырылды заманында. Леспромхоздар бөтөрөлгәйне, арендаторҙар эшкә тотондо. Тотош урман һыҙаттарын, делянкаларҙы 49 йылға айырым кеше ҡарамағына бирел ҡуйыуҙы дөрөҫ сәйәсәт тип әйтеп булмай шуға ла. Бер яҡтан, урман йәшәһен өсөн унда балта тауышы яңғырарға тейеш, тигән парадоксаль әйтемгә ярашлы, ҡырҡыу нигеҙҙә санитар-таҙартыу маҡсаттарында алып барылһа, ни әйтерһең, тик бизнес хужаларына бит эшкә яраҡлы, шалҡандай таҙа ағас кәрәк. Тимәк, уларҙың эшен даими контролдә тоторға, ҡырҡыу пландарын ауылы күләмдә сикләргә һәм бер төп ҡырҡылған ағас урынына икене ултыртыуҙарына өлгәшергә кәрәк. Урман һәм ағас эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре (**15**), Озон ҡатламын халыҡ-ара һаҡлау (**16**) көндәре экологик аң-белем таратыу, йәмәғәтселек аңында ғәм уятырлыҡ көскә эйә булһа икән ул... Үкенескә, ай календарындағы был көндәр хаҡында белгәндән белмәгәне күп. Аптыраҡ: бындай даталарҙы теҙеп яҙып сығыуҙан кемгә ниндәй файҙалыр - аңлашылмай... Ә бына тарихта ҡалған шанлы даталарҙы иҫкә төшөрөп китеү күпкә файҙалыраҡ булыр.

Быйыл **21** сентябрҙә Петроградты һаҡлаусы Башҡорт ғәскәре төркөмөнөң баҫма органы - "Салауат" гәзитенең беренсе һаны сығыуға 100 йыл тула. Бына был дата, исмаһам, белмәгәндәр белеп ҡуйһын. Шәхсән В.И. Лениндың һорауы буйынса 1919 йылда Башҡорт кавалерия дивизияһы революция бишеген аҡтарҙан һаҡлау өсөн саҡыртып алына. "Салауат" дивизия гәзите 1919 йылдың сентябренән 1920 йылдың майына тиклем Петроградта көн һайын башҡорт телендә (ғәрәп алфавиты менән) баҫылып сыға. Унда шул ваҡыттағы хөкүмәт ҡарарҙары, граждандар һуғышы фронттарындағы хәлдәр хаҡында хәбәрҙәр, шулай уҡ башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре, шиғырҙары урын ала. Шул осор Башҡорт дивизияһының сәйәсәт бүлегендә билдәле яҙыусы Константин Федин да хеҙмәт итә. Йәш Совет республикаһы өсөн хәүефле мәлдәрҙә башҡорт һуғышсыларының революцияны һаҡлауҙа күрһәткән фиҙакәрлеге, ҡыйыулығы менән һоҡланып, К. Федин "Петроградская правда" гәзитендә (1919, 16 декабрь) "Кыҙыл башҡорттар хаҡында" тигән мәҡәләһен баҫтыра. Шул уҡ көндәрҙә был мәҡәлә башҡортсаға тәржемә ителеп, "Салауат" гәзитендә лә донъя күрә. Был тарихи мәғлүмәт башҡорттарҙың уртаҡ ватан өсөн ниндәйен генә ҡатмарлы һәм хәл иткес мәлдәрҙә лә көрәштең иң алғы һыҙығында, иң яуаплы участкаларында илгә ҡалҡан булып күтәрелеү ғәҙәтен тағы бер раҫлап ҡына ҡалмай, ә Салауат исемен рухи әләм итеп күтәреп, уның халҡыбыҙ өсөн илһөйәрлек, телһөйәрлек сығанағы булыуын да бар илгә таныта.

Һарысайҙың иҫтәлекле көндәренән тағы ла Нефть, газ һәм яғыулыҡ сәнәғәте эшсәндәре, Бөтөн донъя тыныслыҡ (**1**), Икенсе донъя һуғышы тамамланған, Рәсәй гвардияһы (**2**) көндәре, Терроризмға ҡаршы көрәш менән теләктәшлек (**3**), Халыҡ-ара мәрхәмәтлек (**5**), Танкист, Финанс хеҙмәткәрҙәре, Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек (**8**), Халыҡ-ара матурлыҡ (**9**), Бөтөн Рәсәй айыҡлыҡ (**11**), Программалаусы (**13**), Халыҡ-ара демократия (**15**), Ҡоралсы (**19**), Бөтөн Рәсәй "Милләт кросы" йүгереү (**25**), Телдәрҙең Европа (**26**) көндәре, Тәрбиәсе һәм бөтөн мәктәпкәсә хеҙмәткәрҙәр, Бөтөн донъя туризм (**27**), Отоларингологи, Бөтөн донъя йөрәк, Интернет (**30**) көндәре билдәләнә.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**17** - шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Риф Мифтаховҡа - 80 йәш** (1939).

**24** - журналист, "Башҡортостан журналдары" нәшриәт йорто директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин һәм Ш. Бабич исемендәге премиялар лауреаты **Сәлмән Ярмуллинға - 50 йәш** (1969).

**30** - журналист, публицист-яҙыусы, филология фәндәре кандидаты, 1988-1996 йылдарҙа Башҡортостан журналистар союзының идара рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Ризван Хажиев**тың тыуыуына - 80 йыл (1939-2013).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

**Бер көндө мин үҙемдең япон хеҙмәттәшем, Ямамота исемле уҡытыусынан һорай ҡуйҙым: "Японияла уҡытыусылар байрамын нисек үткәрәһегеҙ?" Уның йөҙөнә аптырау билдәһе сыкты:"Беҙҙә бер ниндәй ҙә уҡытыусылар байрамы юҡ". Бындай яуап ишетеп, мин аптырауға ҡалдым, быға ышанманым:"Иҡтисады, фән һәм техникаһы алға киткән илдә ни өсөн уҡытыусыға, уның хеҙмәтенә ихтирам юҡ?"- тип уйланым.**

## ЯПОНИЯЛА... уҡытыусы иң хөрмәтлеһе

Бер көн эштән һуң Ямамота мине өйөнә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ул мәктәптән алыҫ йәшәгәнлектән, беҙ метрола киттек. Киске "пик" мәлендә вагондар шығырым тулы ине. Ҡыҫыла-ҡыҫыла килә6еҙ, ныҡ итеп тотоноп торам. Көтмәгәндә эргәмдә ултырған бер ҡарт, урынынан тороп, миңә урын бирә. Өлкән кешенән бындай ихтирамлы мөнәсәбәтте аңламай, уның тәҡдимен кире ҡаҡһам да, ул бик ныҡыш булып сыкты һәм мин ултырырға мәжбүр булдым. Метронан сыҡҡас, Ямамотанан аҡһаҡал ҡарттың сәйер ҡылығын аңлатыуҙы һорайым. Ямамота йылмайып, минең түшкә ҡаҙалған уҡытыусы билдәһенә төртөп күрһәтә: "Был ҡарт һинең уҡытыусы билдәһен күреп ҡалды ла һинең статусҡа ихтирам йөҙөнән урын бирҙе..."

...Уҡытыусы Ямамотаға тәүләп ҡунаҡҡа барыуым булғас, буш ҡул менән килеүҙән уңайһыҙланып, уға берәй бүләк алырға уйланым. Был уйымды хеҙмәттәшемә лә әйткәйнем, ул хупланы һәм алдараҡ уҡытыусылар өсөн магазин барлығы һәм унда тауарҙарҙы ташлама менән алырға мөмкин булыуы турaһында бәйән итте. Был мине тағы ғәжәпкә ҡалдырҙы. "Ташлама уҡытыусылар өсөн генәме?"- тип һорайым. Быға ыңғай яуап бирел, Ямамота тағы ла: "Японияла уҡытыусы - иң ихтирам ителгән һөнәр, ул иң хөрмәтле кеше", - тип өҫтәне.

Япон эшҡыуарҙары магазиндарына уҡытыусы килеп инһә, ифрат ҡыуана һәм ошоноң менән ғорурланалар икән. Японияла булғанда мин бының ысынлап та шулай икәненә бик күп миҫалдар аша инандым. Метрола улар өсөн махсус урындар булдырылған, айырым магазиндары бар. Транспортҡа билет алыу өсөн улар бер ҡасан да сиратта тормайҙар. Һәр көндәре былай ҙа байрам кеүек булғас, япон уҡытыусылары өсөн айырым байрам ниңә кәрәк?

Был турала һөйләүемдең мәғәнәһе шунда: беҙҙең йәмғиәт тә уҡытыусыға ҡарата мөнәсәбәтендә шундай кимәлгә етһен, ә уҡытыусылар был юғары исемгә ысынлап та лайыҡ булһындар ине!

**Интернеттан.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының граждандар йәмғиәтен үҫтереү өсөн гранттары конкурсына йомғаҡ яһалды, тип хәбәр итә республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы. Конкурсҡа бөтәһе 229 ғариза бирелгән. 69 проектҡа грант ярҙамы тапшырыла. Грант аҡсаһын - 50 миллион һумды - республиканың коммерцияға ҡарамаған ойошмалары үҙара бүлешә. Бер миллион һумдан ашыу сумманы төрлө проекттар алды. Улар менән "Башҡортостан Республикаһы гранттары" мәғлүмәт порталында танышырға мөмкин.

✓Башҡортостан Башлығын һайлауҙа тауыш биреү өсөн 3 054 003 дана һайлау бюллетене баҫтырып сығарыла, шул иҫәптән рус телендә - 2 450 200, башҡорт телендә - 398 300, татар телендә - 205 503 дана. Башҡорт йәки татар телендәге бюллетендә русса текст та бирелә. Һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстарын ҡулланып тауыш биреү өсөн 354 850 бюллетень әҙерләнә. Бюллетендәрҙе баҫтырып сығарыу менән "Белая река" нәшриәте шөғөлләнә.

✓ 24 августа урындағы район Советы депутаттары Рөстәм Рахманғоловты Башҡортостандың Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы вазифаһына раҫланы. Урындағы советтың 14 депутаты ла Рахманғолов кандидатураһы өсөн тауыш бирҙе. Рөстәм Рахманғоловты һуңғы эш урыны - Стәрлетамаҡ хакимиәте башлығының инвестициялар, эшҡыуарлыҡты һәм ҡулланыусылар баҙарын үҫтереү буйынса урынбаҫары.

✓Башҡортостанда Дәүләт автоинспекцияһының ҡайһы бер теркәү бүлексәләрендә төбәктең яңы коды (702) менән дәүләт номерҙары бирә башланылар. "Был планға ярашлы башҡарылды, сөнки элекке 102-се серия бөтөп килә. Тиҙҙән республиканың барлыҡ теркәү бүлексәләрендә яңы код менән дәүләт номерҙары бирелә башлай", - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан Республикаһының баш автоинспекторы Динар Ғилметдинов.

✓Ҡырымда "Таврида - АРТ" ижади берләшмәләр фестивалендә ижади проекттарҙы тормошҡа ашырыуға гранттар бүленде. Грант конкурсында ҡатнашыуға 500-ҙән ашыу ғариза килде. Еңеүселәр - 130 ҡатнашыусы, уларҙың ижади проекттарына 86 миллион 937 мең һум йүнәлтелде. "Арғымаҡ" башҡорт этнорок төркөмө Ҡырымда "Таврида" фестивалендә ике миллион грант отто.

*✓ Элекке йылдарҙа мәктәптә башҡорт теле уҡытылған, ә һуңынан Йәкшәмбе мәктәбе ҡарамағына тапшырылған. Ләкин хәҙер күп кенә башҡорт ғаиләләре туған телен өйрәнергә теләүе тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән.*



ҠЫҪҠАСА

# СЕНТЯБРЬ АЛДЫНАН...

**Рәсәйҙә балалы ғаиләләргә ярҙам итеү өсөн "Беренсе сентябрь капиталы" программаһын ғәмәлгә индереүҙәре ихтимал.** Ошондай тәкдим менән Дәүләт Думаһының Мәғариф һәм фән буйынса комитеты башлығы урынбаҫары Борис Чернышов сығыш яһаған. Һәр ғаиләнең дә балаһын мәктәпкә әҙерләү мөмкинлеге юҡ, айырыуса төбәктәрҙә, тигән фекерҙә ул. Уның һүҙҙәренсә, ата-әсә, башҡа сығымды кәметеп, уҡыу кәрәк-ярақтарын һатып алыу өсөн сығымды арттырырға мәжбүр. Шуға күрә Чернышов "Беренсе сентябрь капиталы" программаһын ғәмәлгә индерергә тәкдим итә. Уның сиктәрендә ата-әсәләргә мәктәп сығымдарын ҡаплау өсөн өҫтәмә аҡса бүленергә тейеш. Финанс ярҙамының аныҡ суммаһы әйтелмәй.

✓ **Өфөнөң Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында баш ҡаланың туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының август кәңәшмәһе үтте.** Ошо уңайҙан мәғариф учреждениеһында "Кендек" тип исемләнгән башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү электрон ресурс үҙәге асылды. Заманса йыһазландырылған кабинетта башҡорт телен уҡытыуҙағы үҙенсәлектәрҙе сағылдырған стенд урын алған. Махсус мобиль ҡушымта ярҙамында тел белгестәренең ғилми эштәре, халыҡ яҙыусы-шағирҙарының ижады, уҡыу-уҡытыуҙағы әсбаптары менән танышырға мөмкин. Артабан август кәңәшмәһе мәктәптең тамашалар залында дауам итте. Йыл дауамында башҡарылған эштәр барланып, киләсәккә саралар билдәләнде. Милли мәғариф өлкәһендәге мәсьәләләр, ҡуйылған талаптарҙың үтәлеше тикшерелде.

✓ **Башҡортостанда тәүге тапҡыр Белем көнөндә республика биләмәһендә иҫерткес эсемлектәр һатыуы тыйыла, тип иҫкә төшөрҙөләр республика парламентында.** Быйыл 1 сентябрь йәкшәмбегә тура килә, уҡыусылар һәм студенттар өсөн уҡыу йылы 2 сентябрҙә башлана. "Был көндө тотош республикала иҫерткес эсемлектәр, шул иҫәптән һыра һатыу тыйыла", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Билдәле булыуынса, 2019 йылдың 30 майында республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары хәмер һатыуҙы сикләүгә йүнәлтелгән закон ҡабул итте. Йәштәр көнөндә (27 июндә), Белем көнөндә (1 сентябрҙә, әгәр дата йәкшәмбегә тура килһә, 2 сентябрҙә) һәм ауыл, ҡалаларҙа һабантуйҙар уҙғарылған көндәрҙә иҫерткес эсемлектәр һатыу тыйылды.

✓ **Башҡортостанда сентябрҙең тәүге декадаһының һалҡын һәм ямғырлы булыуы көтөлә.** Уның ҡарауы, сентябрҙең икенсе аҙнаһынан оҙайлы "әбейҙәр сыуағы" фаразлана, тип хәбәр итә Гисметео сервисы. Мәғлүмәттәр буйынса, сентябрҙең беренсе декадаһында ла һауа торошо әллә ни үҙгәрмәй. "Әбейҙәр сыуағы" сентябрҙең икенсе аҙнаһынан - 8 сентябрҙән һуң ғына башлана.Синоптиктар мәғлүмәттәренә ярашлы, киләһе аҙнала 2 сентябрҙән 8-енә тиклем һауа температураһының көндөҙ +11, +16, төндә +6, +8 градус, көндәрҙең болотло һәм ямғырлы булыуы көтөлә. 9 сентябрҙән республикала "Әбейҙәр сыуағы" фаразлана. Йылы һәм ҡояшлы һауа торошо ике аҙна самаһы дауам итә. Һауа температураһы көндөҙ сәғәттәрҙә +26 градусҡаса күтәрелә. Төндә лә +15 градусҡа тиклем йылы була. Ҡырау көтөлмәй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШЛЕКЛЕ ОСРАШЫУ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән эшлекле осрашыу үткәрҙе, унда төбәктәге социаль-иҡтисади хәл тикшерелде.**



Республика етәксеһе дәүләт башлығына төбәктә төп күрһәткестәр буйынса ыңғай ҡарарҙар теркәлеүе хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостан иҡтисады тигеҙ эшләй һәм властар социаль сектор һәм социаль хәл - яңы производство, яңы сифатлы хеҙмәт хаҡы һәм эш урындары икәнен яҡшы аңлай, төбәктә эшҡыуарҙар һаны кәметеү эше алып барыла, уның кимәле 4,3 процент тәшкил итә. Дәүләт Башлығы әйтеүенсә, инвестицияларҙың артыуы - яҡшы күрһәткес. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы әйтеүенсә, хәҙер сит ил инвесторҙары ла бар, атап әйткәндә, Францияның Savencia компанияһы беҙҙә йомшаҡ сырҙар етештереү предприятиеһы төҙөй башланы. Республикала инвесторҙарға булышлыҡ күрһәтеү өсөн барлыҡ инструментарий тормошҡа ашырыла. Радий Хәбиров эшлекле осрашыу ваҡытында Башҡортостандың тағы өс ҡалаһына йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһе статусын биреү мәсьәләһендә ярҙам иткәне өсөн Владимир Путинға рәхмәт белдерҙе.

# ТАТАРСТАНДА...

**Ошо арала Яр Саллыла Башҡортостандың һәм Татарстандың мәғариф министрлыҡтары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәкселәре башҡорт телен өйрәнеүҙе ойоштороу мәсьәләһе буйынса ҡала халҡы менән осрашты.**

Башҡортостан Республикаһы делегацияһы Яр Саллы ҡалаһы уҡытыусыларының август кәңәшмәһе эшендә ҡатнашты, Татарстандың Мәғариф министрлығы, Саллы муниципалитеты һәм уҡытыусылар менән осрашыуҙар үткәрҙе. Ата-әсәләр менән дә осрашыу ойошторолдо. Халыҡтар дуҫлығы йортонда 100-ҙән ашыу кеше йыйылды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова һәм Башҡортостандың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин, Татарстан мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Илсур Хәдиуллин, Яр Саллы ҡалаһы Ҡоролтайының башҡарма комитеты етәксеһе урынбаҫары Рәмил Хәлимов ата-әсәләр һәм Татарстандың башҡорт ойошмалары вәкилдәре менән туған телдәрҙе өйрәнеү, ҡалала башҡорт класын асыу мөмкинлектәрен тикшерҙе, ата-әсәләрҙең һорауҙарына яуап бирҙе. Билдәле булыуынса, элекке йылдарҙа мәктәптә башҡорт теле уҡытылған, ә һуңынан Йәкшәмбе мәктәбе ҡарамағына тапшырылған. Ләкин хәҙер күп кенә башҡорт ғаиләләре туған телен өйрәнергә теләүе тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән. Осрашыуҙа балалар ҙа ҡатнашты. Улар өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Тамыр" телерадиоканалы менән берлектә бүләк әҙерләгәйне - интерактив уйын программаһы, мауыҡтырғыс конкурстар, концерт ойошторолдо.

# КӨРӘШСЕЛӘР ӨСӨН

**Өфөлә республиканың яңы Спорт көрәше үҙәге төҙөлөшөнөң тәүге ташына капсула һалыу тантанаһы уҙҙы.**

Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, бөгөн уның ошо шәп спорт төрөнә һәм көрәш тренерҙарына, ветерандарына ихтирам күрһәтеү хыялы тормошҡа ашты. "Беҙ Спорт көрәше федерацияһы һәм ветерандар менән берлектә Һарайға бөйөк көрәшсе Владимир Алексеевич Бормандың исемен бирергә хәл иттек. Ул республикабыҙға, илебеҙҙә спорт көрәшен үҫтереүгә күп көс һалды, үҙенән һуң уникаль һәм көслө кешеләр ҡалдырҙы, бөгөн беҙ улар менән ғорурланабыҙ, улар йәш көрәшселәргә батырлыҡ нигеҙҙәрен, ысын ир-егет сифаттарын өйрәтә", - тине Радий Хәбиров. "Өфөлә һәм Башҡортостанда көрәш традициялары бик көслө, уларҙың тарихи тамырҙары бар. Йәштәргә шуны әйткем килә: бөгөн нигеҙ һалынған мөмкинлекте ҡулығыҙҙан ысҡындырмағыҙ, ялҡауланмағыҙ, көсләрәк булығыҙ", - тине Дәүләт Думаһы депутаты, өс тапҡыр олимпия чемпионы, Рәсәй Геройы Александр Карелин.

# КҮСЕНӘЛӘР

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте үҙенең юридик статусын һаҡлап ҡала һәм республиканың стратегик предприятиелары исемлегендә тороуын дауам итә.**

Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры вазифаһын башҡарыусы Олег Полстовалов "Башинформ" агентлығындағы матбуғат конференцияһында "Китап"тың Өфө полиграфия комбинатынан ҡатмарлы технологик ҡорамалдарын Матбуғат йортона күсереү менән махсуслашҡан ойошманың шөғөлләнеүе тураһында һөйләне. Матбуғат йортондағы майҙандар техник өлөштө урынлаштырыу өсөн полиграфия комбинатына ҡарағанда күпкә уңайлыраҡ. "Хеҙмәткәрҙәргә уңайлы шарттар булдырыуға ҡағылышлы һорауҙар бар, унда тәҙрәләрҙән ел өрә, бинаһарға ла ремонт кәрәк. Ләкин нәшриәттең профиль булмаған активтары бар, мәҫәлән, гараж, уны һатып, аҡсаһын төҙөкләндереүгә тотонорға мөмкин, айырыуса хеҙмәткәрҙәрҙең бүлмәләрен. Беҙҙең баһалар буйынса, бинаһарҙы ремонтлауға 80 миллион һум самаһы кәрәк, профиль булмаған активтарҙы һатыу - варианттарҙың береһе. Техник яҡтан һорауҙар юҡ, нәшриәткә ҡаты тышлыҡтар әҙерләү өсөн ҡорамал да тапшырыла, ә шәхси компанияларҙың ундайы юҡ", - тине Олег Полстовалов. Ул ҡайһы бер гәзит редакцияларын Матбуғат йортонан икенсе ергә күсереүҙәре тураһында имеш-мимеш хәбәрҙәрҙе кире ҡаҡты. Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы баһаһы буйынса, унда бинаһарҙың яҡынса 60 проценты буш тора йәки уларҙы ҡуртымсылар файҙалана, редакция коллективтары өсөн урын бар, тип билдәләне ул. "Китап" нәшриәтенең күсеүе тиҫтә йылдар Матбуғат йортонда эшләгән гәзит редакцияларын ҡыҫырыҡламай. "Китап" хеҙмәткәрҙәрен ҡыҫҡартыу хаҡында ла һүҙ бармай.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Уҙған шәмбелә Өфөлә "Һөт иле-2019" фестиваленә 58 меңдән ашыу кеше йыйылды. IX фестивалдә таратылған бер әр стакан һөт һаны буйынса абсолют рекорд ҡуйылды. Ҡунаҡтар 60 мең йәки 12 тонна һөт эсте. Фестиваль йәрминкәһендә ҡунаҡтар 47 тонна - һөт ризыҡтары, 5 тонна - аҡ май, 3,6 тонна - сыр, 2,3 тонна - тундырма, 4,1 тонна - ҡымыҙ, 18 мең тонна ҡуйыртылған һөт һатып алды. Һөт йәрминкәһенән алынған дөйөм табыш 7,5 миллион һум тәшкил итте.

✓Рәсәй Хеҙмәт министрлығы 2019 йылдың икенсе кварталына халыҡтың йән башына йәшәү минимумы дәүмәлен билдәләне. Ул йән башына 11 мең 185 һум тәшкил итте. Эшкә һәләтле халыҡ өсөн минимум 12 мең 130 һум, пенсионерҙарға - 9 мең 236 һум, балаларға 11 мең 4 һум күләмендә билдәләнде. Беренсе кварталда Рәсәйҙә йәшәү минимумы 10 мең 753 һум, эшкә һәләтле халыҡҡа - 11 мең 653 һум, пенсионерҙарға - 8 мең 894 һум, балаларға 10 мең 585 һум тәшкил итте.

✓2019 йылда Башҡортостан "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проектын тормошҡа ашырыу өсөн яҡынса 8,2 миллиард һум тотона, шуның 4,7 миллиарды федераль бюджеттан күсерелә. Аҡса 200 саҡрым самаһы юл ремонтлауға һәм төҙөүгә, шулай уҡ Өфөлә Дуҫлыҡ монументы янында Ағиҙел күперен һалыуға йүнәлтелә. Уҙған айҙа башланған Ағиҙел күпере төҙөлөшөнә милли проект сиктәрендә 618 миллион һум бүленгән.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында "Һайла, Өфө!" фотоконкурсы башланды. Һәр кемдең биш шәп бүләктең береһен отоу мөмкинлеге бар. Ҡатнашыу өсөн конкурстың "Бәйләнештә"ге рәсми төркөмөнән конкурс башланыуы тураһында яҙмаға репост эшләргә, һуңынан 8 сентябрҙә һайлау участкаһында үҙеңде тауыш биреү процесында фотоға төшөрөп, шул уҡ көндә уны кисе сәғәт 9-ға тиклем #ҺайлаӨфө, #ӘйҙәҺайлаӨфө хэштегтары менән сәхифәңә һалырға кәрәк.

✓Өфөлә Рәсәй пенсионерҙарының алтынсы спартакиадаһы булып үтте. Ундай илдең 76 төбәгенән һәм ете сит дәүләттән: Чехиянан, Германиянан, Финляндиянан, Бөйөк Британиянан, Литванан, Францияннан һәм Әрмәнстандан 754 спортсы ҡатнашты. Ҡатнашыусыларҙың иң өлкәне - Кострома өлкәһенән, ул 83 йәшен ҡыуа. 80-де үткәндәр - алты кеше.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Был мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ урыҫ һәм башҡорт телдәре, туған тел булараҡ урыҫ, башҡорт һәм татар теле уҡытыласаҡ. Беренсе синыфтан инглиз теле, бишенсенән француз һәм немец телдәре индерелә.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# МӘКТӘПТӘР ТӨҘӨҮ КӘРӘК

**Ошо көндәрҙә булып үткән Өфө ҡалаһы хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһендә БР мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин һәм уның урынбаҫары Алина Сөләймәнова, "Мәскәү мәғариф кадрҙары потенциалын үҫтереү үҙәге" директоры урынбаҫары Татьяна Новикова, Өфө ҡалаһының район башлыҡтары, мәғариф учреждениелары етәкселәре, педагогтар, ата-әсәләр ҡатнашты.**

2018-2019 йылғы уҡыу йылында Өфөнөң 128 белем усағына 118 меңдән артыҡ уҡыусы, 224 балалар баҡсаһына 66524 бала йөрөгән. Быйыл уҡыусылар һаны 121 меңдән артып китәсәк. Кәңәшмә барышында Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ошо тенденцияға айырыуса иғтибар итергә саҡырҙы һәм республикала яңы мәғариф учреждениелары һанын арттырыу буйынса проект эшләү йәһәтендә БР Мәғариф министрлығы менән хеҙмәттәшлек итергә теләк белдерҙе. "Тиҙҙән баш ҡалала ике заманса полилингваль мәктәп асыла, әлеге көндә беҙ Инорс биҫтәһендә 1650 урынлыҡ мәктәп төҙөүҙе планлаштырҙыҡ, Затон-Көнсығыш биҫтәһендә һәм Баланово ҡасабаһында 600 урынлыҡ мәктәптәр төҙөү проекттарын эшләйбеҙ. Айбулат Вәкил улы, һеҙ ҡала белем усаҡтары һанын арттырыу кәрәк булыуын яҡшы аңлайһығыҙ. Мин һанаған яңы төҙөлөштәр ихтыяжды ҡәнәғәтләндермәй. Яңы программа кәрәкле, бөтә һандарҙы әҙерләрбеҙ, тулыһынса бер сменалы уҡыуға күсеү өсөн 35-тән артыҡ мәктәпте сафҡа индерәйек. Балалар баҡсаһы һәм мәктәпкәсә белем усаҡтарына килгәндә, шулай уҡ яҡын киләсәктә 40-лап яңы учреждение төҙөү кәрәк", - тип мөрәжәғәт итте Өлфәт Мансур улы. Был программа баш ҡалала йылына 3-4 яңы белем усағын асырға ярҙам итергә тейеш, тип өҫтәне ул. Өфөлә белем биреү учреждениеларына ҡытлыҡ тураһында һөйләгәндә башҡорт мәктәптәре телгә алынмаһа ла, әлеге көндә эшләп килгән учреждениелар ғына халыҡтың ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндермәүен беләбеҙ. Балаһын башҡорт мөхитендә тәрбиәләргә һәм үҫтерергә теләгән ата-әсәләр һаны йылдан-йыл арта һәм бындай мөмкинлек биргән белем усаҡтарында конкурс юғары. Мәҫәлән, Өфөнөң төп урамдарының береһендә ҙур башҡорт мәктәбе ҡалҡып сығыуы бик мөһим, сөнки был турала Өфөнөң башҡорт атай-әсәйҙәре күптән хыяллана.

Кәңәшмә барышында Өлфәт Мостафин белем биреү учреждениелары территорияһын тыштан йыһазландырыу, спорт майҙансыҡтары төҙөү буйынса республика программаһын булдырырға ла тәҡдим итте. Министр Айбулат Хажин, БР Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса был эш башланды, тип белдерҙе. Шулай уҡ ул республика һәм баш ҡала мәктәптәрендә кластарҙы махсус техника, ҡорамалдар менән йыһазландырыуға 1,5 миллион һум аҡса бүленеүе тураһында телгә алды. Ошо көндәрҙә баш ҡаланың 10 мәктәбендә химия кластары яңы ҡорамалдар менән тәьмин ителә. Бынан тыш, республиканың 70 мәктәбендә, шул иҫәптән Өфөнөң 7 мәктәбендә заманса химия һәм физика кластары булдырыла. Бының өсөн бюджеттан 70 миллион һум аҡса бүленгән. Былар барыһы ла Рәсәйҙең иң яҡшы биш мәғариф системаһы исемлегенә инеү маҡсатында эшләнә, әлегә Башҡортостан 28-се урында килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Август кәңәшмәһендә мәғариф өлкәһен цифрлаштырыу, етәкселәр тәрбиәләү, өҫтәмә һәм йүнәлешле белем биреү, "Тематик шәмбе" үткәреү, мәктәпкә тиклем белем биреү учреждениеларына ҡағылған актуаль мәсьәләләр күтәрелде. Шуныһы ҡыҙыҡ, бер фекер алышыу майҙансығында ла мәғариф хеҙмәткәрҙәре эш хаҡы менән тәьмин ителеш тураһындағы һорауҙы күтәрмәне. Быға ултырышты алып барыусы Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова иғтибар итеп, ошо турала айырым һөйләшергә тәҡдим итте. Уны Айбулат Вәкил улы ла хупланы, уҡыу йылы башланғас, уҡытыусылар менән яңынан осрашып, фекер алышырға вәғәҙә итте.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ТУҠЛАНЫУ...
## бер ҡаҙандан

**Баш ҡала мәктәптәрендә туҡланыу берҙәм оператор ҡарамағына күсәсәк. Был турала ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова журналистар менән осрашыуҙа хәбәр итте.**

Быйыл мәктәптәрҙә туҡланыу системаһына яңылыҡтар индереү сиктәрендә баш ҡала белем усаҡтарын "Центр детского и диетического питания" муниципаль автономиялы учреждениеһы хеҙмәтләндерәсәк. Әлеге көндә Өфөлә 399 муниципаль белем биреү ойошмаһы эшләй, шулар араһында 128 мәктәп һәм бынан һуң уларҙың барыһында ла меню, туҡланыу хаҡтары бер төрлө буласаҡ. Ата-әсәнең бала өсөн түләү индереүен билдәләп барыу маҡсатында автоматлаштырылған берҙәм мәғлүмәт системаһы булдырылған. БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Алексей Гусев әйтеүенсә, был проект баш ҡалала уңышлы һөҙөмтә биргән осраҡта, бөтөн республика белем усаҡтарында ла ҡулланыласаҡ. Яңы эш йүнәлеше мәктәп ашханаларына килтерелгән аҙыҡ-түлектең сифатын тикшереү йәһәтенән бик уңайлы һәм уның хаҡын да түбәнәйтә. Ә был үҙ сиратында мәктәп ашханаларында яңыса ремонт үткәрергә, сифатлы һәм матур мебель, һауыт-һаба, ашханасыларға бер төрлө кейем алырға мөмкинлек бирә. Мәктәптә туҡланыуға бәйле тағы бер яңылыҡ - уҡыусылар өсөн махсус социаль карта, беләҙек һәм чип эшләнгән. Был әйберҙәр ярҙамында ашхана һәм транспортта йөрөгән өсөн түләргә, мәктәпкә үтеп инергә була. Һәр уҡыусыға шәхси логин бүлеп бирелә, ата-әсәй шуның буйынса социаль картаны тулыландыра ала. Социаль карталар ата-әсәләр йыйылыштары ваҡытында бушлай таратыла, ә бына махсус беләҙек һәм чипты кәрәк тип тапҡан осраҡта һатып алыу ҡаралған.

Осрашыу барышында Алина Наил ҡыҙы шулай уҡ баш ҡала белем усаҡтарының киләһе 2019-2020 уҡыу йылына әҙерлек кимәле тураһында ла һөйләне. Мәктәп һәм балалар баҡсаларында бөтә талаптарға ярашлы ремонт, тикшереү эштәре үткән, бүлмәләр кәрәкле ҡорамалдар менән йыһазландырылған һәм балалар хәүефһеҙлеге буйынса ла тейешле саралар күрелгән. Өфөлә 1300 урынлыҡ 44-се һәм 1000 урынлыҡ 162-се "СМАРТ" полилингваль күп профилле мәктәптәр сафҡа инә. Әлеге көндә был үҙенсәлекле белем усаҡтары коллектив туплай. "Был мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ урыҫ һәм башҡорт телдәре, туған тел булараҡ урыҫ, башҡорт һәм татар теле уҡытыласаҡ. Беренсе синыфтан инглиз теле, бишенсенән француз һәм немец телдәре индерелә. Шулай уҡ, медицина һәм финанс йүнәлешле кластарҙа химия һәм биология, иҡтисад һәм хоҡуҡ фәндәре тәрәнәйтеп өйрәнелә", - ти Алина Наил ҡыҙы. Шулай уҡ, был мәктәптәргә бер нисә тел белгән юғары квалификациялы педагогтар эшкә алыныуын, дәрестәр мауыҡтырғыс итеп ойошторолоуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Әйткәндәй, педагогик кадрҙарға килгәндә, баш ҡаланың белем усаҡтары күп кенә белгестәргә ҡытлыҡ кисереүе билдәләнде. Мәҫәлән, ҡайһы бер мәктәптәргә математика, химия, физика, башланғыс синыф уҡытыусылары талап ителә. Баш ҡалала барлығы 224 балалар баҡсаһы һәм 4 аҙна элек кенә уларҙа 220 тәрбиәсе урыны буш булған. Ҡаланың Мәғариф идаралығы мәсьәләне тиҙ арала ҡаты контролгә алғандан һуң, тағы 12 тәрбиәсе табырға ҡалған. Киләсәктә бындай хәлде иҫкәртеү өсөн ҡалалағы күп профилле колледждар һәм М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеү ҡаралған. Педагогтар менән тәьмин ителеш 99 процент тәшкил итә, тип хәбәр итте ҡаланың Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө ҡалаһында яңы уҡыу йылы башланыуға арналған байрам саралары 2 сентябрь көнө үтәсәк. Балалар баҡсалары 65 мең балаға, мәктәптәр 122 мең уҡыусыға ишектәрен аса - былтырғыға ҡарағанда был дүрт меңгә күберәк.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тире янғанда

❖ 300 грамм туралған һуғанды 1 литр үҫемлек майында алтынһыу төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырырға, һөҙөргә, һуғанын ташларға, ә ҡайнар майҙа 300 грамм бал ҡорто балауыҙы иретергә. Май әҙер, уны янған урынға йыш һөртөргә.

## Цистит

❖ 2 балғалаҡ ваҡланған ҡыяр орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут талғын утта тоторға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 45 көн.

## Бил ауыртҡанда

❖ Бил ауыртҡанда уколдар ҡаҙатыу хәлде бер аҙға ғына яҡшырта. Был ауыртыуҙан ҡотолоу өсөн ҡара торма менән балдан әҙерләнгән шифа ярҙам итер. 1 өлөш араҡы, 2 өлөш бал, 3 өлөш торма һутын болғатып, йоҡлар алдынан билде ыуырға. Төнәтмәне быяла һауытҡа һалып, һыуытҡыста һаҡларға. Бер нисә көндә һыҙланыу онотолор.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ Бер тигеҙ күләмдә кишер, сөгөлдөр, ҡара торманы ҡырғыстан үткәрергә, һутын һығып алырға, ҡара быялалы һауытҡа ҡойорға һәм башына шыйыҡса быуға әйләнеп осорлоҡ итеп ҡамыр ҡуйырға һәм һауытты 3 сәғәткә талғын утҡа духовкаға ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 3 ай.

## Ашҡаҙан

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда йылы ғына мамыҡ шәлгә төрөнөп ятып тороғоҙ. Ауыртыу үтәсәк. Тигеҙ күләмдә аҡ сәскә, бөтнөк менән мелисса үләне алып, 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 10-15 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм эсергә. 10 минут дауамында һыуҙа бешерелгән һоло буҡкаһы ашарға кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Орнамент рәтен бер-береһе менән киҫешкән 2 турамөйөштән яһалған фигура ла тулыландыра. Композицияларҙа ул биш ромбтан торған (бер ромб - үҙәк урынды ала) биҙәк булараҡ һынландырыла.**

Мәҫәлән, Ғафури районы Имәндәш ауылында күргән балаҫты 2 эре бер-береһе менән киҫешкән һары ҡыҙыл-йәшел-һары төҫтәге дүртмөйөш биҙәй. Улар араһындағы йәшел-ҡурай еләге төҫөндәге ромб композицияның үҙәге. Төп фигуралар тирәләй ҡара фонға үҙәге ҡурай еләге төҫөндәге 8 йәшел ромб (өҫтә һәм аҫта - өсәр, ситтәре буйлап берәр) урынлашҡан. Балаҫтың урта өлөшө ҡурай еләге төҫө менән уратып алынған, уның ситтәре зәңгәр "теш"тәр менән биҙәлгән.



*Балаҫтарҙа йондоҙ биҙәк.*

5 ромбтан торған орнамент борон таҙартыусы һәм һаҡлаусы мәғәнәһендә ҡулланылыуы бар. Ошо биҙәк Сәмәрҡәндтағы Шахи-Зинда мемориаль комплексына (XVI б.) инген Туркан аға мавзолейына инген урынға ике яҡлап төшөрөлгән. Төрлө төҫтәге плиткалар менән һалынғанлыҡтан, биҙәк шунда уҡ Урта Азия балаҫтарын, туҡымаларын хәтергә төшөрә.



*Бороңғо балаҫтағы мөгөҙгә оҡшаған биҙәктәр. Дәүләкән районы Буранғол ауылы. Н. Бикбулатов фотоһы. 1960*

5 ромбты ла айырым төҫ менән уратып алыуҙан яһалған фигура орнаменттың башҡа элементтарына һәм яңы биҙәктәргә фон да булараҡ ҡулланылған. Дәүләкән районы Бикбулат ауылынан Нәсихә Әхмәтғәлина балаҫында уртала һыҙаты буйынса киҫешкән 6 фигура урынлашҡан. Улар мөгөҙгә оҡшаған фигуралар менән тулыландырылған. Ике мөгөҙ биҙәкте ромб тоташтырып тора, төп фигуралар араһын шулай уҡ төрлө ҙурлыҡтағы ромбтар тултыра.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ЙӨРӘК ЙЫЛЫҢДЫ БИР!

**Һәр әсәй үҙенең балаһына әйтергә тейешле һүҙҙәрҙе барлап сығайыҡ әле.**

**- Һин минең өсөн бик мөһим кеше.** Һеҙҙең өсөн үҙҙәренең мөһим булыуы хаҡында балалар белергә тейеш. Бысраҡ һауыт-һаба йыуылмай ҙа йә электрон почталағы хәбәрҙәрҙең көтөп тә тора ала икәнен улар белергә тейеш.

**- Мин һине һағындым.** 20 минутҡа ғына айырылып торһағыҙ ҙа балағыҙ менән ҡосаҡ йәйеп күрешегеҙ. Уларға мөмкин тиклем яҡын булырға тырышыуығыҙҙы күрһәтегеҙ.

**- Был дөрөҫ булманы.** Улар хаталанһа, был хаҡта әйтеүҙән тыйылмағыҙ. Дөрөҫ эшләргә уларға ярҙам итегеҙ, йүнәлеш бирегеҙ. Шул уҡ ваҡытта хаталаныуҙарына ҡарамаҫтан, һеҙҙең уларҙы яратыуығыҙҙы белһендәр.

**- Һин дөрөҫ эшләнең.** Әгәр улар берәй нәмәне дөрөҫ эшләһә, улар менән ғорурланыуығыҙҙы күрһәтегеҙ. Шулай хуплап торһағыҙ, улар был эште һәр ваҡыт ихлас һәм еңел башҡарырға өйрәнер.

**- Һинең кеүек башҡа берәү ҙә юҡ.** Уларға үҙҙәренең ғәжәп төрлө һәм камил булыуҙарын күрһәтегеҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙегеҙҙең һәм уларҙың холоҡ-фиғелдәре үҙенсәлектәрен күрһәтегеҙ һәм әйләнә-тирәләгеләрҙең характерҙарын билдәләргә өйрәтегеҙ.

**- Илау - ғәйеп түгел.** Балаларҙы үҙҙәренең хистәрен йәшермәҫкә өйрәтегеҙ. Кешеләр ҡайғынан, ауыртыуҙан, яңғыҙлыҡтан, ә ҡайһы саҡ шатлығынан илай. Балаларҙы үҙ хистәре менән уртаҡлашырға өйрәтегеҙ.

**- Йәштәрендә һөрт.** Ҡайһы саҡ улар күҙ йәштәрен һөртөргә лә юлдарын артабан дауам итергә кәрәклекте белергә тейеш. "Әгәр һеҙ тормошоғоҙҙан ҡояш киткән өсөн илайһығыҙ икән, тиҙерәк күҙ йәштәрегеҙҙе һөртә һалығыҙ, сөнки улар һеҙгә йондоҙҙарҙы күрергә ҡамасаулаясаҡ". Уларға ошо ябай хәҡиҡәтте аңлатығыҙ.

**- Миңә ярҙам итмәҫһеңме?** Балалар һеҙҙе яҡындарығыҙ хаҡында күп хәстәрлектәр һәм мәшәҡәттәр менән мәшғүл кеше булыуығыҙҙы күрергә тейеш. Улар һеҙҙең ярҙамға мохтаж икәнде лә күрһендәр. Үҙәре һеҙгә ярҙам тәҡдим итә белһендәр.

**Ярҙам кәрәкме?** Ярҙам итеүҙән алда һәр ваҡыт был хаҡта һорағыҙ. Үҙаллылыҡ ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлы эҙләгәндә табыла. Әгәр кескәйҙәрегеҙҙең низер ҡулынан килмәһә, уларҙы дәртләндерегеҙ, нисек эшләргә күрһәтегеҙ.

**"Эйе".** Улар үҙҙәре менән бергәләп һеҙҙең низер эшләүегеҙҙе һорай икән, көнөнә бер тапҡыр булһа ла икеләнмәйенсә "эйе" тип әйтә белегеҙ.

**"Юҡ".** Һеҙҙең ниндәйҙер осраҡтарҙа улар менән ризалашмауығыҙҙы ла белһендәр, тик был арыған һәм тиҫкәре "юҡ" булмаһын, шуның өсөн үҙегеҙҙең был ҡарарҙы аңлатып бирегеҙ.

**"Һин шәпһең, афарин!"** Бала низелер эшләй алмаған хәлдә лә, тырышлыҡ күрһәткән икән, һеҙ уны хупларға тейешһегеҙ. Бәләкәй еңеүҙәр уңышҡа килтерә, ә бәләкәй үкенестәр - күңел төшөнкөлөгө. Балаларҙы гел уңышҡа көйләгеҙ.

**"Тирә-яҡ донъяға мәрхәмәтле бул".** Яҡшылыҡтар яҡшы кешеләргә генә юлдаш икәнлекте ҡат-ҡат иҫтәренә төшөрөп тороғоҙ. Эйе, донъя аяуһыҙ, ләкин барыһына ла изгелек һәм һөйөү менән йәшәгәндәргә был тормошта еңелерәккә тура килә. Балаларығыҙҙың киләсәген еңеләйтегеҙ.

**"Ғәфү ит".** Хаҡлы булмауығыҙҙы таный һәм уның өсөн ғәфү үтенә белегеҙ. Быны менән һеҙ, кәрәк булғанда, башҡаларға юл бирергә яҡшы өлгө күрһәтәсәкһегеҙ.

**"Миңә күберәк һөйлә".** Күҙҙәренә ҡарағыҙ һәм уларҙы ихлас аңларға тырышығыҙ.

**"Мин һине яратам".** Был һүҙҙәрҙе көн дә ҡысҡырып әйтегеҙ. Үҙҙәренә ҡарата һөйөүегеҙҙең ихлас, йөрәктән һәм алыштырғыһыҙ булыуы хаҡында белһендәр.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАЛАРЫҢДЫ...

## аҡыл зәғифлеге вирусына тарытма

**Бөгөн бөтә донъя төрлө гаджеттар - смартфондар, планшеттар һәм башҡа цифрлы техника менән мауыға. Ошо үтә нык ҡыҙыҡһыныу арҡаһында цифрлы аҡыл зәғифлеге вирусы барлыҡҡа килде лә инде. Шаяртыу түгел, диагноз был.**

2007 йылда уҡ белгестәр цифрлы быуын вәкилдәре булған балалар араһында иғтибарһыҙлыҡ, хәтер юғалыуы, үҙ-үҙеңде контролдә тота белмәү, баш мейеһенең когнитив функциялары боҙолоуы, күңел төшөнкөлөгө һәм депрессия осраҡтары йышайыуын билдәләй. Тикшеренеүҙәрҙә цифрлы быуын вәкилдәренең мейеһендә баш һөйәге-мейе йәрәхәтенән һуң һәм ҡарттарға хас булған аҡыл зәғифлеге ауырыуының башланғыс осорондағы үҙгәрештәр күҙәтелә. Ышанырлыҡ түгел, әммә 7 йәшлек урта статистик европалы бер йылдан ашыу ғүмерен, ә 18 йәшлеге дүрт йылдан артыҡ ғүмерен экран артында үткәргән! Был бөтөнләй бүтән балалар, тимәксеһегеҙме? Эйе, балалар башҡа, әммә уларҙың мейеһе менәрләгән йыл элек йәшәгән кешенеке кеүек - шул уҡ 100 миллиард нейрон.

Мейене даими рәүештә үҫтерергә һәм туҡландырып торорға кәрәк. Беҙҙең бөтә фекерләүҙәр, эштәр, ҡатмарлы мәсьәләләр сисеү һәм тәрән уйланыуҙар баш мейеһендә эҙ ҡалдыра. "Балалар донъяны танып белеү барышында ниндәйҙер яңы күренештәргә тарый, үҙаллы ирекле фекер йөрөтөргә өйрәнә - быны бер нәмә лә алыштыра алмай", - тип раҫлай Бөйөк Британиянан психология фәндәре буйынса профессор Таня Бирон. Балаларҙың әүҙемлек радиусы 1970 йылдан алып 90 процентҡа, йәғни смартфон экранына тиклем ҡыҫылған. Балалар ямғыр аҫтында йөрөү, үҙе эшләгән кәмәләрҙе ағыҙыу, ағас башына менеү, үҙ-ара аралашыуҙы онотто, ҡайһылары белгәне лә булмаған. Улар сәғәттәр буйы смартфонына текәлеп ултыра. Ә бит баланың мускулдары дөрөҫ үҫешһен өсөн хәрәкәтләнеү кәрәк, тормош һынауҙарын күтәрә белеү һәм дуҫтары менән аралашырға өйрәнеү ҙә мөһим. Мейегә тышҡы стимулдар күп



булған һайын ул яҡшыраҡ үҫешә. Шуға ла баланың тирә-яҡ мөхитте тойоп-белеп өйрәнеүе мөһим, ә виртуаль рәүештә түгел. Меңәрләгән йылдар элекке кеүек, был мейе үҫеше өсөн кәрәкле.

Шулай уҡ балаға сәләмәт, яҡшы йоҡо кәрәк. Әммә заман балаһы интернеттан сығып, компьютер уйындарын ваҡытында һүндереп ҡуя алмай. Был йоҡо ваҡытын ҡыҫҡарта һәм организм өсөн кире һөҙөмтәләргә килтерә. Арыған һәм башы ауыртҡан баланың башына мәктәптә бирелгән мәғлүмәт һеңмәһә, ниндәй үҫеш тураһында һүҙ барыуы мөмкин?

Цифрлы технологиялар баланың мейеһен нисек үҙгәртә, тиһегеҙме? Тәү сиратта, ваҡытын интернетта ултырып бер төрлө үҙгарғас, тышҡы стимулдар һаны үтә нык ҡыҫҡара. Бала мейеһенең кеше өсөн борсолоу, үҙ-үҙеңде контролдә тотоу, ҡарарҙар ҡабул итеү кеүек мөһим функциялар өсөн яуап биргән өлөштәрен үҫтереүгә кәрәкле тәжрибәне етерлек кимәлдә алмай. Ә эшләмәгән нәмә юҡҡа сыға. Хәрәкәт итмәгән кешенең аяҡ-ҡулы эштән сыҡҡан кеүек. Балалар мәғлүмәтте хәтерендә ҡалдырырға күнекмәгән, уларға эҙләү системаларында ултырыу еңелерәк. Быны шунан хәтер менән бәйле проблемалар килеп тыуа ла инде. Сөнки улар уны бөтөнләй күнектермәй.

Балалар интернет булғанға күрә күпкә аҡыллыраҡ, тип иҫәпләйһегеҙме? Бөгөнгө 11 йәшлектәр сисеп күрһәткән мәсьәләләр һөҙөмтәләре утыҙ йыл элек уҡыған 9 йәшлектәрҙекенә тиң. Тикшеренеүселәр виртуаль донъяла йәшәүҙе быныӊ төп сәбәбе тип иҫәпләй. "Цифрлы технологиялар мейене инфантилләштерә, уны гөжләгән тауыш һәм яҡты ут йәләп иткән, иғтибарын бер нәмәгә лә йүнәлтә алмаған һәм бөгөнгөһө менән йәшәгән бәләкәй баланың мейеһе рәүешенә индерә, тип хәүефләнәм", - ти Сьюзен Гринфилд.

Баланы ҡотҡарыу юлы бар! Төрлө гаджеттар менән ҡулланыу ваҡытын сикләү ҙә етә. Сөнки Стив Джобс, цифрлы индустрия белгесе, нәҡ шулай эшләгән. Уның балалары айпадты бөтөнләй ҡулланмаған, ә башҡа гаджеттарҙы төнөн һәм ял көндәрендә ҡулланыуҙы тыйған. "Wired" тигән Америка журналының баш мөхәррире, 3D Robotics компанияһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе Крис Андерсон да балаларына гаджеттар ҡулланыуҙа сикләй. Андерсон йоҡо бүлмәһендә бер ниндәй ҙә гаджет булырға тейеш түгел, тигән ҡағиҙә булдырған: "Мин интернет менән артыҡ мауығыуҙың ҡурҡынысын яҡшы күрәм. Мин үҙем ошо проблема менән осраштым һәм минең балаларым да шуны кисереүен теләмәйем", - тигән ул. Blogger һәм Twitter сервистарын уйлап сығарыусының улдары гаджеттары менән көнөнә бер сәғәттән артыҡ ҡуллана алмай, OutCast Agency директоры өйҙә ярты сәғәттән артыҡ гаджеттар тотоп ултырырға рөхсәт итмәй. Уның бәләкәй балаларының гаджеттары бөтөнләй юҡ.

"Ни эшләргә кәрәк?" тигән һорауға яуабы ла, бына, табылды, буғай. Үҫеп килгән быуын тураһында хәстәрлек күрегеҙ. Ярты көнөн заманса гаджеттар артында үткәргән кешенең 10-20 йылдан киләсәге ниндәй булыр? Ошо һеҙҙе, һис шикһеҙ, борсорға тейеш.

**Интернеттан.**

✔ *Бәшнәктәрҙең Уралға үҙҙәренең туғандары булған башҡорттарға килеп һыйыныуы тураһында "Уҙак-Туҙак - бала бәшнәк ярсығы" тигән башҡорт эпосында ла телгә алына.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?



**Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, ҡатай ырыуы төньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Был башҡорт ырыуының боронғо тамырҙары беҙҙең эраның тәүге быуаттарынан уҡ хәҙерге Эске Монголия, Маньчжурия тарафтарында йәшәгән кидань исемле гәйрәтле халыҡҡа барып тоташа.**

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҠАТАЙҘАР!

Ҡатай этнонимы һәм уның варианттары - ктай, ҡытай, китай, китань, хытай тарихи этнографияла киң билдәле. Ҡаҙаҡтарҙың Урта Жузы составында ҡытай һәм ҡатай арғын ырыуҙары була. Ҡырғыҙ ырыу-ҡәбиләләре исемлегендә ҡытай һәм мең-ҡытайҙар бар. Ктай исемле ырыу төркөмдәре ҡараҡалпаҡтарҙа, Зеравшан һәм Амударья дельтаһы үзбәктәрендә осрай. Нуғайҙарҙың да ҡытай тип аталыусы ырыу бүлеме бар. Башҡорттарҙа ҡара ҡатай, үзбәктәрҙә ҡара ҡытай этнонимдары теркәлгән. Гагауздарҙа һәм болгарҙарҙа Ҡара-Китай, Ҡырғыҙ-Китай, Ҡатай, Ҡырымда Өй-Китай, Орта-Китай, Ҡара-Китай, Сары-Китай кеүек топонимдар осрай.

Р.Ғ. Кузеев билдәләүенсә, тарихи-этнографик әҙәбиәттә ктай, ҡытай, ҡатай исемле ырыу-ҡәбилә төркөмдәренең тарихта киң билдәле ҡара ҡытай һәм кидань исемле халыҡтар менән бәйле булыуы нигеҙле, тип иҫәпләнә.

XIX-XX быуаттарҙа тикшеренеүселәрҙең күпселеге кидань-ҡара ҡытай этник берләшмәһен монгол сығышлы, тип иҫәпләй. Ҡайһы бер ғалимдар боронғо кидань теленең дөйөм монгол теленә нигеҙ була алыуын фаразлай. Быныӊ өсөн боронғо ҡытай яҙма сығанаҡтарында ерлек тә бар. "Ляо ши" тигән ҡытай хроникаһында был турала ошолай яҙылған: "Кидань Йорто Дун-ху Йортоноң тармағы ул. Уларҙың ата-бабалары, һундарҙан еңелгәс, Сяньби тауҙары янына еректе... Юань-вэй династияһы заманында улар Кидань исемен алды". Ҡытайҙар боронғо монгол ҡәбиләләрен дун-ху, йәгни, "көнсығыш варварҙары", тип атаған. 551 - 554 йылдарҙа яҙылған "Вэй шу" династия хроникаһында кидандар тәүге тапҡыр телгә алына.

VIII быуатҡа ҡараған орхон боронғо төрки ташъяҙма ҡомартҡыһында ошо этноним "ҡытан" формаһында була. Күрәһең, "ҡытай/ҡатай" атамаһы, ҡытай яҙма традицияһына ярашлы, "кидань" формаһын ала. Шуныһы ҡыҙыҡлы: кидань һәм уның варисы булған ҡара ҡытай империяһы халыҡтары, "ысын ҡытай" халҡынан айырмалы булып, "варварҙар" рәтенә ҡуйылған хәлдә лә, төрки-монгол һәм славян традицияларына ярашлы, ошо этнонимды Ҡытай иле атамаһы рәүешендә ҡулланыу һәм нығытыуға ерлек бирә.

Шул уҡ ваҡытта барса тикшеренеүселәр ҙә был боронғо ҡәүемде монгол сығышлы итеп ҡарамай. Мәҫәлән, В.В. Бартольд уларҙың тунгус сығышлы булып, бер ни тиклем кимәлдә монголлашыу мөмкинлегенә баҫым яһай. Бөгзе бер лингвистар, ҡара ҡытайҙарҙың исемдәренә һәм титулдарына этимологик анализ эшләп, уларҙың төрки халыҡтарына нәҫелдәш булыуын фараз итә.

Нисек кенә булмаһын, төрки халыҡтарына ҡушылып, ҡытай-ҡатай этнонимын алған ырыуҙарҙың ошо боронғо ҡәүем менән булған бәйләнеше ысынбарлыҡҡа тап килә. Кидандар X быуатҡа тиклем Эске Монголияның төньяҡ-көнсығышында көн итә. III-V быуаттарҙа улар яҡын-тирәләрендәге халыҡтарға һөжүм итеп, уҙаллы сәйәсәт алып бара, Хунну конфедерацияһының төрки ҡәбиләләре менән дә аралашып йәшәй. Кидандар VI быуатта барлыҡҡа килгән Төрки ҡағанатына ҡаршы көрәш алып бара, әммә еңелеүгә дусар булып, ҡағандарға яһаҡ түләп торорға мәжбүр була. Байтаҡ ваҡыт улар ҡытайҙарҙың Тан династияһы империяһына, һуңынан Уйғыр ҡағанатына буйһоноп йәшәй. X быуатта улар юлбашсылары Елюй Амбағай (Абаоцзи) етәкселегендә үҙ дәүләтселеген булдыра, ул тарихҡа Ляо ("Тимер") империяһы исемендә инә.

Кидандарҙың яулап алыу походтары уңышлы булып, империя Япон диңгеҙенән Көнсығыш Төркөстанға тиклемге үтә ҙур территорияны биләй. Уларҙың ныҡ ҡоралланған һәм тәжрибәле ғәскәре еңелеү белмәй. Һәр бер кидань яугирынан туғыҙ предметтан торған тимер көбәһе (панциры), йүгәне, атын ҡаплар өсөн тимер йәиһә күн көбәһе, дүрт йәйәһе, дүрт йөҙ уғы, оҙон һәм ҡыҫҡа һөңгәһә, гудоһы (суҡмары), балтаһы, алебардаһы, бәләкәй әләме, сүкеше, беҙе, саҡма ташы, аты өсөн лаҡаны, бер доу (10,3 л) ҡоро аҙығы, аҙыҡ тоғо, ырғағы, сатыры (зонты) һәм атын бәйләп тотор өсөн ике йөҙ чи (64 м самаһы) бауы булыуы мотлаҡ талап ителгән. Империяның һуңғы осоронда Ляо императорының ордоһында (гвардияһында) 100 меңгә тиклем һыбайлы һәм башлыса күсмә ҡәбиләләр вәкилдәренән йыйналған ярҙамсы ғәскәр була.

Әммә 1114 йылда Бөйөк Ляо империяһына бығаса уға буйһоноп йәшәгән чжурчжэн ҡәбиләһе яугирҙары һөжүм итә, оҙаҡ йылдарға һуҙылған һуғыш-ҡыйралыштар башлана. 1125 йылда кидандар тармар ителеп, уларҙың императоры тәхетенән яҙа. Кидандар әлегә тиклем йәшәгән ерҙәрен ҡалдырып, көнбайышҡа, Етеһыу бассейны тарафтарына йүнәлә. Бында улар Ҡараханидтар ҡағанатына ҡаршы барған оҙайлы һуғышта еңеүгә өлгәшә һәм Көнсығыш Төркөстанда Си Ляо исемен алған яңы дәүләт барлыҡҡа килә. Көнсығышта киң билдәле Баласағун ҡалаһы ошо яңы дәүләттең үҙәге була. Кидандарҙы төркиҙәр ҡара ҡытай, тип атай. Уларҙың юлбашсыһы Елюй Даши, төрки-монгол традицияһына ярашлы, гүрхан титулын ала. Уға Төркөстан территорияһына XI быуаттың тәүге яртыһында уҡ килеп урынлашып, төркиләшеп бөткән ырыуҙаштары ла ярҙамға килә. Ғәрәп тарихсыһы Ибн әл Асирҙың ошо факттары раҫлаған яҙмалары бар. Ул былай тип яҙа: "Улар Төркөстан хакимдарының, атап әйткәндә, Арслан хан Мөхәммәт ибн Сөләймәндең хан хеҙмәтендә булды - бында 16 мең тирмәле булып килгәйнеләр. Һәм ул уларҙы үҙ иленә үтеп инергә тырышыусы һәр батшаға ҡаршылыҡ күрһәткәндәр өсөн әс Син иле һәм үҙҙәре араһындағы тауҙар аша сыға торған юлдарға урынлаштырҙы".

Елюй Даши 1134 йылда элекке илен ҡайтанан яулап алыу ниәте менән Ҡытайға 70 мең яугирҙан торған ғәскәрен ебәрә, әммә был поход уңышһыҙ була. Ҡара ҡытайҙар тирә-яҡтағы байтаҡ ҡына халыҡтарҙы буйһондороуға өлгәшә. Уларҙың сәйәси йоғонтоһо көнбайышта Каспий диңгеҙенәсә барып етә. Билдәле фарсы тарихсыһы Рәшид әд дин был турала ошолай яҙа: "Мавераннахр һәм Төркөстанда булған гүрхандар ҡара хитай халҡынан ине".

Ҡара ҡытайҙар империяһы XIII быуат баштарына тиклем йәшәй, әммә уның һуңғы осоронда хөкөм һөргән тарҡаулыҡ, туҡтауһыҙ тиерлек барған һуғыштар һәм төркиҙәрҙең берләштерелгән ғәскәре булмау сәбәпле, Сынғыҙхан тарафынан яулап алына. Еңелеүгә дусар булған ҡара ҡытайҙарҙың бер өлөшө монгол ғәскәренә ҡушыла, ҡалғандары дала кинлектәренә ҡасып китеү яғын ҡарай. Ибн әл Асир был турала бына нисек яҙған: "Шул арала инде Сынғыҙ хан Төркөстанға килде һәм Ҡашғарҙы, Баласағунды һәм бөтөн илде баҫып алды. Ул унан элекке татарҙарҙы ҡыуып сығарҙы; уларҙың эҙе лә ҡалманы, хатайҙар кеүек үк, улар ҙа таралып бөттө".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БАШҠОРТТАР

## Боронғо мәғлүмәттәр

Бәшнәк - башҡорт мөнәсәбәттәре тураһында үҙебеҙҙең ғалимыбыҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев XIV быуатта йәшәгән Ибн-Халдунға һылтанып, бәшнәктәрҙең дыуандар, ҡаңнылар, табындар кеүек үк башҡорт ырыуы булыуын билдәләй. Бәшнәктәрҙең Уралға үҙҙәренең туғандары булған башҡорттарға килеп һыйыныуы тураһында "Уҙак-Туҙак - бала бәшнәк ярсығы" тигән башҡорт эпосында ла телгә алына.

Үҙ заманы өсөн күршеләренән бер ҙә ҡайтыш булмаған йәмғиәт ҡорған халыҡ булараҡ, башҡорттар ислам дине тарихи аренаға сығыу менән үк уның менән таныша. Халыҡ булараҡ ныҡлы аяҡта баҫып торғанға күрә, уларға бер төрлөлөктә тәьмин иткән, уны нығытҡан бер төрлө донъяуи ҡараш та кәрәк булған. Ошо ҡараштың булдырырға уларға ислам дине ярҙам иткән. Шуға күрә башҡорттар исламды ҡабул итеп социаль иерархияла тағын да юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелгәндәр һәм көнсығыш цивилизацияһының айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әйләнеп, башҡорт иле ошо цивилизацияның иң Төньяҡ мәмләкәтен тәшкил иткән.

Башҡорт йәмғиәте күрше-тирә халыҡтар менән сағыштырып ҡарағанда, улар менән бер үк кимәлдә торған булған. Уның ауылдары ла, ҡалалары ла булған. Хәҙерге менән сағыштырғанда ул ҡалаларҙы, бәлки, ҡала тип тә әйтеп булмайҙыр, әммә заманы өсөн улар ҡала булғандар. Был ҡалалар тураһында ла көнсығыш сығанаҡтарында мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған.

Мәҫәлән, башҡорт ҡалалары тураһында XII быуат географы Иҙриси яҙа. Ул Ҡастра, Мастра, Ҡаруҡия, Нимжан, Гурхан тип аталған бер нисә башҡорт ҡалаһын һанап китә һәм уларға ҡыҙыҡ ҡына характеристикалар бирә. Был автор шулай уҡ башҡорт иленән Хорезмға алтын, баҡыр, төрлө ҡиммәтле йөнлек тиреләре сығарылыуын да айырым һанап китә.

Башҡорт ерҙәрендә төрлө ҙурлыҡтағы 78 ҡала барлығын Испаниянан башҡорт ерҙәренә килеп киткән гәрәп сәйәхәтсеһе әл-Гарнати яҙып ҡалдырған. Гарнатиҙың башҡорттар менән ҡыҙыҡһынып, улар араһына килеүенең сәбәбе, бәлки, Испанияға барып етеп унда урындағы халыҡ араһында ассимиляцияға дусар ителеп, юҡ булған бәшнәк, башҡорттар тураһындағы әле беҙ белмәгән мәғлүмәттәр булғандыр, тип уйларға урын бар. Сөнки, нишләп әллә ҡайҙа ятҡан Испаниянан ул башҡорттарҙы күрергә ынтылған һуң тигән һорау тыуа.

Башҡорт ҡалалары тураһындағы мәғлүмәт уғыҙҙарҙың "Огуз-намә" дастанында ла бар. Башҡорттар баш эйергә теләмәгәс, Уғыҙхан башҡорт иленә яу менән барғанда уларҙың "Оло Бағыр" (башҡортса Оло баҡыр) тигән ҡалаһында туҡтап китә. Башҡорт ерҙәрендә борон-борондан баҡыр сығарылыуын иҫтә тотоп һәм "Оло Бағыр" атамаһының баҡыр менән бәйле атама булыуынан сығып, Силәбе ғалимы Д.А. Таиров был ҡаланың хәҙерге Орск йәки Медногорск тирәһендәрәк урынлашҡан булыуы ихтимал тип яҙа. Был ҡалаларҙың икеһе лә баҡыр менән бәйле.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

**(Дауамы бар).**

✓ ***Рәсәй субъекттары араһында Башҡортостан Италияны ҡатын-ҡыҙ эшселәр менән тәьмин итеүсе төп төбәктәрҙең береһе булып тора. Бигерәк тә Баймаҡ, Учалы райондарынан, Стәрлетамаҡтан күптәр.***



**Башҡорт халҡының "Ғилмияза" тигән халыҡ йырындағы был юлдар ҡыҙҙың тыуған яғына ҡайтырға зар-интизар булыуын сағылдырһа, бөгөн илдәге иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ ир-егеттәрҙе генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла ғаиләһен ҡарау, балаларын аяҡҡа баҫтырыу маҡсатында сит ерҙәргә сығып аҡса эшләргә мәжбүр итә. V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ла ошо тема иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Оло ҡорға Италиянан һәм Испаниянан делегат булып ҡайтҡан социология фәндәре кандидаты Гөлнара НАФИҠОВА һәм психиатр-нарколог, психотерапевт Гөлгөнә ҒӘЙНУЛЛИНА менән ҡатын-ҡыҙҙарҙың хеҙмәт миграцияһы, ир-ат абруйы һәм башҡа көнүҙәк мәсьәләләр буйынса әңгәмәләшәбеҙ.**

**Ғәҙәттә, тыуған ерҙән айырылып сит ерҙәргә оҙон аҡса артынан китәләр. Һеҙ Башҡортостанда ла аяғында ныҡ баҫып торған, үҙенең матди һәм рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән кешеләр инегеҙ. Сит илгә сығып китергә нимә мәжбүр итте һуң?**

**Гөлнара Нафиҡова:** Ысынлап та, Италияла Башҡортостандан барып эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар күп һәм уларҙың барыһының да маҡсаты бер - кемгәлер балаһын уҡытыу, кемгәлер ипотекаһын түләү, кемгәлер йорт һалыу өсөн аҡса эшләргә кәрәк. Әммә минең маҡсатым ундай түгел ине, сөнки беҙ ҡыҙым менән ял итергә генә барғайныҡ. Аспирантурала уҡығанда ла ял итергә йөрөй инем, унда таныштарым да бар. БДУ-ның Учалы филиалында эшләй башлағас, дөрөҫөн әйткәндә, баш күтәрергә лә ваҡытым булманы. Өс йыл үткәс, берҙәнбер көндө ҡыҙыма: "Былай булмай, беҙ ҡайҙалыр барып ял итергә тейешбеҙ", - тинем. Дөрөҫөн әйткәндә, йорт эргәһендә муйыл үҫеп ултырған, мин хатта уның барлығын да, йыл һайын сәскә атыуын да күрмәгәнмен, тоймағанмын. Шул тиклем эшкә сумғанмын. Шулайтып, 2009 йылда Италияға барып ҡайтырға булдыҡ. Тап шул ваҡытта илгә инеүҙе легалләштереү тураһында закон сыҡты. Таныштарыбыҙ: "Әгәр теләһәгеҙ, ҡалығыҙ, өс айҙа документ эшләп була, уның менән йыл һайын килеп йөрөй алаһығыҙ", - тине. Документтарҙы бирҙек. Ике ай эсендә закон сығыр тип көтәбеҙ, әммә ул сентябргә тиклем сыҡманы. Университетҡа шылтыратып, үҙ иҫәбемә отпуск алдым, уҡый торһон, тип ҡыҙымды ҡайтарып ебәрҙем. Беҙгә йыл һайын килергә рөхсәт биргән документты ярты йылдан ашыу көтөргә тура килде. Ҡыҙымды ҡабат саҡырып алдым һәм ул Италияла уҡыны. 1 сентябргә Башҡортостанға ҡайтырға тип йыйынғайныҡ, уҙған уҡыу йылы Рәсәйҙә иҫәпкә алынмай, ошо синыфты ҡабаттан уҡырға кәрәк, тинеләр. Ҡыҙым теләмәне һәм уның урта звеноны - 9 класты тамамлағанын көтөргә булдыҡ. Һуңынан тағы Башҡортостанға запрос ебәрҙек, әммә тағы ла кире яуап алдыҡ, йәғни ундағы уҡыу йылы бындағы менән тап килмәй. Шунан ҡыҙымдың урта белем алыуын көтөргә тура килде. Һуңынан ул институтҡа инде, биш йыл унда уҡыны. Шулайтып, 10 йылыбыҙ үтеп бара. Ҡыҙым институт тамамланы, ейәнемә 4 йәш, һаман ҡайтып булмай. Һәр кешенең үҙ тарихы, үҙ яҙмышы, үҙ көрәсәге инде. Мин Башҡортостанда ла аҡсаны насар эшләмәнем. Фатирым да бар ине. Етәкселек вазифаһын да тәҡдим иткәйнеләр, әммә юлым бөтөнләй уйламаған яҡҡа алып китте.

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Мин дә матди яҡтан ҡытлыҡ кисермәнем, хәҙерге йәштәр әйтмешләй, "шоколадта" йәшәнем. Үҙемдең медицина үҙәгем бар ине. Телевидениела "Һаумыһығыҙ" тигән авторлыҡ программаһын алып барҙым, айыҡ һәм сәләмәт тормош рәүешен пропагандалауҙы мин башланым тиһәм дә хата булмаҫ. Тапшырыуҙарымда айыҡ, етеш йәшәү мөмкинлеге үҙеңдән, үҙеңдең фекерләүеңдән тора икәнен, йолаларҙы онотмайынса, халыҡ медицинаһы менән дауаланып булыуын аңлатырға, иң мөһиме, аңды профилактикаға, үҙеңде-үҙең һаҡларға кәрәклегенә йүнәлтергә тырыша инем. Шул ваҡыттарҙа уҡ буҙа эшләй инем һәм хатта уның организмға файҙаһын Тәлғәт Зөлҡәрнәев етәкселегендә БДМУ-ның гигиена кафедраһында фәнни яҡтан тикшереп, ғилми эш башҡарҙым, эсемлекте үҙ исемемә патентларға тәҡдим дә алдым, әммә быға ҡаршы булдым, сөнки буҙа - ул беҙҙең милли эсемлегебеҙ, ә минеке генә түгел. Халыҡты алкоголдән айырып, күпләп буҙаға ултыртырға теләйбеҙ икән, ул халыҡтыҡы булырға тейеш, тип уйланым һәм күңел талабы буйынса эшләнем.

Әбйәлилдә шәхси дауалау үҙәге төҙөтә башлағайным. Эш күплеге сәләмәтлегемде ҡаҡшаттымы, башҡа сәбәп булдымы, әммә бер ваҡыт сирләй башланым - йәйҙе еңел үткәрәм, ҡышын өйҙән дә сыға алмайым, ауырыйым. Табиптар һыуыҡҡа аллергия (криоген аллергия) тигән диагноз ҡуйҙы. Ысынлап та, йылы яҡҡа барып ял итһәм, һин дә мин йөрөйөм, бында ҡайтып, һыуыҡтар башланһа - өйҙән дә сыға алмайым. Ҡапыл барлыҡ пландар емерелде. Ике генә юл ҡалды: йә аллергияға ҡаршы гормональ препараттар ашап йәшәйем, астматикка һәм уның эҙемтәләре килтергән сирлегә әйләнәм; йә йылы яҡҡа китеп йәшәп ҡарап, унда сир юҡ була икән, тимәк, ҡалған ғүмеремде шунда йәшәргә тейеш булам. Мысырға барып ҡараным. Бынан гормондарҙа сығып киттем, унда барып өс аҙна йәшәгәйнем - һин дә мин йөрөйөм. Бында ҡайтҡайным - тағы ла сирле. Аптырағандан, унда климат йомшағыраҡ тип, фатирыма кеше индереп, ҡыҙымды ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Мәскәүгә сығып киттем. Унда ун йыл самаһы йәшәп, аллергия бөтмәгәс, ахырҙа, берәй йылы илгә барып йәшәргә ҡарар иттем. Шулай итеп, Испанияға барып төпләндек.

# ”ИЛКӘЙЕМӘ ЛӘ ШУЛ



**Яҙмыш ҡушыуы буйынса сығып киткәнһегеҙ, Башҡортостан, тыуған ер һағындырамы?**

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Һағындырыу ғынамы! Әле Өфөгә ҡайтҡас, Башдрамтеатр эргәһендәге паркта Зилә тигән бер делегат менән ҡайындарҙы ҡосаҡлап-ҡосаҡлап йөрөп, илап, танһығыбыҙҙы ҡандырып алдыҡ.

***Испанияға бындағы бөтөн ғәҙәттәремде, башҡорт рухын эйәртеп сығып киттем инде, ҡалайтаһың. Ул бит беҙҙең гендарҙа ултыра. Испанияла күмер самауырҙан сәй эсәм, буҙа ҡоям, ундағы шарттарҙа ҡорот эшләргә өйрәнеп алдым. Үҙебеҙҙең эшкә барған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын йыйып, бергәләшеп сәйҙәр эсәбеҙ, үҙебеҙҙең төркөмөбөҙҙө төҙөнөк. Испания башҡорттарының кесе ҡоролтайын ойошторҙоҡ, тип көлөшәбеҙ. Италияға, Францияға бер көнлөк экскурсиялар ойоштороп, осһоҙло турҙар табышып, төрлө саралар үткәреп, лаванда ҡырҙарына саҡырып, бергәләп ҡаңғыр-көнгөр киләбеҙ.***

Миненсә, Испанияға бындағы бөтөн ғәҙәттәремде, башҡорт рухын эйәртеп сығып киттем инде, ҡалайтаһың. Ул бит беҙҙең гендарҙа ултыра. Испанияла күмер самауырҙан сәй эсәм, буҙа ҡоям, ундағы шарттарҙа ҡорот эшләргә өйрәнеп алдым. Үҙебеҙҙең эшкә барған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын йыйып, бергәләшеп сәйҙәр эсәбеҙ, үҙебеҙҙең төркөмөбөҙҙө төҙөнөк. Испания башҡорттарының кесе ҡоролтайын ойошторҙоҡ, тип көлөшәбеҙ. Италияға, Францияға бер көнлөк экскурсиялар ойоштороп, осһоҙло турҙар табышып, төрлө саралар үткәреп, лаванда ҡырҙарына саҡырып, бергәләп ҡаңғыр-көнгөр киләбеҙ. Рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп, ҡайтып килһәләр, Башҡортостан күстәнәстәре менән һыйланып, шулайтып йәшәйбеҙ. Шәхсән мин Башҡортостанды ныҡ һағынам. Хатта Өфөлә фатир һатып алып, йәйгеһен - Башҡортостанда, һыуыҡтар башланғас Испанияға барып йәшәргә тигән хыялым да юҡ түгел.

**Ҡатын-ҡыҙҙың сит илгә хеҙмәт миграцияһының төп сәбәбе - ғаиләнең иҡтисади нигеҙенең, йәғни матди хәленең ныҡ булмауы икәне бер кемгә лә сер түгел. Әммә күнеккән тормош рәүешен ҡапыл ғына бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп ебәреү, барыбер ҙә, һәр кем өсөн ауыр, стресс. Ғәҙәттә, сит илгә кемдәр, ниндәй категория сыға?**

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Әлбиттә, үҙ-үҙеңде һындырыуы еңел түгел, әммә нимәлер ҡылмайынса ла мөмкин түгел. Сит ергә барып эшләү - сир, ауыртыныу, ғазап, һәр яҡлап ауыр хәл. Минең һәр күсенеүем янғын аша үткән һымаҡ булды. Башҡортостандан Мәскәүгә күсенгәс, үҙемде, донъямды ҡабаттан "йыйҙым". Әммә балам эргәмдә булғанлыҡтан, уның өсөн хафаланыу, борсолоуҙан азат инем. Аҡса эшләргә барыусылар иһә ғаиләһен, балаларын ҡалдырып китергә мәжбүр. Испанияла Башҡортостандан, минең тыуған районым Әбйәлилдән дә барып эшләп йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар бар. Көрсөккә тиклем уларҙы ниндәйҙер туристик агентлыҡ килтереп, эш табышып биреп, улар шунда берәй ғаиләгә инеп китеп, эшләгәндәр. Шунда уҡ йәшәйҙәр, ашайҙар. Ял көндәрендә ҡалаға сығалар. Барселонала Каталония майҙанында йыйылалар, үҙ-ара яңылыҡтары менән бүлешәләр, аралашалар, сәй эсәләр, бер-береһенә эш табышалар. Кризис башланғас, вакансия барлыҡҡа килә икән, уны ишетеп ҡалып, бер-береһенә һатыу кеүек күренештәр барлыҡҡа килгән. Аҡса килеп ҡыҫылһа, үҙегеҙ беләһегеҙ, аралар бер аҙ боҙолоп китә. Әммә йолаға тоғро ҡалып, һаман осрашалар. Балаларҙы, ҡарт-ҡороно, коляскала ултырған инвалидтарҙы ҡарау - ул бер категория эшселәр. Икенсе категория - эш эҙләп түгел, икенсе проблемалар буйынса мәжбүри рәүештә, әммә үҙ теләктәре менән барып сығыусылар. Ләкин Испания, бына мин барам да унда карьера эшләйем, тип уйлаған илдәр иҫәбендә тормай. Был ил күңел асып, ритайым стилендә йәшәй. Улар байрамдар ярата, барлыҡ провинцияларында тиерлек коррида законлы рәүештә үткәрелә. Дини байрамдары бик күп. Шуға, йүгереп йөрөп эшләйем, үҙемдең белемемде раҫлайым да карьера яһайым, тигән илдәр иҫәбенә инмәй.

Икенсе категория кешеләр - нимәнәндер арып, ялҡып, нимәлер иҫәбенә йәшәргә мөмкинлектәре булыусылар. Улар йә тыуған ерендә фатирын ҡуртымға бирә һәм сит илдә тормоштан ҡәнәғәтлек алып йәшәй.

Өсөнсө категория күптән унда төпләнгәндәр һәм пенсияға сыҡҡан ата-әсәһен саҡырып алыусылар.

Иң юғары категорияны ябай халыҡ "текәләр" тип йөрөтә. Улар 500 мең евроға бизнес йәки фатир һатып ала икән, шунда уҡ алтын карта һәм Испания гражданлығы бирелә. 10 көн эсендә испанлы булып китә: ил президентын һайлауҙа ла ҡатнаша, барлыҡ хоҡуҡтарға эйә була. Ундайҙар хатта башҡорттар араһында ла бар.

**Гөлнара Нафиҡова:** Категориялар буйынса, тағы бер категория бар: әгәр иҫләһәгеҙ, заманында ҡыҙҙарҙы сит илдәргә бейеү түнәрәктәренә саҡырған иғландар сыға торғайны. Дөрөҫөн әйткәндә, ундай категория интим хеҙмәт күрһәтә. Быны йәшереп ҡалдырып та булмай. Шундай иғландар буйынса Башҡортостандан барыусылар ҙа бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре шунда кейәүгә сығып, хәҙер инде ғаиләле, матур итеп йәшәп ята. 2014 йылда ҡатын-ҡыҙҙарҙың хеҙмәт миграцияһы тигән темаға социологик һорау алыу үткәргәйнем. Уның һөҙөмтәләре буйынса ошо категория икенсе урында торҙо. Беренсе урында тап эш эҙләп сығып китеүселәр. Һәм шуны билдәләп китергә кәрәк: Рәсәй субъекттары араһында Башҡортостан Италияны ҡатын-ҡыҙ эшселәр менән тәьмин итеүсе төп төбәктәрҙең береһе булып тора. Бигерәк тә Баймаҡ, Учалы райондарынан, Стәрлетамаҡтан күптәр. 35-44 йәшлектәр дөйөм һандың иң ҙур өлөшөн алып тора - 36 процент самаһы. 75 процент мигрант ҡатын-ҡыҙҙарҙың 18 йәшкә тиклемге балалары бар. Күп осраҡта сит илгә сығып эшләүселәр тулы булмаған ғаиләләрҙән, айырылышыусы, яңғыҙ йәки тол ҡатындар булһа, никахта тороусылар 27 процент тәшкил итә. Уларҙың өстән бер өлөшө юғары йәки тамамланмаған юғары белемле.

**Себергә киткән ир-ат та, сит илдәргә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ ҙа, нисек кенә булмаһын, үҙенең тыуған ерендә эш, уға лайыҡлы түләү таба алмайынса ғаиләһенән айырылып, ситтә эшләргә мәжбүр бит… Мәҫәлән, кемдер сит илдә оло йәштәгеләрҙе тәрбиәләй, кемдер ашарға бешерә, өй таҙалай, тигәндәй. Беҙҙә лә бит социаль хеҙмәткәр тигән хеҙмәт төрө бар. Моғайын, лайыҡлы түләү булһа, ул ҡатын-ҡыҙ тыуған ерендә лә сит илдә башҡарған эштәрҙе эшләй алыр ине…**

**✓ *Беҙҙең система, беҙҙең сәйәсәт үҙе ирҙәрҙе ярҙамһыҙ, хоҡуҡһыҙ итә. Уларҙы кешегә һанамайҙар. Был беҙҙең дәүерҙең социаль проблемаһы ғына түгел, фажиғәһе. Ирҙәр абруйын беҙ яңы килгән быуындарҙа ғына тәрбиәләй алабыҙ.***



# ҠАЙТЫР ИНЕМ...”

**Гөлнара Нафиҡова:** Барыһы ла мөнәсәбәттән тора. Италияла социаль хеҙмәткәр эшен башҡарыусыға эш биреүсе ниндәй мөнәсәбәттә лә, беҙҙә нисек. Рәсәйҙә кемдер берәйһенең өйөнә барып эшләһә, шунда уҡ ҡолға ҡараған кеүек ҡарай башлайҙар. Италияла бөтөнләй ундай мөнәсәбәт юҡ. Һирәк кенә осрайҙыр, бәлки, әммә нигеҙҙә яҡшы мөнәсәбәттәләр. Итальяндар законға буйһоналар, ҡануниәткә нимә нисек яҙылған - шуны үтәйҙәр. Әгәр ҙә хеҙмәткәргә кемдер эш хаҡын бирмәгән йәки аҙ түләгән, рухи яҡтан кәмһеткән икән, улар социаль хеҙмәттәргә мөрәжәғәт итә. Закон хеҙмәткәрҙе яҡлай, шунда уҡ ғәҙеллек булдырыла. Шул яғы ла ныҡ йоғонто яһайҙыр, моғайын.

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Мин аралашҡан ҡатындар барыһы ла шундай эштә. Яйлап асылып, үҙҙәренең яҙмыштарын әсенеп һөйләп алалар. Рәсәйҙә кеше күңелен уйлап тормайынса, кәмһетеп, йөҙөндә йыртырға, тураһын бәреп әйтергә яраталар. Ә сит илдә, киреһенсә, эш биргән ғаилә уларға алиһәгә ҡараған кеүек ҡарай. Эш биреүсе хатта иҫкәрмә яһағанда ла бер ваҡытта ла түбәнһетмәй, киреһенсә, һәр ваҡыт үтенес белдерә, һәр ваҡыт "һеҙ" тип кенә мөрәжәғәт итә. Байрам һайын бүләктәр, премиялар бирәләр, йылына 13 эш хаҡын түләйҙәр. Әлбиттә, кеше эшкә рәсми рәүештә урынлашҡан булһа.

Элек сит илгә бара һалып эш тапһалар, бөгөн рәсми теркәмәй эшләтеү күренеше бөттө. Ундай эш биреүселәргә штраф 250 мең евро. Шуға хәҙер Испанияла рөхсәтһеҙ йәшәгән кешеләрҙе эшкә алмайҙар. Законлы рәүештә эшкә алыу тигән һүҙ илгә легаль рәүештә килгән тигәнде аңлата. Йә уның ваҡытлыса йәшәргә урыны, йә эшләргә рөхсәте булырға тейеш. Легаль рәүештә эшкә алыныу менән хеҙмәткәр закон яҡлауына эләгә. Уның медицина ярҙамына, эш хаҡына, ялына - бөтөн нәмәгә гарантиялы хоҡуғы бар.

**Гөлнара Нафиҡова:** Әлбиттә, улар үҙҙәренекен дә ҡулдан ысҡындырмай, итальяндар, мәҫәлән, һинең менән шулай матур итеп һөйләшәсәк, әммә үҙҙәренең мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуя. Был - капитализм донъяһы. Мәғлүм булыуынса, Италияла шарап йылға булып аға, тигәндәй, әгәр ҙә хеҙмәткәр яңылыш эсеп ебәрә икән, итальяндар ҡарап тормай - шунда уҡ эштән ҡыуып сығарырға мөмкин. Закон был яҡтан да бик ҡаты.

**▸ Һүҙ ҡатын-ҡыҙ хаҡында барһа ла, мәсьәләгә ныҡлап күҙ һалғанда, һәр осраҡта ла ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда ир-ат үҙенең абруйын күберәк юғалта түгелме? Сөнки ир-ат ситкә эшкә китһә, балалар эргәһендә һәр саҡ әсәй була һәм ғаиләлә иң мөһим кеше, ғаилә башлығы әсәй, тигән фекер нығына. Өйҙә ир менән балалар ҡалып, әсәй эшкә китһә, әсәй аҡса табыусы һәм барыбер ҙә ул тотҡа кеүек күренә. Ошо хәл-торошта ир-аттың абруйын нисек һаҡлап ҡалырға?**

**Гөлнара Нафиҡова:** Нисек кенә булмаһын, ситкә китеп эшләү - иң беренсе ғаиләләрҙе боҙа. Сөнки, ысынлап та, ир-аттың абруйы юғала, ғаиләлә табыусы, туйҙырыусы булып ир түгел, ә ҡатын-ҡыҙ күҙаллана. Балалар әсәһенә нығыраҡ иғтибар йүнәлтә, сөнки ул тәьминәтсе, ә атай, әйтерһең дә, кәрәкмәгән ғаилә ағзаһы. Икенсе яҡтан, ир бер яҡта, ҡатыны икенсе ерҙә булғанда бер-береңә ышанмаусылыҡ тыуа, көнләшеү башлана, ул хыянатҡа килтерә. Сит илгә эшкә йәш ҡыҙҙар барһа, улар сит милләткә кейәүгә сығып, шунда ҡала.

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Ир кешенең абруйы, баһаһы тураһында, ир менән һуңғы йылдарҙа ғына йәшәй башлаған кеше булараҡ, хатта яуап бирергә ауырһынам. Быға тиклем донъямды, тормошомдо үҙ аҡылыма, үҙ пландарыма, һаулығымдың мөмкинлегенә таянып алып барҙым. Әммә күҙәтеүҙәрем буйынса, хәҙер заманы шулай. Ирҙәр кәмһетелеп, комплекслы булып ҡалды. Совет заманында бер кемде лә эшҡыуарлыҡҡа өйрәтмәнеләр, барыбыҙ ҙа тиң инек. Йүгереп йөрөп сауҙа итеү, бол туплау, мал үрсетеү хилаф һаналды. Беҙҙең ирҙәр быға өйрәтелмәгән. Донъялар үҙгәреп киткәс, үҙгәрештәргә ҡапыл ҡулайлаша алмағандар диванда ятып хәмер эсеү йәки телевизор алдында һыра һемереп ултырыуҙы өҫтөн күрә башланы. Егәрлеләр үҙ эшен булдырҙы йә Себергә сығып китте, ә кемгәлер буйһоноп, ҡушҡанды ғына үтәп өйрәнеүселәр өйҙә ята.

> ***Нисек кенә булмаһын, ситкә китеп эшләү - иң беренсе ғаиләләрҙе боҙа. Сөнки, ысынлап та, ир-аттың абруйы юғала, ғаиләлә табыусы, туйҙырыусы булып ир түгел, ә ҡатын-ҡыҙ күҙаллана. Балалар әсәһенә нығыраҡ иғтибар йүнәлтә, сөнки ул тәьминәтсе, ә атай, әйтерһең дә, кәрәкмәгән ғаилә ағзаһы. Икенсе яҡтан, ир бер яҡта, ҡатыны икенсе ерҙә булғанда бер-береңә ышанмаусылыҡ тыуа, көнләшеү башлана, ул хыянатҡа килтерә.***

Илдә былай ҙа ирҙәр дефицит. Беҙҙең дәүер кешеләрен Афғанстан, Чечня, эскелек ҡырҙы. Ғаиләһен ҡарарлыҡ, мал табырлыҡ, абруйлы ирҙәрҙең булмауы ҡатын-ҡыҙҙың да бәләһе ул. Әммә ошо мәжбүри миграция арҡаһында булғанының да абруйы төшә, тарҡала. Беҙҙең система, беҙҙең сәйәсәт үҙе ирҙәрҙе ярҙамһыҙ, хоҡуҡһыҙ итә. Уларҙы кешегә һанамайҙар. Был беҙҙең дәүерҙең социаль проблемаһы ғына түгел, фажиғәһе. Ирҙәр абруйын беҙ яңы килгән быуындарҙа ғына тәрбиәләй алабыҙ. Тулыһынса үҙен-үҙе тәьмин итә алған, белемле, бөтөн ғаиләһе өсөн яуаплылыҡ тойған ирҙәр ҡабат барлыҡҡа килһен өсөн бер-ике быуын алышынырға тейештер.

**Гөлнара Нафиҡова:** Уйлап ҡараһаң, был махсус сәйәсәт кеүек. Нисек инде шундай бай Башҡортостанда башҡорт ирҙәренә эш юҡ ул? Бер генә миҫал: төшкө ашты ашарға бер кафеға индем. Өҫтәл тултырып бер урында чечен егеттәре ултыра, арыраҡ - төрөктәр. Сығып барғанда ҡаршыма эшләп йөрөүсе төрөктәр осраны. Минең таныштарым араһында төрөктәр күп. Улар бында килеп эшләй башлағанда мин аспирантурала уҡый инем. Ҡустымды уларға эшкә урынлаштарҙым. Ике ярҙамсы эшсе. Береһе - төрөк, береһе - башҡорт. Эш хаҡын түләгәндә хужа төрөк егетенә бер төрлө сумма бирә, минең ҡустыма, ошо ерҙең аҫабаһына - ике тапҡырға кәмерәк. Эш күләме шул уҡ. Нишләп Хөкүмәт шундай мөнәсәбәттәрҙе тикшермәй, асыҡламай, ниңә программалар эшләмәй? Ситтән килгән кеше - хужа, ошо ерҙең хужаһы - ҡол хәлендә.

Мәҫәлән, шул уҡ Италияла йәки башҡа илдә иң беренсе ситратта үҙ халҡын ҡарайҙар. Әгәр ҙә үҙенеке юҡ икән, шул осраҡта ғына килгән кадрға мөмкинлек бирелә. Беҙ ял итергә барған йәйҙә үк, таныштарымда йәшәп, черешня йыйырға ярҙам иттек. Унда бөтөн ауылдарҙан киләләр. Иң тәүҙә үҙ халҡына бирә эште: әбейме ул, бабаймы - ҡарап тормай. Шунан ғына башҡаларға. Шунда минән, үҙ телеңдең алфавитын беләһеңме, тип һоранылар. Төрөк телен, ғәрәп телен, рус телен һ.б. беләм тигәс, ышанмайҙар. Әгәр шул тиклем күп телде беләһегеҙ, бай интеллектуаль запасҡа эйә икәнһегеҙ, бында нимә эшләп йөрөйһөгөҙ, тип аптырайҙар.



**▸ Ҡайһы бер иҡтисадсылар иҡтисади хәлде яҡшыртыр һәм иҡтисадты күтәрер өсөн ҡатын-ҡыҙҙар эшләмәҫкә тейеш, ти. Сөнки ҡатын-ҡыҙ аҙ эш хаҡына эшләргә лә риза, һөҙөмтәлә ундайҙар һаны артҡан һайын эш биреүсе эш хаҡын кәмерәк ҡуя. Әгәр ҡатын-ҡыҙ эшләмәй өйҙә ултырһа, ир-ат үҙ хеҙмәте өсөн юғары баһа талап итәсәк, эш хаҡы күтәреләсәк. Был хаҡта нимә уйлайһығыҙ?**

**Гөлнара Нафиҡова:** Бында инде ҡабат гендер мәсьәләһе ҡалҡып сыға. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ барыбер ҙә мосолман республикаһы һәм ошоно иҫәпкә алырға, ниндәйҙер икенсе төрлөрәк ҡараш булырға тейеш. Был ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеү тигәнде аңлатмай, киреһенсә, ҡатын-ҡыҙға, йорт усағын һаҡлаусы булараҡ, күберәк өйҙә, ғаиләлә булыу, бала тәрбиәләү мөмкинлеген бирергә кәрәк. Өйҙә ултырып ул күберәк файҙа килтерәсәк: һаусәләмәт, аҡыллы балалар үҫтерәсәк. Әгәр, ысынлап та, башҡорт илендә башҡорт ирҙәренә дилбегәне ҡулына тотторһаң, улар хужа булыр, яуаплылыҡ тойор ине. Ә беҙҙә, киреһенсә, ситтән килеүселәргә юл ҡуйып, үҙебеҙҙе башҡорт тип әйтергә лә ҡурҡып йәшәйбеҙ.

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Минең өсөн тормош нимәне раҫланы: Испанияла мосолмандар миграцияһы бик көслө. Тәүҙә уларҙың береһе килә, шунан яйлап ғаиләһен, туғандарын тартып ала. Дин тоталар, бер тамсы алкоголь ҡулланмайҙар. Ирҙәре эшләй, ҡатындары бала табып, өйҙә бала ҡарап ултыра, үҙ традицияларында тәрбиәләй. Үҙҙәренең милләтен бөтөн донъя буйлап көсәйтәләр. Тупылдатып 5-10-ар бала табалар, уларҙың һәр береһенә пособие түләнә. Балалары абруйлы белем усаҡтарында, вуздарҙа уҡый. Ошо мигрант ирҙәр берләшеп магазин асалар, көнө-төнө эшләйҙәр. Тиҙҙән Европаны баҫып аласаҡтар. Беҙ ҙә бит мосолмандар, тик нишләп үҙебеҙҙең илебеҙҙә лә көсәйә алмайбыҙ?

**▸ Башҡортостанда йәшәүселәрҙең, бәлки, ниндәйҙер өлөшөнөң ситкә сығыу, сағыштырыу мөмкинлеге лә юҡтыр, улар тормош шулай икән, тип тик йөрөй. Һеҙ - 5-се Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары. Секциялар эшендә милләттәштәргә һүҙегеҙҙе әйтә, уларҙың күҙҙәрен саҡ ҡына булһа ла аса, баштарына уй һала алдым, тип уйлайһығыҙмы?**

**Гөлгөнә Ғәйнуллина:** Мин һәр саҡ үҙемсә халыҡ алкоголь ҡулланыуҙан туҡтамаһа, яйлап ҡырыла, аңы һәр саҡ томанлы булғанлыҡтан, аҡыл менән эш итә алмай икәнен аңлатырға тырышып йәшәнем. Әле лә шул фекерҙәмен һәм сығышымды ла шуға бәйләнем. Эскелек күп ғаиләләрҙең бәкәленә һуға, сөнки эскән кешегә диңгеҙ тубыҡтан, уның ваҡыты бушҡа үтә, яҡшы идеялар килмәй, сөнки ул һәр саҡ наркотик йоғонтоһо аҫтында була.

Профессиональ психолог-нарколог булараҡ, эскән кешенең йылына ете яңы кешене эскелеккә ылыҡтырыуын беләм. Айыҡ кеше үҙенең тәртибе менән шулай уҡ ете кешене айығыуға әҙерләй. Йәмғиәт шулай итеп һауығыуға табан бара, әммә эскән кеше сирле тоҡом, ғаиләһендә сәләмәт булмаған аң ҡалдыра. Ғаиләлә алкоголик бар икән, уның ҡатынында ла бәйлелек барлыҡҡа килә, уға ла алкоголик аңы күсә. Ул һәр саҡ ире эсә башлаһа ыҙа сигергә, балаларының яфаланыуына әҙерләнеп, шуны көтөп йәшәй. Ирҙең эсеүе туҡтаһа, тағы ла дәртләнеп китә, уның башҡаса эсмәҫенә ышана һәм ошо ҡулсанан сыға алмай. Уларҙың тормошо һикәлтәле юлдан бара: йә упҡынға осалар, йә тауға менәләр. Был - йәрәхәтле, яралы яҙмышлы ғаилә. Балалары ла ошо күренешкә программаланған. Үҙҙәрен кәм итеп ҡуялар, комплекс барлыҡҡа килә.

**Гөлнара Нафиҡова:** Халыҡтың эсеүе лә үҙенә күрә сәйәсәт бит ул. Иҫерек халыҡ менән идара итеүе еңел. Шуға күрә эскелекте пропагандалау киң ҡолас менән бара. Бына хәҙер башҡорт йәштәре араһында бик күп йәмғәт ойошмалары бар. Улар бит сәйәсәт өсөн көрәшмәй, һәр ҡайһыһының үҙ юлы булһа ла, маҡсаттары бер - башҡортто уятырға, уяндырырға, айнытырға. Шул егет-ҡыҙҙарға юл бирергә кәрәк, әйҙә, үҙ юлдары менән барһындар, сөнки улар ошо йәмғиәттең уртаһында ҡайнап йәшәй, үҙ күҙҙәре менән күрә. Саҡ ҡына иркенлек булһа, улар 3-4 тапҡырға күберәк эшләрҙәр, һәр кем уларға тиңләшергә тырышырлыҡ ир-ат өлгөһө була алырҙар ине.

Секцияла, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙың хеҙмәт миграцияһы мәсьәләһен күтәрҙем. Уның ғаилә, йәмғиәт өсөн кире яҡтарын, хәүефен күрһәтергә тырыштым. Резолюцияға ошо һорауҙы индерерҙәр, тип ышанам. Был тема буйынса мин күп урындарҙа сығыш яһаным һәм бөтөн ерҙә ҡатын-ҡыҙҙың хеҙмәт миграцияһының төп сәбәбе булып ярлылыҡ тороуын күрһәтергә тырыштым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ирҙе ир иткән дә - ҡатын, хур иткән дә - ҡатын, тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Ғәмәлдә, ир-ат ғүмер буйы ҡатын-ҡыҙҙың энергетикаһы менән йәшәй. Әгәр ул саф һәм таҙа энергетика ала алмай икән, яйлап был тормоштағы тәғәйенләнешен юғалта, икенсе юлдан китә, аҙаша, хаталана. "Башҡорт ҡатындары ла ирен алға ҡуйып, уларҙы яйлап-майлап, һылап-һыйпап, балаларын тәрбиәләп, үҙенең ыңғай энергетикаһы менән ирен ҡанатландырып, уға шарттар тыуҙырып өйҙә генә ултырһа, файҙа күпкә күберәк", - ти әңгәмәселәрем. Әммә бының өсөн ир-аттарҙың эш урыны, ғаиләһен тәьмин итерлек лайыҡлы эш хаҡы булырға тейеш. Ул ваҡытта сит илдәргә эшкә сығып киткән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа тыуған илдәренә имгәкләп булһа ла ҡайтыр ине, моғайын...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

**✓ - Берәүһе муйыһындан жетонды йолҡоп алып ырғытты. Тегеләр бер-береһенә ҡарашып алды. Олорағы килеп, нимәләр әйтте. Теле башҡа булһа ла, миңә: "Ҡайт, мосолман. Әсәйең көтә", - тип ишетелде.**






Таң һарыһынан баланы уятҡанға көйгән Вәсилә, һөт бороп торған еренән килеп, осло бармаҡтары менән Миңлехандың арҡаһына төрттө, зәһәр йөҙө: "Етте, бәйләнмә!" - тигәнде аңлата ине. Уның артынан шым ғына түрбашҡа тәпәйләгән ир: "Әҙерәк елләнеп ҡайтһа, тигәйнем", - тип бышылданы. "Бәйләнмә!" - ҡатындың ыҫылдап әйткән һүҙенә ныҡ йәне көйһә лә, көсләшеп торманы, бесәнгә бер үҙе китте.

Ебәрә буламы улын әсә бесәнгә! Ана нисек ҡыҙыу ул бала. Гөлт итеп тоҡанырға тора. Нервыһы бөтөндәй ҡаҡшаған. Атаһы һуғыш тураһында һүҙ ҡуҙғатһа... Йәнен көйҙөрһә... Аллам һаҡлаһын!

Һөтһөҙ ҡуйы сәйҙе һемергәндә алдына һикереп менеп һырпаланған бесәйгә Байрас оҙаҡ итеп текәлеп ултырҙы. Ҡулын күтәреп бер һыйпаһасы! Мырлаҡты ҡайһылай ярата торғайны. Малайҙар муйынына тимер сыбыҡ бәйләп һөйрәтеп йөрөгәндә ҡотҡарып алып ҡайтып, үҙе тәрбиәләп алғайны. Хәҙер иҫе лә китмәй. Бесәй егеттең ялангас беләгенә еүеш мороно менән төрткөләп тә ҡараны, иркәләтеүсе булмағас, мыррр, тип үсегеп төшөп китте.

Байрасҡа күңелһеҙ булмаһын, тип, Вәсилә телевизор ҡабыҙҙы. Бәйләмен тотоп, эргәһенә ултырҙы. Ҡырын күҙ менән генә улын күҙәтте. Мәғәнәһеҙ генә йәнһүрәттән һуң яңылыҡтар башланды. Эфирҙа танктар, автоматлы һалдаттар күренеү менән экранға текәлгән егеттең тын алышы ауырайҙы, йышайҙы, күҙҙәре көсөргәнеп ҡыҫылды. Ул репортерҙың һүҙҙәрен дә ишетмәй ине, ахыры, бармаҡтары эргәһенән нимәнелер һәрмәп табырға тырышты. Вәсилә тиҙ генә пультты алып, икенсе каналға күсте. Унда ла ауыҙ һыуын ҡоротоп Чечнялағы һуғыш тураһында һөйләйҙәр ине. Байрас өйҙән атылып сығып китте. Вәсилә телевизорҙы ҡайҙан ҡабыҙған көнгә төштө. Әйткәйне бит Миңлеханы, әйткәйне. Ул ниндәй бөткөһөҙ ҡан ҡойош һуң ул!

Байрас тыштан оҙаҡ инмәне. Һикәлтәлә һарай яғындағы ниндәйҙер бер нөктәгә текәлеп тик ултырҙы. Әсә кешенең уны бәпәй һымаҡ күтәреп йөрөткөһө, үпәс иткеһе, бәүетеп йоҡлатҡыһы килде.

- Улым, - тине ул уның эргәһенә урынлашып. - Нимә эшләп ҡарайыҡ икән? Әллә поликлиникаға барайыҡмы? Берәй дарыу бирерҙәр. Былай булмай ҙа баһа. Ни ашай алмайһың... ни йоҡоң юҡ...

Байрастың ҡарашы! Вәсилә телен тешләне.

Кискә һалдаттың класташ егеттәре килде. Улар менән күрешкәндә Байрастың ҡырыҫ йөҙөнә йылмайыу ғәләмәте сыҡты. "Бөгөн йыйылышабыҙ", - тигәстәр, Вәсилә ҡаршылашманы, улын тыныс күңел менән ебәрҙе. "Тартыуын тарта, араҡы эсмәй, теге мәл мәжлестән дә айыҡ ҡайтты", тип уйланы.

* * *

Миңлехан менән Вәсилә керпек ҡаҡмай Байрасты көттө. Төн уртаһы еткәс, ҡултыҡлашып, ипләп кенә (йәнәһе - прогулкаға сыҡҡандар) клуб яғына юлландылар. Йәштәр тауышына ҡолаҡ һалып, әҙерәк тора бирәләр ҙә ары китәләр. Урамдан ауыл осонаса барып, һыу буйынан ҡайттылар. Егеттәр өйөлөшөп яр башында гәп һата торған, тигәйнеләр ҙә, һағалауҙары юҡҡа булды. Исмаһам, йөрөгән ҡыҙы ла юҡ бит әле, тип уйланы Вәсилә, әсенеп. Миңлехан да шулай тип уйлағандыр, күрәһең, ҡатынының беләген тәненә нығыраҡ ҡыҫты.

Ҡайтып, йоҡлап ҡына киткәйнеләр, нимәлер дөбөр-шатыр иткәнгә тертләп уянды улар. Иптәштәре Байрасты һөйрәп тигәндәй индереп, зал диванына һалдылар.

- Нимә эшләттегеҙ баламды? - тине Вәсилә, аптырап.

- Апай, ҡурҡма. Эсмәйем, тигәс, ҡымыҙға араҡы ҡушҡандар.

- Эй, Хоҙайым...

Әрләнеүҙән ҡурҡҡан егеттәр ялп итеп ҡалды.

Вәсилә улының аяғындағын сисергә булғайны, осора тибеләә яҙҙы, ярай әле ялтанып өлгөрҙө. Шуны күргән Миңлехан Байрастың битенә сабып ебәрерҙәй булды, саҡ тыйылып ҡалды. Аптырашып, арҡыс-торҡос ятҡан балаға ҡарап оҙаҡ торҙо улар. Ҡапыл Байрас үкереп ебәрҙе. Уң ҡулы менән иҙәнде һәрмәне, ауып төштө. Һаташып, һикереп торорға итте. Булмаған автоматын тоҫҡап, бушлыҡҡа ата башланы. Вәсилә йүгереп барып утты яндырҙы. Байрас тынысланманы, киреһенсә, яҡтылыҡтан ҡото осоп, өҫтәл аҫтына боҫто, башын баҫып, туңҡайып ятты. Шунан ҡапыл тәгәрәп сығып, йән көсөнә:

- Танк! Унда яналар! - тип ҡысҡырҙы. - Һыу! Беҙҙекеләр яна! Һыу! Һыу!

Миңлехан түрбашҡа йүгерҙе. Ул килтергән тулы биҙрәне тартып алып, Вәсилә Байрастың өҫтөнә һипте.

...Таңға ҡарай егет тынысланғандай булды. Айный ҙа башлағандыр инде. Тышта һыуыҡ һыу менән йыуынып килде. Хәҙер инде үҙҙәре лә шәүләгә оҡшап ҡалған, йонсоу ата-әсәһе ҡаршыһына баҫып, ғәфү үтенде.

- Ярай, була инде, - тигән булды Миңлехан, йылмайырға тырышып.

- Эсмә, бүтән эсмә! - тине әсәһе, бойорған тауыш менән.

- Әсәй, авиация институтына ебәрһәң, Чечняға эләкмәҫ инем, - улының һүҙҙәре Вәсиләнең мейеһен телеп үткәндәй булды.

- Эйе шул, аҡса етмәҫ, тине лә ҡалды! Өйҙө ни һалып бөтөр инек әле! - Миңлехан да нишләптер ҡыйыуланып китте.

- Һин ғәйепле, әсәй, һин!

Балаһының әсенеп әйткән ошо һүҙҙәре әсәнең өҫтөнә туҡмаҡ булып ябырылды. "Һин ҡайтып күҙгә күренгәнсә күпме ыҙалауҙарым! Ҡартайыуҙарым! Ут йотоуҙарым! Йөрәгем бөттө. Нервым бөттө. Һаулығым бөттө. Ә һин мине ғәйепләйһең!" - тип ҡысҡырғыһы килде әсәнең. Тик өнһөҙ ҡалды. Баланы ҡыҙҙырырға ярамай. Әйтһен әйҙә, үҙенә шулай еңел булһа. Әйтһен. Әсә йөрәге түҙә ул. Түҙә. Бала хаҡына. Бала йөрәге генә һаҡланһын.

Байрас көн буйы түшәктә ауналы. Тәмәке тартып инә лә, ята. Ашамай. Бер туҡтауһыҙ һыу эсә. Ә Вәсиләнең йөрәге яна. "Ул ғәйепле, имеш. Кем ғәйепле һуң? Кем? Күпме әсә ошо мәғәнәһеҙ һуғышта ғәзиз балаһын юғалтты. Афғандан алған яра бөтәшеп етмәҫтән, Чечняһы егеттәрҙе һыҙыра башланы. Кем өсөн? Нимә өсөн?" Был көн дә шулай көсөргәнешлектә үтеп китте.

Иртәгәһенә Байрастың кәйефе яҡшы яҡҡа үҙгәргәндәй булды. Магазинға барып, үҙенә тәмәке алды. Кәнфит, печеньеһын да онотмаған. Бесәнде, кеше ҡушып, Миңлехан ослап ҡуйғайны инде. Икәүләп ҡойманың серек бағаналарын алыштырҙылар.

Тығыҙ төйөн йомшарып, сиселә башлаған һымаҡ тойолдо. Улының төҫө асыла барыуына, ашағанын һеңдергәнена, тәненә бер аҙ ит ҡунғанына әсә һөйөнөп бөтә алманы. Зөлфиә һеңлеһененең улы Русланды армияға алғандарын ишеткәс, Миңлехан: "Чечняға ғына алып китмәһәләр ярар ине", - тип хафаланғайны Байрастың һүҙе бер булды: "Уға унда ярамай". Бигерәк шыйыҡ шул ул бала. Уға нисек автомат тотторաһың. Бәхетенән, Руслан Ырымбур өлкәһе Троицк ҡалаһына эләкте. Зөлфиә присягаһына барып, ҡыуанып йөрөп ҡайтты.

Бер нисә көндән почта килде. Гәзитте һелкетеп ҡарарға ғәҙәтләнгән Вәсилә сиҙемгә кәйелеп барып төшкән хатты ҡулына алды. Күгәрсен районы, Мораҡтан. Кинйәбулатов Инсаф. Бәй, Байрас уны үлде тигәйне лә инде! Тере микән һуң ул? Яңылышлыҡ була ҡалһа? Юҡ, мисәттәге датаһы яңы. Аҙна элек һуғылған.

Әсә хатты улына нисек тапшырырға яйын тапмай ҡаңғырып йөрөгәндә ҡапҡа алдына машина килеп туҡтаны. Унан бер ҡыҙ менән егет сыҡты. Вәсилә уларҙы яҡты йөҙ менән ҡаршы алды.

- Һаумыһығыҙ, апай! Мин Инсаф булам! - Вәсиләнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. - Ә был һеңлем. Камилә. Бер үҙемде бер ҡайҙа ла ебәрмәй. Эйәрә лә йөрөй!

Үҙен тиҙ генә ҡулға алған Вәсилә Байрастың балыҡҡа киткәнен әйтеп, йәштәрҙе түргә әйҙәне, йәһәт кенә сәй ҡайнатып ебәрҙе.

- Байрас көткәндер инде мине. Киләм, тип яҙғайным.

- Хатың бая ғына килде шул, балам...

- Эй, замана! Кеше хәҙер хатынан алда йөрөй ҙә ҡуя шул.

- Һин аңғарып, - тине һеңлеһе, ағайына нимәлер иҫкәртеп.

"Ҡалай шаян егет! Әйтерһең, һуғышта ла булмаған. Күңеле лә асыҡ, йөҙө лә яҡты!" - тип уйлаған Вәсилә түрбаштың урамға ҡараған тәҙрәһенән күҙен алманы. "Ана килә", - тип тышҡа ашыҡты. "Байрасты нисек тә иҫкәртергә кәрәк. Тәүҙә хатты бирергә микән?" - шундай уйҙар башында ҡайнаған арала йөрәге түҙмәгән Инсаф та өйҙән атылып сығып, дуҫы ҡаршыһына йүгерҙе. Байрас уны күреп, бер ағарҙы, бер күгәрҙе, унан әкрен генә артҡа сигенде. Камилә осоп барып:

- Инсаф ағайым тере! Тере! Ысынлап тере! Яңылышлыҡ булған! Тере ул, тере! - тип Байрасты ҡосаҡлап алды. Егеттең танауына тәмле хушбуй еҫе бәрелде, ул һаҡ ҡына ҡыҙҙың тығыҙ беләктәрен муйынынан ыҫҡындырҙы ла, яңы тәпәй баҫҡан сабыйҙай сайҡалып, дуҫына ҡарай атланы. "Әлдә ағайы был ҡыҙбикәне алып килгән," - тип уйланы Вәсилә, еңел һулап.

Ҡосаҡлашып, һүҙһеҙ генә оҙаҡ торҙо дуҫтар. Күҙҙәренән сөбөрҙәп йәш аҡты ла аҡты, аҡты ла аҡты.

Табынға ултырғас, Байрас әсәһенән ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына араҡы һораны. Миңлехан ялтыр башты өҫтәлгә елтерәтеп килтереп ултыртып та ҡуйҙы.

- Ғәфү итегеҙ, мин эсмәйем, - тине Инсаф, алдындағы рүмкәне ситкә шылдырып.

- Эсмәгәнгә ғәфү үтенәләрме ни? Бигерәк һәйбәт! Байрас та эсмәй ул. Беҙ ҙә эсмәйбеҙ. - Шешә күҙ асып йомған арала өҫтәлдән юҡ булды.

Тынлыҡ урынлашты. Тәрилкәгә ҡалаҡ бәрелгәне, бер аҙ аш һөрпөлдәткәндәре генә ҡолаҡҡа салынды.

Сәйҙән һуң йәштәр тышҡа сығып, һикәлтәгә ултырҙы. Байрас, күҙен һауаға текләп, тәрән итеп тәмәкеһен һурҙы. Вәсилә менән Миңлехан эскәмйәгә урынлашты. Бер генә лә уландар эргәһенән киткеләре килмәне.

- Нисек булды һуң ул? - Байрас төпһөҙ күҙҙәрен Инсафҡа текәне. - Мин бит торомбаш кәүҙәңде... ҡапсыҡҡа... үҙем тултырғайным... Жетон да... һинеке ине...

- Әсәйем барыбер ышанманы. Күмһәк тә. Барыбер көттө. Төшөм алдамай, тине. - Ҡыҙыҡайҙың тауышы әллә ҡайҙан килгәндәй, тоноҡ ишетелде.

- Тере көйө үҙ ҡәберенде күреүҙән дә ауыры юҡ икән, - Инсаф ауыр көрһөндө. - Минең урынға кем генә ерләнгәндер. Билдәһеҙ.

- Уны ла әсәһе көтәлер инде. - Камиләнең күҙҙәренә йәш эркелде. - Үлгәнен ишеткәнсә, тере икән, тиһәләр ҙә һәйбәт инде.

- Билдәһеҙлектә йәшәү ҙә рәхәт түгел, ҡыҙым... әсә өсөн, - Вәсиләнең ошо һүҙен йөпләп, Миңлехан эйәк ҡаҡты.

- Нисек булды һуң ул? - Байрас икенсе тәмәкеһен ҡабыҙҙы.

- Һөйләүе ауыр, брат... Операцияла, беләһең, ҡамауға эләктек. Боевиктар ҡоралдарҙы алды. Теҙеп ҡуйҙы. Мәсхәрәләй башланы... - Инсаф, уртын сәйнәп, тынып ҡалды. Уны бер кем дә ашыҡтырманы, тыныс ҡына көттө. - Шунан... Иң тәүҙә... Степаны.. Унан... Валераны... Унан... Хөсәйенде... язаланылар... юҡ... һөйләй алмайым...

Байрас шым ғына уға тарта башлаған тәмәкеһен һуҙҙы, Инсаф быны күрмәне.

- Кәнистр менән бензин килтерҙеләр. Үлгәндәрҙе өйә башланылар. Шунан... сират миңә етте...

- Ағай, һөйләмә лә ҡуй. Ҡыйын булһа. Тереһең бит. Шул еткән... - Камилә иплəп кенә Инсафтың арҡаһынан һөйҙө.

- Берәүһе муйынындан жетонды йолҡоп алып ырғытты. Белгән генә доғаларымды уҡый башланым. Аңһат үлем теләп. Тегеләр бер-береһенә ҡарашып алды. Олорағы килеп, нимәлер әйтте. Теле башҡа булһа ла, миңә: "Ҡайт, мосолман. Әсәйең көтә", - тип ишетелде. "Беги!" - тине шунан. Аңһат үлем шулай булалыр. Яҙаламаҫтар, арттан атыр

***✓ Бөтә нәмә рәхмәтле була белеүгә бәйле! Ҡулығыҙҙағы барлыҡ зиннәт-ҡиммәттәр өсөн Юғары Көскә рәхмәт белдереү мөмкинлеген ҡулланығыҙ һәм тормошоғоҙҙо ысын әкиәткә әйләндерегеҙ.***



ҙа ҡуйырҙар, тип йән көсөмә йүгерҙем. Атманылар. Әйләнеп ҡарағанда, ағастар араһынан ҡуйы төтөн күтәрелгәйне...

- Ғүмерең булған, балам. Аллам шуға ҡотҡарған. - Вәсилә "Шулай ҙа инде?" тигәндәй, Миңлеханға ҡарап ҡуйҙы.

- Шулай инде! Ғүмерең бөтһә, тигеҙ ерҙә абынып та йән бирә кеше.

- Мда... - Байрас тәмәке ҡабын асты ла, кире ябып, кеҫәһенә тыҡты. - Мда.

- Йүгерҙем дә йүгерҙем инде. Эләгә-тәгәрәй. Ҡайҙа барғанымды белмәй. Шунан атыш тауыштарын ишеттем. Шунда саптым. Йә теге яҡта, йә был яҡта барыбер беҙҙекеләр булыр, тип. Ҡараһам, танк эҙҙәре. Ҡырҙараҡ - БМП-лар... Минең яҡҡа килгәненең ҡаршыһына сыҡтым. Автомат тоҫҡап, бер һалдат "Кто такой!" тип ҡысҡырҙы. Шул саҡ күҙ алдында ут былҡыны. Ҡалғанын белмәйем. Эргәлә снаряд шартлаған. Ҡаты яраланғанмын. Реанимацияла ятҡанмын... госпиталдә... Бына шулай.

- Шулай икән... - Байрас тағы ла тәмәке тоҡандырҙы.

- Ныҡ ҡыйын миңә... - Инсаф, теше-тешкә теймәй, ҡапыл ҡалтырай башланы. Камилә, кофтаһын сисеп, уның арҡаһына япты. - Степа өсөн, Валера өсөн, Хөсәйен өсөн... рота өсөн... Улар үлде. Мин иҫән.

- Миңә лә ҡыйын. Ныҡ ҡыйын. Бер эҙҙән генә бара инек. Тарлауыҡта. Минаға баҫмаҫҡа. Шартланы шул... егеттәр... алдағылар ҡырылды... ә мин...

Инсаф Байрасты ҡосаҡлап алды.

- Иҫән ҡалдым. - Байрас ошо мәл үкһеп, үкереп иларға тейеш һымаҡ ине. Ләкин ул, тештәрен ҡыҫып, йоҙроғо менән һикәлтәне генә төйҙө.

- Нимәһе ҡыйын уның! Вәсилә апай әйтте лә инде - ғүмерең булған! - Һикәлтәнән һикереп төшөп, ҡаршыларына баҫҡан Камиләнең еҙ сәсенә байып барған ҡояштан ут тоҡанғандай тойолдо. Быны күргән Байрастың йөрәгенә йылы йүгерҙе. Берсә һөйкөмлө, һипкелле ҡыҙға, берсә эргәһендәге тере дуҫына ҡарап, йылмайҙы. Улар бит тере! Тормош дауам итә! Улар бергә! Мәңге бергә!

- Камилә, - тине шунан. - Бер йыр беләһеңме?

- Әәә, Инсаф ағайым әйткәйне шул... Чечняла, ял мәлдәрендә, йырлағанһығыҙ.

- Йырла әле...

- Әйҙә өйгә инеп йырлағыҙ. Ҡыҙыл эңерҙә тышта ултырмағыҙ, - тип Вәсилә менән Миңлехан ғәҙәттәге эштәренә тотоноп китһә лә, йәштәрҙең ҡыбырҙағыһы килмәне. Ошо урындан ҡуҙғалһалар, бер-береһен тағы ла юғалтырҙар кеүек ине.

*Ҡыр ҡаҙҙары илап,*
*ҡыр ҡаҙҙары йырлап*
*Ҡаңғылдашып оса көҙ еткәс,* - тип әкрен генә һуҙҙы Инсаф.

*Ҡыр ҡаҙҙары илап,*
*ҡыр ҡаҙҙары йырлап*
*Ҡаңғылдашып оса көҙ еткәс,* - тип ҡушылды уға Байрас.

*Йөрәк әрнеп ҡала,*
*йөрәк һыҡрап яна*
*Ҡыр ҡаҙҙары кеүек һин киткәс...*

Камилә егеттәрҙең йырына ҡушылманы. Белмәгәнгә түгел. Юҡ, белә ул, көйөн дә, һүҙҙәрен дә. Өндәшмәй генә тыңланы. Күңел төпкөлөнән һыҙылып, һығылып сыҡҡан моң киске ел менән йыраҡҡа-йыраҡҡа осто. Бәлки, Чечняла ятып ҡалған дуҫтары эргәһенәләр?

**(Аҙағы. Башы 33-сө һанда).**

*АТЫҢ КЕМ?*

# РӘССАМДАРҒА ТИҢ ИНДЕ...

## ҡушамат тағыусылар

**Исем хаҡында һүҙ йөрөтөүсе авторҙарыбыҙҙың гәзиттә сыҡҡан һәр төрлө мәҡәләләрен айырыуса диҡҡәт менән уҡып барырға тырышам. Ҡайһы бер гәзиттә "Исемең матур, кемдәр ҡуйған?.." тигән һымағыраҡ рубрикалар ҙа баҫылғылай. Бәғзе берәүҙәр исемдең мәғәнәһенә ҡарап, уның есеменә тап килеү-килмәүе хаҡында фәлсәфәгә лә бирелеүсән.**

Сабыйҙары тыуғас, уның һау-сәләмәт, оҙон ғүмерле, аҡыллы, матур һәм көслө булып үҫеүен һәм, әлбиттә, бай булыуын теләмәгән ата-әсә юҡтыр. Бына шундай теләктәр сағылған һәр төрлө ырым-юрауҙарға нигеҙләнеп барлыҡҡа килгән исемдәр әле булһа халҡыбыҙҙа киң таралған. Өмөрҙаҡ (ғүмере оҙаҡ), Үлмәҫбай, Тимерйән, Арыҫлан, Айһылыу, Көнһылыу, Гүзәл һымаҡ матур-матур исемдәрҙе бөгөн дә балаларыбыҙға бирергә тырышабыҙ. Был исемдәр - барыһы ла яҡшы мәғәнәле. Мәжүсилек заманында балаларҙы шайтан-ендәрҙән исем ярҙамында һаҡлау маҡсатында уйлап сығарылған исемдәр ҙә булғанын, бәлки, күптәр белмәйҙер. Шайтанды баланан ерәндереү йәиһә күҙ тейҙермәү ниәте менән ҡушылған Яманғол, Эталмаҫ, Этйыймаҫ, хатта Һаҫыҡбай, Кәкәй, Буҡбаш тигән исемдәр ҙә тарихта бар. Әле булһа, "шайтанды яҙлыҡтырыу өсөн" балаһына "запас" исем ҡуштырыу осраҡтары бар. Бер имамдың: "...Хатта өсәр-дүртәр мәртәбә исем ҡуштырырға килгән кешеләр бар!.." - тип ғәжәпләнеп һөйләгәнен хәтерләйем. Бәйғәмбәребеҙ, әлбиттә, исемдең матур мәғәнәле булырға тейешлеге хаҡында әйткән, әммә, әҙәм балаһының яҙмышына уның ниндәйҙер тәьҫире булыу-булмауын күҙ уңында тотмаған, сөнки Аллаһы Тәғәлә яҙған яҙмышты һис бер нәмә һәм һис бер кем үҙгәртә алмай. Есемдең бөтөнләйгә исемдән тормағанлығына һәр кемебеҙ шаһит. Аҙ ғына йәшәгән Өмөрҙаҡ, ярлы Баймырҙа, ҡурҡаҡ Батыр, яман Яҡшығол, Ислам диненән күпкә алыҫ булған Динисламдар ҙа булыуы мөмкин.... Исемдең төп тәғәйенләнеше был донъяла әҙәм балаларын береһенән-береһен айырыу. Ә Ахирәттә уларҙың ни өсөн кәрәклеген махсус белемле имамдар яҡшыраҡ итеп аңлатып бирә алыр.

Бөгөнгө һүҙем, башлыса, ҡушаматтар хаҡында. Кешенең исеме уның есеменә тап килмәүе ифрат та нормаль күренеш икәне хаҡында алдараҡ әйтеп үттем. Ә бына ҡушаматтар... Улар тап әҙәм балаһының булмышын ниндәйҙер кимәлдә асыҡлап килеүе мөмкин, тип һанайым. Сөнки күпмелер ғүмер иткән теге йәки был шәхестең ниндәйҙер үҙенә генә хас айырым яҡтары, билдәләре, сифаттары була. Арабыҙҙа аныҡ кешеләге шундай үҙенсәлектәргә иғтибар итеп, уларҙы күрә һалып барыусылар ҙа бар. "Кешегә исем тағырға оҫта", тиҙәр ундайҙарҙы. Рәссам-карикатурасылар ҙа башҡаларҙың йөҙөндә берәй һыҙатты тиҙ генә күреп, шуға баҫым яһап, уларҙың һүрәтен ҡағыҙға төшөрөү менән, "ҡарсыға" йәиһә, киреһенсә, "төймә" танаулы, "ҡарпыш" йә "бесәй ҡолаҡлы" кешеләрҙе шунда уҡ төҫмөрләп алаһың... Моғайын, һәр ауылда "Ҡара Ҡасим", "Сатан Сәлим", "Ҡаты Сәхип", "Ҡылый Яхъя", "Көмөрөй Варис" һымағыраҡ ҡушаматтар барҙыр. Исем тағыусыларҙы ла мин ана шул рәссамдар менән сағыштырам. Шундай кеше берәүҙе ниндәйҙер ҡушамат менән атаны икән, беҙҙең яҡта әйтмешләй, шул исем уға "йәбешә лә ҡуя". Кешенең тышҡы ҡиәфәтенә, йөҙөнә генә түгел, шөғөлөнә, эшенә ҡарап та исем тағалар. Берәй һирәгерәк һөнәрле "Кузнец Хисам", "Почтар Фәхрислам" һымағыраҡ булған бәғзеләҙең ҡушаматы ана шул кәсептәре менән бәйле булыусан.

Хәҙерге ваҡытта ауылдарҙа урыҫса белмәгән кеше юҡтыр. Ә элегерәк, күпмелер ваҡыт ҡалала йөрөп, рус телен өйрәнеп ҡайтҡан "урыҫ Йомабай" һымағыраҡ ҡушаматтар ҙа булған. Беҙҙең ауылда элегерәк бер әбейҙе "бөтәү баш", тип әйтә торғайнылар. Нишләп ундай ҡушамат тағылғаны хаҡында ҡыҙыҡһынғас, әсәйем уның тарихын һөйләп биргәйне. Шул Фәләнбикә әбей йәш сағында килен булып ауылға килгәс, һарыҡ башын ҡаҙанға бөтәүләй (уртаға ярмаған) көйө бешерергә һалған, имеш. Шунан бирле, ғүмере буйы ана шул ҡушамат уны оҙатып барған.

Ауылыбыҙҙа ике йәки унан күберәк булған бер иш исемле кешеләр мотлаҡ ҡушаматлы була торғайны. Ауылдың ҡайһы өлөшөндә йәшәүенә ҡарап, береһенең исеменә "үрге", икенсеһенә "түбәнге", өсөнсөһөнә "арғы", тигән һүҙҙәр ҡушыла. Сәсенең төҫөнә ҡарап, береһе "һары" булһа, икенсеһе "ҡара", йәшенә ҡарап, береһе "оло", икенсеһе "кесе" була торғайны. Бер иш исемле ике ағайҙың холҡона яраҡлы, береһен "Ҡаты Райман", икенсеһен "Йомшаҡ Райман", тип йөрөтһәләр, күрше ауылда ике тракторист ағайҙың береһе "Көрәк Сәлих", икенсеһе - "Һәнәк Сәлих" ине ("Беларусь" тракторҙарына ниндәй нәмә тағып йөрөүҙәренә ҡарап ҡушылған инде уларға былдай ҡушаматтар). Бәғзе малайҙар бер-береһен уларҙың аты йәиһә Аҡбай, Кетмер, Һарығолаҡ һымағыраҡ, эттәренең исеме менән дә атай торғайны.

Иң ҡыҙығы - бәғзеләр ана шул ҡушамат исеменә ризалашып, хатта уға өйрәнеп тә китә. Элегерәк бер улым үҙенең дуҫын "Кот" тип йөрөтә торғайны. Беҙгә килеп ишек шаҡыһа, "Кем унда?" тигән һорауға: "Был - мин, Кот", - тип яуап бирә ине был малай. Ә ҡайһы берәүҙәр ҡушамат исемен оҡшатмай торғайны. Мине, мәҫәлән, бәләкәй саҡта ни өсөндөр "Сулаҡ" тип атанылар. Бәләкәй сағымда ике мәртәбә ҡулымды һындырып, гипста йөрөгән инем, әллә шуға, әллә һулаҡай булғаным өсөндөр... Әммә мин ошо ҡушаматты кемдәндер ишетеү менән шунда уҡ һуғыша башлай торғайным. Оҡшаманы миңә ул.

Ҡушаматтар шәриғәт тарафынан рөхсәт ителәме-юҡмы, унығын белмәйем. Был хаҡта дин белгестәре менән кәңәшләшеү кәрәктер. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе яҡташтары "Әмин" тип тә атап йөрөткән, "ышанымлы", тимәк. Бынан тыш, уны "Хәлил" тип тә йөрөткәндәр. "Ысын дуҫ" тигәнде аңлата был һүҙ. Шуға күрә лә, яҡшы ҡушаматтарҙың бер ниндәй ҙә насарлығы юҡтыр, тип һанайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Нурлы кеше үҙ артынан нур ҡалдыра. Әйтәйек, машина тәҙрәһенән юлда шешә ырғытып китмәйбеҙ; тәбиғәттә ял иткәндән һуң унда сүп-сар ҡалдырмайбыҙ; автобустан йәки трамвайҙан төшкәс, билеттарҙы аяҡ аҫтына ырғытмайбыҙ һәм башҡалар. Эйе, беҙ нәҡ шундайбыҙ, үҙебеҙҙе ныҡ ихтирам итәбеҙ һәм тәғәйенләнешебеҙгә бик етди ҡарайбыҙ.**

Был фани донъяла бирелгән ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙ эсендә бөтә кешелекте үҙгәртә алмаһаҡ та, үҙебеҙҙе үҙгәртеп, беҙ барыбер бөтә Йыһан үҫешенә ярҙам итәбеҙ. Бер юлы бөтә кешелек тураһында хәстәрләргә ынтылыуҙың кәрәге юҡ, ә бына ярҙамға мохтаж күрше әбейгә магазиндан аҙыҡ-түлек алып килеп бирергә йәки өйөбөҙ ишегенән килеп ингән кешегә бер сынаяҡ йылы һыу тәҡдим итергә һәр кемебеҙҙең дә ҡулынан килә бит. Сит ил авиакомпаниялары самолеттарында "Үҙегеҙҙән һуң бында инәсәк пассажир тураһында ҡайғыртып, зинһар, раковинаны ҡағыҙ таҫтамал менән һөртөп сыҡ!" тигән таҡта эленеп тора. Ысынлап та, һөртәләр! Эйе, быны башҡарыуы бер ҙә ауыр түгел.

Әгәр ҙә башҡаларҙың именлеге тураһында хәстәрләп, әҙерәк кенә көс-тырышлыҡ һалһаҡ, ул сағында үҙебеҙҙең дә тормош байыраҡ та, йәмлерәк тә буласаҡ. Әгәр кеше ниндәйҙер ғәйебен юйыр өсөн генә башҡарып ярҙам итергә тырышһа, былдай мәрхәмәттең эҙемтәһе сир булып киләсәк. Мәҫәлән, балаһы тураһында артыҡ ныҡ хәстәрләгән йәки ирен артыҡ ныҡ ҡурсалаған ҡатындарҙа түштәренә бәйле проблема килеп сыға. Әгәр ҙә инде башҡаларға ысын күңелдән, эскерһеҙ, шатланып, яратып мәрхәмәтлек күрһәтһәң, ул үҙеңә артығы менән кире ҡайтасаҡ! Ярҙам күрһәткәндә рәхмәте тураһында уйламағыҙ. Ҡулығыҙҙан килгән һәм унан да күберәк миһырбанлыҡты башҡарып, булған һәм буласаҡ именлеккә шөкөр ҡылығыҙ, һәм шул саҡ бөтә Йыһан менән бергә тантана итерһегеҙ. Шул саҡ һәр ҡошсоҡ уңыш тураһында хәбәр килтереүсегә әйләнәсәк, һәр күбәләк фәрештә йылмайыуы бүләк итәсәк, ә япраҡ ҡыштырҙауы һәм иҫкән ел күҙгә күренмәгән, әммә ҡөҙрәтле донъяның ауазын ишеттерер. Уның исеме - Тормош.

♦Иң ябай һәм һәр кемгә аңлашылған тел - рәхмәт доғаһы.

♦Тормоштоң бәләкәй генә шатлыҡтары өсөн дә рәхмәтеңде белдер, һәм ул рәхмәттәр гөрләп сәскә атыр.

♦Өҫтәл артына ултырғас, көндәлек ризығың өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм ризыҡ һиңә файҙа бирер.

♦Сәләмәтлегең өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм сәләмәтлегең артыр.

♦Сир-сырхауҙарың өсөн рәхмәтеңде белдер, сөнки улар организмың тураһында ниҙер белгертә.

♦Ямғыр һәм йәйғор мөғжизәһе өсөн рәхмәтле бул, һәм матурлыҡ һине һәр ерҙә оҙатып йөрөр.

♦Мөхәббәт өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм мөхәббәт һәр ваҡыт һинең менән булыр.

♦Муллыҡ-байлыҡ өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм Йыһан мөмкинлектәренең һәм байлыҡтарының һинең алда асыла барыуына таң ҡалырһың.

Күргән-ишеткәндәребеҙҙе рәхмәт менән ҡабул итә башлайбыҙ икән, ул сағында күҙебеҙ алдынан ниндәйҙер пәрҙә төшкән кеүек булыр, һәм донъялағы нурҙар тағы ла сағыуыраҡ күренер. Сөнки бөтә нәмә рәхмәтле була белеүгә бәйле! Ҡулығыҙҙағы барлыҡ зиннәт-ҡиммәттәр өсөн Юғары Көскә рәхмәт белдереү мөмкинлеген ҡулланығыҙ һәм тормошоғоҙҙо ысын әкиәткә әйләндерегеҙ. Үҙегеҙҙекен генә түгел, ә башҡаларҙыҡын да.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒӘЙБӘТТӘН...

## һимерәләр

■ Гарвард университетының бер төркөм ғалимдары кешенең туҡланыуы уның сәләмәтлегенә, шул иҫәптән йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына йоғонто яһауын дәлилләнгән тикшенереүҙәр үткәрҙе. Дөрөҫ туҡланһаң, ҡанда насар холестеринды кәметеүсе дарыуҙар ҡабул итеү кәрәкмәй. Оҙағыраҡ йәш ҡалырға һәм үҙен яҡшы тойорға теләүселәргә белгестәр май, шул иҫәптән үҫемлек майы һәм шәкәр аҙ күләмдә булған ризыҡтар һайларға кәңәш итә. Ҡанда насар холестерин күбәйгәндә атеросклероз үҫешә, ул инфаркт йәки инсульт, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сиренә килтерә.

■ Кешенең нисек атлап йөрөүе уның "эске донъяһы" тураһында ла "һөйләй". Портсмут университеты ғалимдары 29 кешенең психоэмоциональ портретын тикшереп ҡараған һәм һуңынан уларҙың барыһын да атлатып ҡараған. Тәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөнә махсус датчиктар беркетелгән. Уларҙы тикшереп ҡарағандан һуң, шул асыҡланған: агрессив кешеләр ҡулдарын һелтәп, көҙәһенеҥ һелкетеп атлай икән.

■ Киҫкен респираторлы вирусы инфекция эләктереү хәүефе кешенең физик әүҙемлеге арткан һайын кәмей бара. Дания ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, был бактериаль инфекцияларға ла ҡағыла. Ғалимдар 3 йыл дауамында 18 мең кешенең йәшәү рәүешен тикшергән. Хатта түбән физик әүҙемлек тә бөтөнләй хәрәкәтһеҙ йәшәүгә ҡарағанда бактериаль инфекция эләктереү ҡурҡынысын 10 процентҡа кәметә. Был бигерәк тә гүзәл затҡа ҡағыла.

■ Майами университеты хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бәктиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Быйдай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Һайлау кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, түйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тиңләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - ти профессор Джулиано Ларан.

■ Һомғол буйлы булыуығыҙ менән ғорурланаһығыҙ һәм шуға ла үҙегеҙҙе сәләмәт тип уйлайһығыҙмы? Ғалимдар раҫлауынса, һомғол буй һаулыҡ күрһәткесе була алмай. Һуңғы ваҡытта артыҡ ауырлыҡ менән яфаланмаған кешеләрҙә лә диабет сире йыш осрай икән. Белгестәр әйтеүенсә, ябыҡ дүрт кешенең берәүһе диабет сире һәм метаболик һимереү алдында тора. Метаболик һимереү мәлендә кешенең май массаһы уның мускул массаһына ҡарағанда күберәк була. Быйдай кешеләр ябыҡ, ләкин яҡшы формала түгел, быының төп сәбәбе булып дөрөҫ туҡланмау тора.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Донъяла бөтә нәмәнең башланғысы бар: бейек тауҙар ваҡ таштарҙан, оло йылғалар кескәй инештәрҙән, бөйөк эштәр бер кешенең уйниәтен күтәреп алған фекерҙәштәр берҙәмлегенән тора. Шундай дөйөм эш өсөн янып-көйөп йөрөүселәр, үҙ халҡының боронғо гөрөф-ғәҙәттәренә битараф булмаусылар дүртенсе тапҡыр үткәрелгән "Мәргән уҡсы" традицион яндан атыу буйынса халыҡ-ара фестивалгә йыйылды. Ғафури районында урынлашҡан Уҡлы ҡая буйындағы ярышта Ҡаҙағстан, Литва, Беларусь республикалары, Төркиәнән һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йөҙгә яҡын уғатар ҡатнашты.**

# УҒАТАРҘАР...

## Ғафуриҙа бәйге ойошторҙо

"Мәргән уҡсы" фестивале башҡорт милли мөхитен булдырған сараларҙың береһе булыуы менән күптән билдәлелек яулаған. Уғатарҙарҙың сәмле ярышына халыҡ сағыу күренештәр артынан ғына түгел, милли уҙаны кешеләр менән аралашыу маҡсаты менән дә килә. Шуға, ойоштороусылар быйыл махсус түңәрәк ҡорҙа фекер уртаҡлашыу мөмкинлеген бирҙе. Фестивалдең "Һыбай уҡ атыу" һәм "Мәргән уҡсы" турнирҙары үткәндән һуң, уғатарҙар үҙҙәрен борсоған һорауҙар, хәл ителәһе мәсьәләләр һәм кәңәштәре менән уртаҡлашты. Унда Республика халыҡ ижады үҙәгенең әйҙәүсе белгесе һәм фестивалдең төп ойоштороусыһы Юлай Ғәлиуллин, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәис Низаметдинов, Учалы районынан крайҙы өйрәнеүсе Фәнүр Шаһиев, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Искәндәр Юлдашев, Калининград ҡалаһынан традицион яндан атыу буйынса донъя чемпионы Дмитрий Алексеенко, Дағстандың "Шелковый путь" яндан атыу буйынса федерация президенты Джанболат Махтибеков, Литванан традицион яндан атыу буйынса донъя чемпионы Ирмантас Вишниаускас, Ғафури районы хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов сығыш яһаны. "Элек батырҙарҙы һабантуйҙар, йыйындар ваҡытында бәйгеләрҙә һынағандар, билдәләгәндәр. Бөгөн беҙҙә ир-егеттәр тәрбиәләүсе ошондай институт юҡ, көслө заттың абруйы ла кәмене. Беҙҙең алда бына шундай институт төҙөү бурысы тора", - тип башланы һүҙен "Мәргән уҡсы" хәрәкәте етәксеһе Юлай Ғәлиуллин. Быының өсөн республикала этноспорт буйынса айырым федерация булдырыу мөһим, тип билдәләне ул. Был башҡорт халҡының боронғо уйын, ярыш төрҙәрен һаҡлауға һәм тергеҙеүгә булышлыҡ итәсәк. Әйткәндәй, быйдай федерациялар күп кенә сит илдәрҙә бар, Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә лә уңышлы эшләп килә. Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина әйтеүенсә, Алтай Республикаһында яндан атыу шөғөлөнә былтыр ғына ҡыҙыҡһыныу тыуған, әммә улар бер йыл эсендә рәсми берләшмә ойоштороп та ҡуйған. Дағстан Республикаһында "Шелковый путь" яндан атыу буйынса федерация, Ат спорты федерацияһы бар. "Беҙҙә был ике федерация айырым эшләй, шуға Башҡортостандың һыбай уҡ атыу буйынса ярыштар үткәреү тәжрибәһен күреүе бик ҡыҙыҡлы булды, - тине федерация президенты Джанболат Махтибеков.- Дағстанда ярыштарҙа даими ҡатнашҡан уҡсылар һаны 300 тирәһе, ә бына улар араһында һыбай йөрөй белеүселәр, ҡыҙғаныҫҡа күрә, бик аҙ, ни бары 5 кеше. Ошо күрһәткесте ике йыл эсендә иллегә еткерербеҙ, тип тырышабыҙ. Беҙҙең уғатарҙар төрлө яндар ҡуллана, техникалар ҙа төрлө, үҙебеҙ уйлап тапҡан дисциплиналар ҙа етерлек. Мәҫәлән, 2012 йылдан сноубордта йөрөй белгәндәр өсөн бер дисциплина уйлап таптыҡ: трасса буйлап сәптәр ҡуйып сығабыҙ, тауҙан шыуып төшөп барышлай шуларға атып тейҙерергә кәрәк. Мәргәнлеген күрһәтергә теләүселәр өсөн башҡа төрлө акробатик ярыш төрҙәре лә бар".

Башҡортостанда этноспортты үҫтереү йәш быуынды тәрбиәләүгә лә ыңғай йоғонто яһар, тигән фекерҙә булды ҡорҙа ҡатнашыусылар. Быының өсөн яндан уҡ атыуға ҡыҙыҡһыныуҙары булған балаларға мәктәптәрҙә шөғөлләнергә шарттар булдырыу мәсьәләһе ҡаралырға тейеш. "Мәргән уҡсы" хәрәкәтенең иң актив ағзаларының береһе Рәис Низаметдинов хәбәр итеүенсә, Учалы ҡалаһының бер гимназияһында яндан атыу буйынса дәрес индерелгән, һәр уҡыусы йылына 8 сәғәт шөғөлләнергә тейеш. Сибай ҡалаһында әлеге көндә түңәрәк эшләп килә, унда ҡырҡ бала йөрөй. Киләсәктә был эште өҫтәмә белем биреү сиктәрендә ойоштороу, тренерҙарға эш хаҡы түләү мәсьәләләрен дә ҡарау кәрәк буласаҡ. Халҡының тарихын, рухи ҡиммәттәрен, ғәҙәттәрен өйрәнергә булышлыҡ иткән шөғөл балала илһөйәрлек, батырлыҡ һәм физик сәләмәтлек тә тәрбиәләй. Шуға күрә, этноспорт федерацияһы яндан уҡ атыу йүнәлешендә генә түгел, республикала һунар ҡоштарын үрсетеү һәм тәрбиәләү, ат өҫтөндә оҫта йөрөү, милли спорт һәм уйындарға күнектерелгән йылҡы малын үрсетеү йәһәтендә лә эшләргә бурыслы. "Әле йылҡысылыҡ ит һәм ҡымыҙ етештереү сиктәрендә генә үҫешкән, беҙгә төрлө уйын-ярыштарҙа ҡатнашыуға күнеккән аттар тәрбиәләүгә айырым иғтибар бүлергә кәрәк. Мәҫәлән, Ҡаҙағстанда атлыларҙың 47 төр уйыны бар, беҙҙә ни бары 9 тирәһе генә һаҡланып ҡалған. Республиканың министрлыҡтары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, йәмәғәт ойошмалары менән берлектә этноспортты үҫтереү буйынса бергә эшләргә тейешбеҙ", - тине был турала Юлай Ғәлиуллин. Ул "Бөтә донъя күскенселәр уйындары" үткәреү сараты берәй ваҡыт Рәсәйгә килеп етеүенә әҙерлек тураһында онотмаҫҡа саҡырҙы.

- Мин һеҙҙең халыҡҡа шундай яҡты көнләшеү менән ҡарайым, сөнки яндан уҡ атыу һәм һыбай уҡ атыу һеҙҙең ҡанығыҙҙа. Хатта һеҙ иҫләмәһәгеҙ ҙә, һуңғыраҡ быуын вәкилдәре шөғөлләнмәгән булһа ла - ул һеҙҙә бар. Беҙҙең кеүек Робин Гуд, капитан Тенкеш, Тадас Блинда тураһында фильмдар ҡарап хыялланыу һәм үҙендә шул осорҙа тойоп ҡарау һеҙгә кәрәкмәй. Сөнки был - һеҙҙеке", - тигәйне түңәрәк ҡорҙа ҡатнашҡан Литваның Вильнюс ҡалаһынан Ирмантас Вишниаускас. Шуға "Мәргән уҡсы" традицион яндан атыу буйынса халыҡ-ара фестивалендә ҡабул ителгән ҡарарҙар тик хыялдарҙа ғына ҡалмаҫ, тип ышанғы килә.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ғафури районы хакимиәте башлығы призы өсөн "Һыбай уҡ атыу" ярышында Өфөнән Рушан Хәсәнов беренселекте яуланы. Икенсе һәм өсөнсө урындарға шулай уҡ Өфөнән Юлай Ғәлиуллин менән Денис Өмөтбаев сыҡты. "Мәргән уҡсы" республика турнирында ир-егеттәр араһында Бөрйән районынан Салауат Юлбирҙин - беренсе, уның улы Дим Юлбирҙин - икенсе, Учалы ҡалаһынан Руслан Әхмәҙиев өсөнсө урын алды. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында I урынға Бөрйәндән Әлиә Ишморатова, II урынға Ғафуриҙан Гүҙәл Ибәтуллина, III урынға Әбйәлилдән Гүҙәлиә Хәлилова лайыҡ булды. "Евразия кубогы" турнирында Бөрйәндән Салауат һәм Сынбулат Юлбирҙиндар, Омск ҡалаһынан Даниил Вяткин еңеүселәр исемлегенә инде.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ЕҢЕЛ БЫУ МЕНӘН,

## йәки мунса йыуыныу өсөн генәме?

**Мунса борон-борондан йыуыныу ғына түгел, ә тотош бер йола башҡарыла торған ер булған. Әле лә бында күптәр йыуынырға ғына түгел, ә ял итергә йөрөй. Мунса - ул тән һәм йән таҙарына торған изге урын, тип әйтһәк тә яңылышмаҫбыҙ, моғайын. Мунса арыуҙы ла, һағышты йыуып төшөрә. Иң мөһиме, мунса ингәндә ҡабаланмаҫҡа һәм кәрәгенсә тынысланып, тәнде йомшартып, проблемаларыңды онотоп торорға кәрәк. Шулай итмәһәң, уның файҙаһы булмаясаҡ.**

Мунсала тән температураһы 38-39 градусҡа тиклем күтәрелә, һеҙөмтәлә әселәндереү процесы, матдәләр алышыныу көсәйә. Күпләп тир бүленеп сығыуы организмды шлактарҙан таҙарта, бөйөр эшмәкәрлеген еңеләйтә. Юғары температура йоғонтоһонда тире капиллярҙары ҡан менән тула, был эске ағзаларҙа ҡан йөрөшө тығынын булдырмай һәм ҡан әйләнеше яҡшыра.

Ҡайһы бер немец табиптары мунсаға йөрөгән ауырлы ҡатындар балаһын еңелерәк һәм тиҙерәк таба, тип иҫәпләй. Бала имеҙеүсе ҡатындарҙың 80 проценты һөт барлыҡҡа килеүенә мунса ыңғай йоғонто яһай икәнлеген таный.

**Ыңғай һөҙөмтә алыу өсөн төп мунса ҡағиҙәләрен иҫтә тотоу мөһим.**

- Тулы ашҡаҙан менән мунсаға барма. Ас барыу ҙа кәңәш ителмәй, мунса алдынан еңелсә генә ҡапҡылап ал.
- Мунсаға ингәс тә, һабынһыҙ ғына йылы һыу менән тәнеңде йыу ҙа, таҫтамал менән ҡорот. Был яҡшыраҡ тирләргә мөмкинлек бирәсәк. Баш тиреһен яныуҙан һаҡлау өсөн, башыңа башлыҡ кейергә онотма.
- Тән эҫегә яйлап күнегергә тейеш. Шуға ла эләүкәгә менер алдынан 5 минут тирәһе аҫта ултырып тор.
- Эләүкәлә иң дөрөҫ торош: горизонталь, сөнки был саҡта быу тән буйлап тигеҙ тарала, мускулдар яҡшы йомшара.

Мунсала иң мөһиме - быу, ул һауаны зарарһыҙландыра. Быу файҙалы ла булһын тиһәгеҙ, ҡыҙған таштарға ябай һыу урынына төрлө үләндәр йәки шыршы энәләре төнәтмәһе һибегеҙ. Таштарға кеүеҫ һипһәгеҙ, мунсаға яңы бешкән икмәктең ҡабатланмаҫ еҫе таралыр. Быу еңел һәм йомшаҡ булһын өсөн ҡайнар һыуҙы ташҡа аҙләп кенә һибегеҙ. Һыуыҡ һыуҙан быу ауырая һәм еүешләнә, тын алыуы ауырлаша.

Мунсала махсус тын алыу күнекмәләре яһарға мөмкин. Мунсаға ингәс тә, ауыҙ аша тәрән итеп тын ал һәм танау аша сығар. Икенсе тынды танау аша алып, танау аша сығарырға. Һуңынан шалфей (йылан тамыры) менән кейәү үләнен ҡушып яһалған үлән төнәтмәһенә башыңды эйеп, танау аша яй ғына тәрән тын ал. Тынды 2-3 секундҡа эстә тотоп, турайырға һәм танау аша сығарырға. Был күнегеүҙе тынды 8 секундҡа тиклем тотоп тора алырлыҡ итеп ҡабатларға. Бынан тыш, аптеканан эвкалипт, бөтнөк (мята), аҡ сәскә, һары мәтрүшкәнең эфир, йәиһә спиртлы төнәтмәләрен һатып алып, аҙ ғына ташҡа һибергә була. Улар микробтарҙы үлтерә, мунсаға хуш еҫ тарата.

Мунса ярҙамында ябығырға ла мөмкин, тик уның өсөн бер тапҡыр ғына мунса инеү етмәй, ябығам тиһәң, мунсаға даими йөрөргә кәрәк. Был маҡсатта саунаның ҡоро быуы яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә, сөнки организмды эҫенән һаҡлайым, тип, май тулыһынса янып бөтә. Целлюлиттан һәм шлактарҙан ҡотолоу өсөн мунсала ҡурай елөгә төнәтмәһе эҫергә мөмкин. Бының өсөн 2 аш ҡалағы кипкән ҡурай еләген 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15-20 минут торорға. Файҙаһы ныҡыраҡ тейһен өсөн, төнәтмәне ҡурай еләге менән бергә ҡушып эҫергә. Тик онотмағыҙ, бөйөрҙәре ауыртҡандарға быны эшләргә ярамай.

Мунсаны миндекһеҙ күҙ алдына килтереп булмай. Ҡағиҙә буларак, күптәр ҡайын, йәиһә имән миндек ҡуллана. Ҡайын миндеге мускулдар һәм быуындар һыҙлауын баҫа, тиреме төрлө сабыртмаларҙан таҙарта, яраларҙы бөтөштерә, кәйефте күтәрә. Уны ҡулланғанда үпкәләрҙә һауа алышыныуы һәйбәтәйә.

Имән миндеге майлы тирене таҙарта, артериаль баҫымдың күтәрелеүенә юл ҡуймай, нервы көсөргәнешенән арындыра.

Йүкә миндеген һыуыҡ тейгәндә ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә, баш ауыртыуы баҫыла, тән температураһы төшә, ул бөйөрҙәр эшмәкәрлеген дә яҡшырта.

Аҡ шыршы (пихта) һәм артыш миндеге һауаны таҙарта, ларингит, бронхит, гриптан ҡотҡара. Был үҫемлектәр бүлеп сығарған ыҫмалалы матдә мускулдарҙа ҡан әйләнешен яҡшырта, невроз, невралгик ауыртыу һәм радикулиттан ярҙам итә.

Кесерткән миндеген дә ҡулланып ҡарағыҙ, ул бигерәк тә ревматизм ваҡытында файҙалы. Ҡайын миндегенә ҡушып бәйләнгән кесерткән тәнде рәхәт итеп семеттерә, тән шунда уҡ ҡыҙарып сыға.

Быуындары һыҙлағандарға әрем миндеге тәҡдим итергә була, етмәһә, ул артыҡ майҙы кәметеү һәләтенә эйә. Миндек өсөн әремде сәскә атҡас та, һабағы ҡатмаҫ элек июль-август айҙарында әҙерләү яҡшы.

Бөтә был төр миндектәр менән сабынғандан һуң, тәнөн яҡшы йоҡлаһығыҙ. Әгәр мунсаны иртән инәһегеҙ икән, үҫегеҙ менән миләш япраҡтары һәм гөлбаҙран (пижма) үләнен ҡушып эшләнгән миндек алығыҙ. Ул нервылар системаһын ҡуҙғыта, көнө буйы яҡшы кәйефтә йөрөрһөгөҙ.

Әгәр ҙә миндек яңы әҙерләнгән икән, уны һыуҙа сайҡап алыу ҙа етә. Ә кипкән миндекте тәүҙә йылымыс һыуҙа 20 минут тирәһе тотоп, һуңынан ғына ҡайнар һыу өҫтәргә ярай.

Мунсала дөрөҫ сабыныу ҙа бик мөһим. Иң тәүҙә еңел, һалмаҡ хәрәкәт менән аяҡ табаны, аяҡтар, оса, арҡа һәм ҡулдарҙан өҫтән аҫҡа һәм аҫтан өҫкә ҡарай бер нисә тапҡыр үтергә. Бынан һуң, лимфатик төйөндәр урынлашҡан тубыҡ аҫтындағы соҡор, сат өлкәһен һәм ҡултыҡ аҫты соҡорона теймәй генә миндек менән тәнде сабырға. Иң һуңынан, миндек менән ҡул, бил, тубыҡ һәм аяҡ табандарына баҫып торорға. Быңдай массаж ҡан әйләнешен көсәйтә, күҙәнәктәрҙе аса һәм һөҙөмтәлә тәндән тир, шлактар күберәк сыға.

Мунсала тәнгә төрлө битлектәр эшләү иҫ киткес һөҙөмтә бирә. Бит өсөн 1 балғалаҡ балға ҡоро тирелеләр өсөн йомортҡаның ағын, ә майлы тиреләр өсөн һарыһын ҡушып болғатырға. 2 ҡалаҡ һуған һутына 1 ҡалаҡ бал ҡушып әҙерләнгән ҡатнашма сәстәрҙе нығыта.

Мунса менән дөрөҫ ҡулланғанда ғына ул кәйефте күтәрә, тәнде сафландыра, хәл-торош күпкә яҡшыра, эшкә һәләтлелек арта. Унда кәрәгенән артыҡ булыу, киреһенсә, һеҙҙе хәлһеҙләндерә, баш ауыртыуы һәм насар кәйеф барлыҡҡа килә. Мунсаға йыш йөрөргә ярамай, 7-10 көнгә бер тапҡыр барһаң, шул етә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Әгәр аяҡтарығыҙға һәм ҡорһаҡ пресына көсөргәнеште арттырырға теләһәгеҙ, аяҡтарығыҙ менән бер үк ваҡытта түңәрәк хәрәкәте эшләргә мөмкин. Улар тура һәм табандар иҙәндән айырылырға тейеш. Был осраҡта, ултырған булһағыҙ, ике ҡуллап ултырғысҡа, ятһағыҙ, урындыҡтың ситенә тотонорға кәрәк. "Аяҡ остары" һәм "Аяҡ суғы менән түңәрәктәр яһау" күнегеүҙәрен аяҡ остарында ҡан әйләнеше боҙолғанда (аяҡ тамырҙарында варикоз барлыҡҡа килгәндә), артроз, артрит, шәкәр сире, төрлө йәрәхәттәр булғанда, аяҡтарҙағы тамырҙарға операция яһалғандан һуң иртә осорҙа эшләргә кәрәк. Бигерәк тә был ике күнегеү оло йәштәгеләр өсөн мөһим. Шулай уҡ был күнегеүҙәр аяҡтарҙа төрлө оро булғанда, "шпора"лар интектергәндә, табандарҙың деформацияһы ваҡытында, быуындар ауыртҡанда һәм яҫы табанлылыҡ булғанда ярҙам итә.

### "Маймыл"

Ултырғысҡа ултырабыҙ. Ҡулдар күкрәк тәңгәлендә, устар алға ҡаратып ҡуйылған, терһәктәр төшкән. Аяҡтар алға һуҙылған, саҡ ҡына тубыҡтан бөгөлгән, табандар иҙәнгә тейеп тора. Икенсе вариант: арҡала ятабыҙ, ҡулдар терһәктән тура мөйөш яһап бөгөлгән, аяҡтар бер аҙ айырылған.

"Бер" тигәндә тын алабыҙ, бер үк ваҡытта устарҙы һәм аяҡ бармаҡтарын ныҡ итеп йомарлайбыҙ. Шунан һуң тиҙ генә йоҙроҡтарҙы, аяҡ бармаҡтарын яҙабыҙ - танау йәки ауыҙ аша тәбиғи рәүештә тынды сығарабыҙ. "Ике" тигәндә тағы ла тын алабыҙ һәм бер үк ваҡытта устарҙы һәм аяҡ бармаҡтарын йомарлайбыҙ. Артабан тынды сығарған ыңғайы бармаҡтарҙы яҙабыҙ. Күнегеү тәбиғи рәүештә башҡарылырға тейеш: тынды эстә тотмайбыҙ, көсләп сығармайбыҙ. Һулышты әүҙем итеп алабыҙ, үҙ яйына ғына сығарабыҙ. Юҡһа, ул гимнастика булмаясаҡ һәм дауалау һөҙөмтәһен бирмәйәсәк. Күнегеүҙе 8 тапҡыр ҡабатлағас, 3-5 секунд ял итегеҙ һәм тағы ла шаулы итеп тын алып 8 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Норма өсөн 12 тапҡыр 8 тын алыу-тын сығарыуҙы (бер үк ваҡытта устарҙы һәм аяҡ бармаҡтарын йомарлап) ҡабатларға кәрәк. Ныҡлап күнегеп алғас, ялһыҙ 16 йәки 32 тын-алыу-тын сығарыу хәрәкәтен эшләргә мөмкин. Был күнегеү теләһә ниндәй, хатта иң ауыр операция үткәргән кешеләргә лә ныҡ ярҙам итә. Бынан тыш, ул инсульттан, мейеләгә ҡан әйләнеше боҙолоу һөҙөмтәһендә тәндәренең бер өлөшө фалиж һуғыуҙан хәрәкәтһеҙ ҡалған сирлеләргә яҡшы реабилитация сараһы булып тора. Был осраҡта ҡыҫҡа һәм шаулы итеп тын алғанда хәрәкәтләнгән ҡул йәки аяҡ бармаҡтарын йомарларға һәм хәрәкәтһеҙ яҡтың аяҡ-ҡулы менән нимәнелер тоторға тырышыу хәрәкәте яһарға кәрәк. Уларҙы хәрәкәтләндерергә тырышығыҙ һәм улар мотлаҡ һеҙҙең ихтыярға буйһонасаҡ!

Тормош нисек кенә ауыр булмаһын, барыбер матур! Шуға күрә бирешмәгеҙ - көрәшегеҙ, Стрельникованың тын алыу гимнастикаһы ярҙамында оҙон-оҙаҡ ғүмер кисерегеҙ!

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 2 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.10, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Выборы-2019. Дебаты".
10.00 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Капитанша. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 12.00, 15.50, 23.10, 6.50 Выборы-2019. [12+]**
**10.10, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.10 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Бай бакса. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.55 Выборы-2019. Дебаты. [12+]**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Свидетели".**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**

## 3 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 "Семейные тайны" с Тимуром Еремеевым. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Выборы-2019. Дебаты".
10.00 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Капитанша. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 12.00, 15.50, 23.10, 6.50 Выборы-2019. [12+]**
**10.10 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.15 Республика Live. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.10 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Хоккей. КХЛ. ХК "Куньлунь РС" (Пекин) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.55 Выборы-2019. Дебаты.**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ты у меня одна".**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**

## 4 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 0.25, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 Премьера. "Про любовь". [16+]
3.55 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Выборы-2019. Дебаты".
10.00 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Капитанша. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 12.00, 15.50, 16.15, 23.10, 6.50 Выборы-2019. [12+]**
**10.10 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.10 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.25 Хоккей. КХЛ. ХК "Куньлунь РС" (Пекин) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.55 Выборы-2019. Дебаты. [12+]**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "На Дерибасовской хорошая погода, на Брайтон-Бич опять идут дожди".**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**

## 5 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.20, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 Премьера. "Про любовь". [16+]
0.25 На ночь глядя. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Выборы-2019. Дебаты".
10.00 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Капитанша. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 12.00, 15.50, 16.30, 23.10, 6.50 Выборы-2019. [12+]**
**10.10, 16.40 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.10 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.55 Выборы-2019. Дебаты. [12+]**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Синг Синг".**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**

## 6 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Международный музыкальный фестиваль "Жара". [12+]
23.35 Футбол. Отборочный матч Чемпионата Европы-2020. Сборная России - сборная Шотландии. Прямой эфир из Шотландии.
1.45 Накануне большого боя. Х. Нурмагомедов - К. Макгрегор. М. Холлоуэй - Д. Порье. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Выборы-2019. Дебаты".
10.00 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45, 4.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Аншлаг и Компания. [16+]
0.20 Х/ф "Муж на час". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 12.00, 15.50, 23.10 Выборы-2019. [12+]**
**10.10, 5.30 Д/ф "Тюлени Лоры Белоиван". [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.10 Д/ф "Медвежьи игрища на Тром-Агане". [12+]**
**12.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.00 "Лидеры Башкортостана". Финал.**
**19.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Д/ф "В поисках Серебряного Акбузата". [6+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.55 Выборы-2019. Дебаты. [12+]**
**22.00 Интервью. [12+]**
**23.00, 4.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Варварины свадьбы".**
**2.30 Спектакль "Бэндэбикэ и Ерэнсэ Сэсэн". [12+]**

## 7 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50, 6.10 "Наедине со всеми". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Т/с "Красная королева". [16+]
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10, 22.35 Д/ф Премьера. "Эдуард Хиль. "Через годы, через расстояния..." [12+]
11.05 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
11.50 Новости с субтитрами.
12.00, 15.15 "Несколько смешных парней". [16+]
14.00 День города.
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.20 "Наш Хабиб. Портрет". [12+]
0.30 Бой за титул чемпиона мира UFC. Х. Нурмагомедов - Д. Порье. Прямой эфир. [12+]
2.00 Х/ф "Люди Икс: Апокалипсис". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету". [12+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Петросян-шоу". [16+]
13.50 Х/ф "Мирт обыкновенный". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Этим летом и навсегда". [12+]
1.00 Х/ф "Исцеление". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха. [12+]**
**8.45 Д/ф "Уроки жизни". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 Байтус. [6+]**
**10.45 Сыйырсыҡ. [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай баҡса. [12+]**
**12.00 Д/ф "В поисках Серебряного Акбузата". [12+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.20 Хоккей. КХЛ. ХК "Сибирь" (Новосибирск) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**18.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим... [12+]**
**22.30, 1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00, 4.45 Х/ф "Человек с бульвара Капуцинов". [16+]**
**2.30 Спектакль "Голубушки мои". [12+]**

## 8 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35, 6.10 Т/с "Красная королева". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.15, 12.20 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
14.00 Х/ф "Укротительница тигров". [0+]
16.00 Д/с Премьера. "Страна советов. Забытые вожди". [16+]
18.00 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Большая игра". [16+]
23.45 "КВН". Премьер-лига. Финал. [16+]
1.20 Х/ф "Мы не женаты". [12+]
2.55 "Про любовь". [16+]
3.40 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.20 Х/ф "Золотые небеса". [12+]
7.20 "Семейные каникулы". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
8.00 Утренняя почта. [12+]
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается. [12+]
13.50 Х/ф "Прекрасные создания". [12+]
18.00 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин. [12+]
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Последний эшелон на Восток". [12+]
2.40 Т/с "Ледников". [16+]

### БСТ

**7.00, 7.30, 11.30, 15.30, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**7.15, 7.45 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 "Йома". [0+]**
**8.30, 10.30, 12.30, 17.30, 23.00 Новости (на рус. яз.).**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**9.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Гора новостей.**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.45 Международный кинофестиваль "Серебряный Акбузат-2015". [12+]**
**12.45 "Кумысный путь". [0+]**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [0+]**
**16.15 Историческая среда. [12+]**
**16.45, 17.45 "Визитная карточка Башкортостана". [12+]**
**19.00 Д/ф "В поисках Серебряного Акбузата". [6+]**
**19.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30, 6.00 День выборов.**
**22.15 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15, 4.00 Х/ф "Кубанские казаки". [0+]**
**1.15 Спектакль "Касатка". [12+]**
**3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**



Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **Иксановой Инне Игоревне** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N380-з "О выборах".



Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **Хромец Артуру Леонидовичу** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N380-з "О выборах".

✓ ***Бәләкәй генә бәләләргә ҡапҡа асыуҙан һаҡлан - улар артынан тағы ҙурҙарыраҡ бәләләр инәсәк.***

***(Б. Грасиан).***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ КИНОҺЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**34-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡарға. Хәкимов. Пирамида. Шыбаға. Ревда. Кедр. Манара. Алло. Илбаҫар. Ҡата. Арба. Роза. Тореро. Взвод. Тойғо. Аҡыл. Сөй. Сатыр. Ойоҡ. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Рафиҡов. Поварисов. Алебарда. Хата. Ҡоҙғон. Мәке. Арка. Атлас. Алҡа. Акрил. Йорт. Алоха. Ысыҡ. Шайморатов. Ҡорос. Арпа. Аҡназаров.

*ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨҺӨ*

## ЙЫРЛАЙЫҠ!

**15 августан социаль селтәрҙә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән #Шайморатов флешмобы бара. Унда меңгә яҡын кеше һәм коллектив ҡатнашты, видеояҙмалар килеүен дауам итә.**

Сарала ҡатнашыусылар Заһир Исмәғилевтың Ҡадир Даян һүҙҙәренә ижад иткән "Шайморатов генерал" йырын башҡара, видеоға төшөрә һәм #Шайморатов #ҡоролтай хештегы менән интернетҡа һала. Күп һанлы һорауҙар буйынса социаль селтәрҙәге флешмоб 7 сентябргә тиклем дауам итә. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы флешмобҡа яҡынса йомғаҡ яһаны ла инде. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы бөтә номинанттарҙы Өфөгә саҡыра. Шәмбе, 7 сентябрҙә, көндөҙгө сәғәт 3-тә "Торатау" конгресс-холы янындағы Өфө амфитеатрында меңләгән кеше генерал тураһында йыр башҡара, шулай уҡ йондоҙ формаһында теҙелә. Башҡорт ҡоролтайының бүләктәре лә шунда тапшырыла.

Әйткәндәй, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арнап, Ҡоролтай "Шайморатов вариҫтары" тигән халыҡ проектына старт бирҙе. Акция ваҡытында 112-се кавалерия дивизияһы һуғышсыларының биографик мәғлүмәттәренең тулы исемлеген йыйырға иҫәп тотола.

## БЕҘҘЕҢ ЕГЕТ!

**Башҡортостан студенты Илмир Сәйетбатталов WorldSkills Kazan 2019 донъя чемпионатында "Юғары оҫталыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булды.**

Уның һөҙөмтәһе - 710 мәрәй. "Ташты архитектур эшкәртеү" компетенцияһында ул, мәрәйҙәр буйынса Франция (735), Австрия (736) һәм Ҡытай (743) вәкилдәренән ҡалышып, дүртенсе урынды алды. Сибай күп профилле һөнәрселек колледжы студенты, Башҡортостандың Хәйбулла районы егете Рәсәй Федерацияһының милли йыйылмаһы составына инде. Донъя чемпионатында 63 илдән һәм төбәктән 1300-ҙән ашыу конкурсант ҡатнашты. Донъяның төрлө илдәренән килгән йәш профессионалдар 56 компетенцияла ярышты. Рәсәйҙең милли йыйылмаһы 22 миҙал яуланы. Рәсәй командаһы иҫәбендә - 14 алтын, дүрт көмөш, дүрт бронза миҙал һәм профессионализм өсөн 25 медальон. Дөйөм миҙалдар иҫәбе буйынса беҙҙең йыйылма икенсе урынды алды. Беренсе урында - Ҡытай, өсөнсөлә - Көньяҡ Корея. Ярышҡа йомғаҡ яһау тантанаһында Рәсәй Президенты Владимир Путин һәм WorldSkills International Президенты Саймон Бартли ҡатнашыусыларға һәм тамашасыларға сәләмләү һүҙе менән мөрәжәғәт итте.




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **Закирову Александру Олеговичу** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N380-з "О выборах".

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1440 һижри йыл.***

| Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (3) дүшәмбе | 4:55 | 6:25 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 3 (4) шишәмбе | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 18:32 | 20:02 | 21:32 |
| 4 (5) шаршамбы | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 5 (6) кесе йома | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 18:27 | 19:57 | 21:27 |
| 6 (7) йома | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 7 (8) шәмбе | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:22 | 19:52 | 21:22 |
| 8 (9) йәкшәмбе | 5:06 | 6:36 | 13:30 | 18:20 | 19:50 | 21:20 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

АФАРИН!

# "ӨФӨНӘН ҺӨЙӨҮ МЕНӘН"...

## еңеүселәр араһында



**Баш ҡалабыҙҙа ошо көндәрҙә IV "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара кино фестивале үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Бер быуат элек барлыҡҡа килеп һәм шул ваҡытта уҡ юғары сәнғәт төрө тип аталған кинематограф бөгөнгө көнгә тиклем ошо дәрәжәһен һаҡлай, хатта бөгөнгө көндә кино төшөрөргә теләүселәр ҙә, уны ҡарарға яратыусылар ҙа күбәйә генә бара.**

Ошо сәнғәт донъяһында милли һәм этник кино тигән ғәжәйеп бер күренеш бар. "Хәҙерге технологиялар ҙур тиҙлектә үҫешкән заманда кешеләр үҙ тамырҙары менән бәйләнеште юғалта. Ҡайҙандыр Американан килгән коуч нисек дөрөҫ йәшәргә өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта һеҙҙең өйҙәрегеҙҙә быларҙың барыһын да белгән өләсәйегеҙ ҙә бар. Бына ошо милли йолаларҙы, тарихи хәтерҙе һаҡлау беҙгә заман шауҡымдарына бирешмәҫкә булышлыҡ итә лә инде. Ысынлап та, ҡайһы саҡта нимә хаҡ, нимә ялған икәнен дә аңламай киткән ваҡыттар була. Шунда этник аң, туған тел ярҙамға килә һәм беҙ планетала быға саҡлы меңәр йыл булған тормош ҡанундарына таянып йәшәргә кәрәклеген тоябыҙ", - тине сарала ҡунаҡ булараҡ ҡатнашҡан билдәле режиссер, сценарист, продюсер Кшиштоф Зануссი. Ысынлап та, милли кино, тәү сиратта, рух һәм уны һаҡлаусы тыуған ер, туған тел, милли асылыбыҙға бәйле мәңгелек ҡиммәттәр тураһында һөйләгән жанр. Шуға ла ул иң әүәле беҙҙең үҙебеҙгә кәрәк. Әммә бөгөнгө милли кино - ул башҡаларға үҙең, халҡың, милли асылың тураһында һөйләү ысулы ла. Дүртенсе фестивалдең ҡатнашыусылар иҫәбе, шулай уҡ географик сиктәре йәһәтенән киңәйеүен күҙ уңында тотҡанда, бөгөнгө ижадсылар өсөн быларҙың икеһе лә мөһим икәнен сырамытаһың.

Милли кинематограф Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстанда яҡшы үҫешкәнлеге бер кемгә лә яңылыҡ түгел. "Социаль һәм дәртләндереүсе кино" номинацияһында "Иң яҡшы режиссер эше" призы - Бекзат Пирмановҡа ("Аврора", Ҡырғыҙстан), "Иң яҡшы ҡыҫҡа метрлы нәфис фильм" призы - "Чай" фильмына (Үзбәкстан), Башҡортостан кинематографистар союзының "Малик Яҡшимбәтов исемендәге милли рух өсөн" махсус призы "Песнь древа" фильмы режиссеры Айбек Дайырбековҡа (Ҡырғыҙстан), БР Ғаилә һәм хеҙмәт министрлығының махсус призы "Девушка и море" фильмының төп геройы Таһир Умаровҡа, йәмәғәт эшмәкәре Каринэ Хәбированың махсус призы "Девушка и море" фильмына (Ҡаҙағстан) тапшырылыуы ошо хаҡта һөйләй. Ҡаҙаҡ режиссеры Рөстәм Абашевтың "Казахское ханство. Золотой трон" фильмы конкурстан тыш күрһәтелде һәм милли үҙаңды, рухты күтәрә торған кинонаың ниндәй булырға тейешлегенә ишара яһаны.

Рәсәй төбәктәре - Бүрәт, Яҡут, Башҡортостан республикаларында милли кинематограф әүҙем үҫешә икәнен күрһәтте "Көмөш Аҡбуҙат". Яҡут режиссеры Любовь Борисованың беренсе режиссерлыҡ эше "Социаль һәм дәртләндереүсе фильм" номинацияһында "Иң яҡшы тулы метрлы нәфис фильм" призын яулап ҡына ҡалманы, "Надо мною солнце не садится" картинаһы фестивалдең төп еңеүсеһе тип танылды һәм миллион һумлыҡ сертификат тап уға тапшырылды. Иң ҡыҙығы, был фильмды күреүселәр, глобализация яҡуттарҙың тормошона әллә ни үтеп инә алмаһа ла, киноларын үҙгәрткән, тигән фекергә килгәндер. Иң йыраҡ утрауҙа ла оло донъя менән бәйләнеш - интернет бар һәм бынан бер ҡайҙа ла ҡасып ҡотолоп булмаҫын аңлайһың. Әммә былары - фильмдың тышҡы күренеше генә, уның эске өлөшө ғүмере буйы ауылда йәшәгән, шофер булып эшләгән һәм 73 йәшендә "кино актеры" булып киткән ябай яҡут ҡарты Степан Петровтың ябайлығы, һөйкөмлөлөгө, ихласлығынан туҡылған. Фильмдың уңышы шуның менән дә әһәмиәтлелер. Унан һуң, йәш геройҙың да виртуаль тормоштан тәбиғәткә һәм ергә әйләнеп ҡайтыуының үҙ мәғәнәһе бар: ул шул саҡта ғына яҡшы мәғәнәһендә өлкәнәйә һәм ҡанаттарын нығытып, үҙаллы осошҡа әҙер була. Степан Петров конкурс программаһында ҡатнашҡан тағы бер фильмда - "Царь-птица"ла уйнай. Уның операторы Семен Аманатов "Иң яҡшы оператор эше" номинацияһында билдәләнде.

Әйткәндәй, иң боронғо кино индустрияһы хужаһы Франция ла "Я не хочу быть крестьянином" тигән фильм менән ҡатнашты һәм "Милли һәм этник кино" номинацияһында "Әһәмиәтле теманы аҫҡан өсөн" призы менән бүләкләнде. "Милли һәм этник кино" номинацияһында Әмир Абдразаҡов исемендәге махсус приз - "Султан Агунг" (Индонезия), "Иң яҡшы ҡыҫҡа метрлы нәфис фильм" - "Изгородь" (Алтай), Өфө ҡалаһы хакимиәтенең махсус призы "Последний вальс" оператор эше өсөн Сергей Ландоға (Санкт-Петербург) тапшырылды.

Ошо иң-индәр араһында башҡорт фильмдарының да лайыҡлы баһаланыуы - фестивалдең милли кино үҫешенә индергән өлөшө тураһында һөйләй. Башҡортостан кинематографистар союзының махсус призы - "Ғилван Әмиров исемендәге иң яҡшы оператор эше" "Кластан тыш дәрес" фильмының операторы Рафаэль Сарваевҡа бирелде. "Милли һәм этник кино" номинацияһында режиссер Кирстен Гайнеттың "О чем грустит наш дом" фильмы - "Иң яҡшы документаль фильм", ә режиссер Айнур Аҫҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән" картинаһы "Иң яҡшы тулы метрлы нәфис фильм" призына лайыҡ булды. Ғөмүмән, баһалама рәйесе, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Сергей Шакуров Айнур Аҫҡаров тураһында бик күп йылы һүҙҙәр әйтте. Үҙебеҙҙә үткән фестивалдә күрһәтерлек һәм еңеү яуларлыҡ фильмдар булыуы - ул шулай уҡ ҙур уңыш. Режиссер, баһалама ағзаһы Булат Йосопов хаҡлы билдәләүенсә, беҙгә хәҙер башҡорт киноһының үҙ йөҙөн булдырырға кәрәк. Нигеҙенә милли фекер һалынған һәм һөҙөмтәлә тәрән һәм хис-тойғоға бай фильмдары менән тамашасыларҙы таң ҡалдырған Иран, Япон, Европа һ.б. картиналары кеүек, башҡорт фильмын да айырып торған үҙ теле булыуы мотлаҡ.

Фестивалдең киләсәге тураһында һүҙ сыҡҡанда, уның эргәһендә прокат баҙары ойоштороу кәрәклеге тураһында ла әйтелде. "Мәҙәниәт өлкәһендә дәүләт ярҙамынан тыш йәшәй алмаған сәнғәт ойошмалары бар, мәҫәлән, милли театрҙар. Әммә кино - ул үҙен-үҙе ҡарай һәм үҙ сығымдары өсөн аҡсаны үҙе эшләй алған өлкә. Ҡасан да булһа Рәсәйҙә кино индустрияһы тотошлай коммерцияға нигеҙләнәсәк", - тине Санкт-Петербургтан килгән продюсер Станислав Ершов. Төбәктәрҙә ижад иткән йәш режиссерҙарҙы бөгөн үҙәктә Рәсәй кинематографының мөһим стратегик резервы тип атайҙар икән, улар төшөргән картиналарҙың да киң ҡатлам тамашасыға сығыуына булышлыҡ иткән саралар кәрәктер, моғайын.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР ЕГЕТТЕҢ ҠЫЙЫУЛЫҒЫ...

## мең егеткә дан килтерер

Бер килен алһаң - биленде бер ерҙән, ике килен алһаң - ике ерҙән, өс килен алһаң өс ерҙән быуырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ милкең менән иртәгә донъя ҡуйырға әҙерләнгән кеше кеүек файҙалан, үҙ байлығыңды оҙаҡ йәшәргә йыйынған кеше һымаҡ һаҡла. Ошоларҙы иҫеңдә тотоп, һаранлыҡ менән йомартлыҡ араһындағы урталыҡта ҡала белгән кеше - иң аҡыллыһы.

**(Лукиан).**

Берәүҙәр - вазифаға, икенселәр - батырҙарға, өсөнсөләр - көскә, дүртенселәр Аллаға табына һәм ошо табыныуҙары арҡаһында үҙ-ара бәхәсләшә, ләкин... барыһы ла аҡсаға табына икәнен генә береһе лә танымай.

**(Марк Твен).**

Аҡса барыһын да эшләй, тигәндәр ысынында аҡса өсөн барыһын да эшләй.

**(Д. Галифакс).**

Бәләкәй генә бәләләргә ҡапҡа асыуҙан һаҡлан - улар артынан тағы ҡурҡынысыраҡ бәләләр инәсәк.

**(Б. Грасиан).**

Донъяла бик күп мөғжизәләр бар, әммә кешенең үҙенән дә ҙурыраҡ мөғжизә юҡ.

**(Софокл).**

Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система төҙөп була.

**(Иоганн Гете).**

Мин иртәгәнән ҡурҡмайым, сөнки мин кисәгене күрҙем һәм бөгөнгөнө яратам.

**(Уильям Уайт).**

Ҡайһы ваҡытта бәхетһеҙлекте кисереүе еңелерәк? Һинең дошмандарыңдың тағы ла бәхетһеҙерәк икәнен күргән саҡта.

**(Фалес).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһенән һорайҙар икән:**

**- Ни өсөн һин һәр ваҡыт сабыр һәм түҙемле? Һинең иңеңә әллә ниндәй бәләләр ишерелһә лә, асыуланмайһың да, туҙынмайһың да...**

**Аҡыл эйәһе шулай тип яуап биргән:**

**- Ҙур бәхетһеҙлектәр - ҡыҫҡа ғына бер мәл ул, ә бәләкәйҙәре иғтибарға лайыҡ түгел. Шулай булғас, ниңә туҙынырға һәм түҙемһеҙлек күрһәтергә?!"**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 1704/08